ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 апрель (алағарай) 2022

№13 (1003)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Юғары түбәнселек бит был!




6

Рухың көслө, традицияң бай икән... матди донъяң да етеш буласаҡ!



8-10

Ауылдарҙа... эш бөтә тиме ни!



12

Нәфсеңде йүгәнләргә өйрән!



13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, арзанға яҙылып ҡалығыҙ! 4 апрелдән 14 апрелгә тиклем республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. 14 апрелдән һуң гәзитебеҙгә яҙылыу хаҡы 757 һум 80 тин буласаҡ. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*КӨНАУАЗ*

# ШӘКӘРҘЕ... тоҙларға итәләрме?



**Аслыҡты ла, ҡытлыҡты ла, сәйәси һәм иҡтисади көрсөктәрҙе лә үҙ ғүмерендә күп кисергән халыҡ шундай шартлы рефлексҡа эйә, күрәһең: бер көн эсендә магазин кәштәләрен ҡырып-һеперем, ялт иттереп ҡуйырға ла һәләтле ул. Ҡайһылыр бер хәл-осраҡта шундай ғәҙәт, дөрөҫөрәге, кешенең йәшәү, йәғни үҙ ғүмерен ҡурсыу инстинкты эшләй башлай. Бындай ваҡытта ҡурҡыуҙы ла, намыҫты ла юғалтыусы "өйөр" теләһә ниндәй аҙымға барыуы ихтимал.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ*

# ДУҪЛЫҒЫБЫҘ ҠАҠШАМАҺЫН!

**"Киске Өфө"нөң ошондай күркәм юбилейы гәзит өсөн генә түгел, уны яратып көтөп алыусы уҡыусыларының да байрамы ул. Ошо йылдар эсендә баҫма гәзит уҡыусыларының шатлығы һәм борсолоуҙары, еңеүҙәре һәм хәстәрлектәре менән йәшәне һәм йәшәй. Беҙгә мәғәнәле, йөкмәткеле мәҡәләләр тәҡдим итә, үҙе лә уҡыусыларҙың фекерҙәренә ҡолаҡ һала. Ике тиҫтәгә яҡын йыл уҡыусы менән диалогта булыу гәзит өсөн мәртәбәле күрһәткес ул.**

"Киске Өфө" замана шауҡымына бирелгән һәм ошо сәбәпле үҙ йөҙөн, булмышын юғалтып, ғәйбәт яҙыуға, негатив яңылыҡҡа күп урын биреүгә, уйланыу-кисерештәргә һалырлыҡ мәҡәләләр баҫтырыуға күскән баҫмалар рәтенә төшмәне. Үҙенең мәғәнәле гәзит икәнлеген оҙаҡ йылдар иҫбат итә килә һәм ошоноң менән үҙ бәсен юғалтыуға юл ҡуймай.

Шулай бер ауылға ҡайтҡанда эскәмйәһендә "Киске Өфө"нө уҡып ултырыусы күршенән һорай ҡуйҙым: "Киске Өфө"нө нимә өсөн яратаһың?" "Тура һүҙе өсөн. Һәр мәҡәләһенең кәрәкле һәм файҙалы булғанлығы күңелемә яҡын. Унда мине ҡыҙыҡһындырған бөтә өлкә лә сағылыш таба. Уҡытыусы хеҙмәтенә ҙур урын бирелә. Йәштәрҙе лә онотмайҙар, оло быуынды ла күҙ уңынан ысҡындырмайҙар. Сканвордтары мейене тут баҫыуҙан һаҡлай", - тип өҙөп кенә яуаптар бирҙе күршем. Уның һәр әйткәне дөрөҫ бит.

Бөгөнгө көндә беҙҙе көн дауамында интернет, радио һәм телевизорҙан ишетергә һәм күрергә тура килгән мәғлүмәттең ифрат күп булыуы хайран итә. Һәр яңылыҡ бәләкәй генә шишмә булып, үҙ үҙәненән шаулап-гөрләп ағып килеп, беҙҙең мейегә, мәғлүмәти диңгеҙгә ҡушыла. Ошо күп төрлөлөк һәм уларҙың тиҙ ағышы беҙгә анализларға, хәтерҙә ныҡлап һеңдереп ҡалырға мөмкинлек бирмәй. Ә гәзиткә аҡҡа ҡара менән баҫылған мәғлүмәт бер ҡайҙа ла юғалмай. Бер тапҡыр уҡып сығаһың, бер аҙҙан тағы ла гәзитте ҡулға алып ҡарап алаһың, кәрәк тип тапһаң, бер нисә көндән һуң тағы ла әйләнеп килеп уҡырға була. Ә "Киске Өфө"ләге һымаҡ бай мәғәнәле мәҡәләләр баҫтырылған гәзит бөтөнләй алтынға бәрәбәр. Ундағы мәғлүмәт бер ҡасан да иҫкермәй.

Шулай уҡ гәзиттең тағы ла бер күңелемә яҡын үҙенсәлеге - билдәләнгән шаблонға ғына һалынған тарихи мәҡәләләрҙән азат булыуы. Әллә күпме тарихи мәғлүмәт белдем мин гәзит аша, рәхмәт яуғырҙары. Ошо юлығыҙҙан тайпылмағыҙ, беҙгә төрлө өлкәләге мәғлүмәттәрҙе еткерә тороғоҙ.

Элекке ваҡыттарҙағы кеүек, һәр өйгә тиҫтәләгән гәзит-журнал килеүен, бөгөн ҙур ҡалаларҙа ябылып бөтөп барған гәзит киоскыларының яңынан гөрләп эшләп тороуын теләйем. Иҫләйем, иртән университетҡа барғанда, юл ыңғайы гәзит киоскыһына сират тороп, бер нисә баҫма алып китер инем. Шулай 2003 йылда "Киске Өфө" гәзите күҙгә ташланды ла, алып уҡып ҡарарға булдым. Һәм бына уның менән дуҫ булғанға ла күпме йылдар үтте. Дуҫлығыбыҙ ҡаҡшамаһын, "Киске Өфө".

**Әлфир ЙЫҺАНГИРОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**




12+

*✓ Бөгөн ҡала магазиндары тулы ризыҡ; хаҡы ҡиммәт икән, үҙебеҙ йәшелсә үҫтерәйек, картуф сәсәйек. Ауыл халҡы, ана, баҡса үҫтереп, мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫрап, ниндәй мул йәшәй. Шәкәр ашамағандан берәүҙең дә үлгәне юҡ.*

КӨНАУАЗ



# ШӘКӘРҘЕ...

## тоҙларға итәләрме?

**(Башы 1-се биттә).**

Ошо көндәрҙәге "шәкәр яуы" бының бер сағылышы ине: кәштәләре аҙыҡ-түлектән һыҙылып ятһа ла, ҡайһы бер магазиндарҙа әлеге шәкәр өсөн этеш-төртөш кенә түгел, талаш-тартыш һәм уҙҙәренә контролде юғалтып, бербереһенә көс ҡулланыуға тиклем барып етеүселәр булды. Тейешле контролгә алынып өлгөрмәгән тәүгерәк мәлдәрҙә шәкәрҙе тоҡлап ҡына түгел, тонналап алып, магазиндарҙа өҙөклөк тыуҙырҙылар шулай. Былары инде составында шәкәр булған аҙыҡ-түлек етештереүселәр, алыпһатарҙар һәм ауҙа менән шөғөлләнеүсе эшҡыуарҙар ҡылығылыр. Дөрөҫ, дөйөм ғауғаға бирелеп, шәкәргә ташланған ябай һатып алыусыны ла аңларға була: баҡса миҙгеле, унан емешеләк эшкәртеү осоро яҡынлай. Ләкин шул хәлдә лә был шәкәр ғауғаһы тыуҙырыуға нигеҙ инеме? Бәлки. Ни өсөн тигәндә, был продуктҡа хаҡтар ғауға ҡабынмаҫ элек үк арта башланы түгелме? Бына шунда башланды ла инде мәхшәр, һәм был магазин кәштәләрен сәғәте-минуты эсендә бушатыуға килтерҙе.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөтә ошо осор буйы тармаҡ чиновниктары, белгестәр республикала шәкәр запасының етерлек булыуы тураһында ҡат-ҡат ҡабатлап, халыҡты тынысландырырға тырышты. Ләкин хәҙер һатып алыусыны шәкәр запасынан бигерәк, уның фантастик хаҡы борсой ине, шунлыҡтан, келәттәрҙән сауҙа кәштәләренә сығарыла башлаған татлы аҙыҡ "һә" тигәнсе юғала торҙо. Тап бына ошо күренешкә чиновниктар "высокий спрос - высокие цены" тигән мисәтте һуға ла һалды. Эйе, хаҡтар сәйәсәте, бәлки, тап шулай ҙа яңала торғандыр, уныһы ябай һатып алыусыға ҡараңғы. Һәр хәлдә, республикала ғына түгел, тотош ил буйынса март башынан алып шәкәргә хаҡ 30,8 процентҡа артҡан, айырым төбәктәрҙә был күрһәткес 37,1 процентҡа барып еткән, тип хәбәр итә Росстат. РФ Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт (ФАС) тикшереүҙәре башланып, "шаршау" артында етештереүселәр, сауҙа селтәрҙәре һәм аралашсылар араһында барған яу һәм тартҡылаш факттары асыҡлана. Башҡортостанда ла хаҡтарҙы арттырыу ошо сценарий буйынса бара. 21 мартта республика Прокуратураһы тикшереүҙәренән һуң татлы ризыҡҡа яңалма рәүештә ҡытлыҡ тыуҙырырға һәм уға хаҡтарҙы күтәрергә маташыуҙары өсөн "Башҡорт шәкәре" сауҙа йорто менән Шишмә шәкәр заводы етәкселәренә иҫкәртеү яңала. БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенә һылтанып, РБК мәғлүмәт компанияһы, 24 марттағы хәбәрендә республиканың "Раевшәкәр" компанияһы ошо йылдың 31 июленә тиклем сауҙа селтәрҙәренә шәкәрҙең килоһын 47 һумдан тейәтергә ҡарар иткән, ләкин был финанс баҙары хаҡы, ә ваҡлап һатыуҙа татлы ризыҡ ҡиммәтерәк буласаҡ, тип билдәләй. Рәсәйҙең башҡа етештереүселәре лә РФ Ауыл хужалығы министрлығы менән ФАС-тың ошо саҡырыуына ҡушыласаҡ. Шулай дөрөҫөрәк булыр, сөнки ил өсөн ҡатмарлы мәлдәрҙә үҙ файҙаһын ҡайғыртып, "болғансыҡ һыуҙа суртан эләктерергә" маташыусы бизнес һәм "эш ҡыйратыусы" сауҙагәрҙәр сит ил санкциялары ҡуштандары булып сығасаҡ бит. Ауыл хужалығы министры Дмитрий Патрушев һүҙҙәренсә, "был сара хаҡтар ҡуйыуҙа асыҡлыҡты һәм баҙарҙағы хәлде тотороҡландырырға булышлыҡ итәсәк". 24 мартта Башҡортостандың тармаҡ министрҙары ҡатнашлығында үткәрелгән брифингта БР сауҙа министры Алексей Гусев шәкәр мәсьәләһе менән бәйле төбәктә хәлдең бер аҙ тотороҡланыуы, кәрәк була ҡалһа, был продуктты кеше башына сикле күләмдә арзанраҡ һатыу мөмкинлеген билдәләне.

Бөгөн, әлбиттә, шәкәр хаҡы ғына борсомай халыҡты. Өлкән быуындар әйтмешләй, ниндәй генә хәлдә лә икмәктән айырмаһын Хоҙай. Был тәңгәлдә ниндәй үҙгәрештәр көтөлә: икмәк буласаҡмы һәм был төп ризыҡҡа хаҡ ни хаҡ торор? Был турала брифингта БР Хөкүмәте вице-премьеры, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов һөйләне. "Икмәк буласаҡ. Бындай һорау, ғөмүмән, беҙҙең алда торорға ла тейеш түгел. Ғәҙәттәгесә, йыл һайын Башҡортостанда ярты йылға етерлек күләмдә иген запасы туплана, - тине ул. - Әле сәсеүгә әҙерләнәбеҙ. Былтыр ҡоролоҡ шарттарында ла хатта пландағы 1,8 млн тонна урынына 2,2 млн тонна уңыш йыйып алынды. Быйыл 1,7 млн гектар майҙанда яҙғы (ярауай) культуралар сәсәбеҙ, һауа торошо ғына ыңғай килһен. Ондоң һаҡланыу ваҡыты ярты йылдан үтмәгән хәлдә лә, бойҙай келәттәрҙә бер нисә йыл һаҡларға мөмкин - тимәк, беҙҙең запас етерлек". Һөт һәм һөт ризыҡтары йәһәтенән дә бер ниндәй проблемалар күрмәүен, фәҡәт һөт тултырыу ҡаптары һәм һөт ризыҡтары төрөү материалдары яғынан ғына үҙгәрештәр булыу ихтималлығын билдәләне Илшат Фәзрахманов.

Халыҡты борсоған мәсьәләләр аҙыҡ-түлек менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Кеше ғүмере өсөн тәү кәрәкле әйберҙәр исемлегендә дарыу препараттары ла мөһим урынды биләй. Үҙегеҙ беләгән ни эш бар: экология торошо, халыҡтың көнкүреш хәленең түбән ҡала килеүе, өҫтәүенә, өсөнсө йыл әҙәм балаһын яфалаусы пандемия шарттары бер ҙә генә һаулыҡ файҙаһына һөйләмәй. Тимәк, дарыуға ла ихтыяж ҙур беҙҙә. Әлеге дөйөм ғауға касафаты булдымы, тап ошо осорҙа аптекаларҙан дарыуҙар юғала башланы. Кеше магазиндарҙан дарыуханаларға йүгерҙе, аптека кәштәләрен бушата башланы. Ябай парацетамолдан алып, күпселек ҡулланыуҙа булмаған ҡайһы бер гормональ препараттар, инсулин, левотироксин, карбамазепин кеүек дарыуҙар һатып ала алмаусылар һәм был турала юғары етәкселеккә зарланып, мөрәжәғәт итеүселәр күбәйҙе. Әлеге брифингта ҡатнашыусы БР Хөкүмәтенең ул ваҡыттағы вице-премьеры, республика һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин, республикала сирләләр ғүмере өсөн мөһим булған 800-ҙән ашыу препарат төрҙәренә ҡытлыҡтың булмауы, складта уларҙың барлығы хаҡында белдерҙе. Тик шулай ҙа аңлашылып етмәне: складта бар, ә нинә дарыуханаларҙа юҡ һуң? Бәлки, әлегесә, бында ла бер ҡулға күпләп һатып алыу ҡытлыҡ килтереп тыуҙырғандыр? Ә бит дарыу - шәкәр ҙә, башҡа төр ризыҡ та түгел, уны күпләп һатып алыу хәүеф менән бәйле, сөнки дарыуҙың тәғәйен һаҡланыу ваҡыты бар, уны дөрөҫ һаҡлау шарттарын үтәү ҙә мотлаҡ. Дарыу хаҡтарына бәйле М.Забелин, иң кәрәкле мөһим препараттарға хаҡтар дәүләт тарафынан көйләнә, тине. Етештереүсе ҡуйған хаҡ Дәүләт реестрында теркәлә һәм уларға хаҡ арттырыу закон тарафынан тыйыла. Ә инде ошо реестрға инмәгән дарыуҙарға хаҡ баҙар хаҡтарына һәм конкуренцияға бәйле тип билдәләнде.

Брифингта ҡатнашыусы министрҙар билдә икмәк, ярма, шәкәр, һөт кеүек аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ булмаясаҡ, тип ышандырҙы. Ошо урында шөкәр итергә ине лә, тик бына хаҡтар... Бында ит, йомортҡа, шыйыҡ май һәм айырыуса хаҡтары буйынса рекорд ҡуйыусы картуф , кәбеҫтә, башҡа йәшелсә-емеш хаҡтары һөйләшеү темаһынан ситтә тороп ҡалды. Ә промтауарҙар, атап әйткәндә, көнкүреш техникаһы, электроника, металл изделиелар, ҡағыҙ, кейем-һалым хаҡында әйтеп торорға ла түгел, былай ҙа аңлашыла торғандыр: уларҙың күбеһе санкция шарттарына бәйле. Тик бына урындағы, үҙебеҙҙең тауарҙарға хаҡты көйләүҙә үҙебеҙгә бәйле лайыҡлы тәртип булдырып, ғауға һәм урынһыҙ паникаға бирелмәй, этешеп-төртөшөп, кеше көлдөрмәй, дошман тирмәненә һыу ҡоймай ғына йәшәргә булдыра алабыҙмы?

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм, өләсәй-олатайҙарыбыҙ бер һыныҡты бишкә бүлеп, берберенән хәстәрләүе менән берҙәм һәм көслә булған, еңеп сыҡҡан. Ә бөгөн ҡала магазиндары тулы ризыҡ; хаҡы ҡиммәт икән, үҙебеҙ йәшелсә үҫтерәйек, картуф сәсәйек. Ауыл халҡы, ана, баҡса үҫтереп, мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫрап, ниндәй мул йәшәй - зарланыу гонаһ. Шәкәр ашамағандан берәүҙең дә үлгәне юҡ, ә бына уның зыяны - шәкәр сире -үлемесле хәүеф. Еләк-емеш эшкәртеүҙең шәкәрһеҙ ысулдары ла бихисап: киптер, туңдыр, үҙ һутында эшкәрт - былай күпкә файҙалыраҡ та әле. Юғиһә, тоҡлап шәкәр туплап, уны нимә, тоҙларғамы инде?..

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Табип-диетолог Наталья Круглова күп күләмдә шәкәр һаҡлауҙың нимәгә килтереү хәүефе тураһында һөйләне. Уның әйтеүенсә, Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы көнөнә 30 грамдан да артыҡ шәкәр ҡулланмаҫҡа кәңәш бирә, шулай булғас, уның бер ҡабы ғына ла әллә күпмегә етә. "Әгәр кеше әлеге күләмде биш процентҡа ғына булһа ла кәметә икән, был һаулыҡты һаҡлауҙа ҙур файҙа буласаҡ", - ти Наталья Круглова. Өйҙә күп күләмдә шәкәр һаҡлап тотоу кешене был аҙыҡ төрөн күберәк ашарға этәреүе бар, ә был һаулыҡ өсөн бер ҙә файҙаға түгел: уның төрлө сирҙәргә юлыҡтырыуы мөмкин, ти эксперт. Бынан тыш, шәкәр запасында бөжәктәр үрсеүе лә ихтимал. "Шәкәр, әлбиттә, сифатын юғалтмайынса оҙаҡ һаҡлана торған аҙыҡ. Ул хатта оҙаҡ ятып киткән осраҡта ла хәүеф тыуҙырмай. Ләкин, әйтеүемсә, унда бөжәктәр үрсеүе бар",- ти табип-диетолог.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йәй башында Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһы йоҡтороуҙың сираттағы тулҡыны көтөлә. Был хаҡта республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында белдерҙеләр. "Коронавирусҡа бәйле хәл тотороҡланды, ләкин тынысланырға иртәрәк! - тинеләр министрлыҡта. - Йәй башында Азия штамы сирҙең таралыуына сәбәпсе булыуы ихтимал". Билдәләнеүенсә, 2022 йылдың 1 апреленә Башҡортостанда сирлеләрҙең дөйөм һаны - 276 641. Һуңғы тәүлектә - 511 яңы осраҡ, 4 пациент яҡты донъя менән хушлашҡан.

✓Өфөгә эш сәфәре менән Төркиәнең Машина эшләүселәр союзы президенты Эмре Генджер килде. Республика Башлығы: "Күптәнән Төркиә бизнесының машиналар эшләү блогы менән бәйләнештәрҙе яйға һаларға теләй инек. Беҙҙең үҙ-ара ҡыҙыҡһыныуҙар бар, Төркиәнең Машина эшләүселәр союзы президенты Эмре Генджер менән ошондай хеҙмәттәшлек мәсьәләләрен тикшерҙек", - тине. Шулай уҡ осрашыуҙа Башҡортостан компаниялары продукцияһын Төркиә баҙарҙарына сығарыу пландары тикшерелде.

✓Республикала "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" программаһын финанслау арттырыла. Оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шундай ҡарар ҡабул итте. Башҡортостандың Туризм буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Ринат Фәтҡуллин һүҙҙәренсә, Башҡортостанда өлкән быуын һәм инвалидтар өсөн туризм менән шөғөлләнеү мөмкинлеге бар. Юллама хаҡының артыуына ҡарамаҫтан, социаль тур өсөн хаҡтың бер өлөшөн дәүләт ҡаплай. Республика буйынса йыллыҡ квота 900 кеше тәшкил итә.

✓Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Украинала махсус операция барышында һәләк булған һалдаттарҙың ғаиләләренә һәр яҡлап ярҙам күрһәтеү кәрәклеген әйтте. "Республика өсөн бик ауыр аҙна булды. Өфөлә, Күмертауҙа, Салауатта, Бөрйән районында, Нефтекамала Башҡортостан улдары һуңғы юлға оҙаттыҡ", - тине республика етәксеһе. Ярҙам күрһәтеү йәһәтенән муниципалитет башлыҡтарына һәр аныҡ мәсьәләне хәл итеүгә шәхсән ҡушылырға кәрәк, тип билдәләне Радий Хәбиров.

БЫЛ АЙҘА...

# ӨЛӨШЛӨ АЙ, САУАПЛЫ АЙ ЕТТЕ



**...Яңы ай тыуғанын күргәндә, Рамаҙанды ҡаршы алғанда Бәйғәмбәребеҙ: "Эй, кешеләр! Аллаһтың игелектәр, мәрхәмәт-шәфҡәт һәм гонаһтарҙы ярлыҡау менән тулы айы яҡынлашып килә. Аллаһ уны Үҙе бөтә айҙар араһында иң яҡшыһы тип атаны", - тип әйткән.**

Шулай итеп, яҙҙың икенсе айы - алағарай тыуа. Быйыл изге Рамаҙан тулыһынса уның өлөшөнә төшә; өлөшлө ай, сауаплы ай етте. 1 апрель көндөҙгө аҡшам намаҙынан һуң (ҡояш байығас) Рамаҙан айы инеп, иртәнсәк - **2 апрель** - сәхәр эскәндән һуң мосолман донъяһында ураҙа башланды. "Рамаҙан айы бик хөрмәтле ай. Ул айҙа Аллаһтан кешеләргә тура юл күрһәтеүсе Ҡөрьән инделде. Һеҙҙән Рамаҙан айына килеп еткән һәр кем ураҙа тотһон! Аллаһ һеҙгә еңеллек теләй, ауырлыҡ теләмәй..." ("Әл Бәҡара" (Һыйыр) сүрәһе, 185-се аят). Ҡөрьән инә башлаған көн анныҡ ҡына билдәле булмаһа ла, уны Бәйғәмбәребеҙ Рамаҙан айының һуңғы ун көнөндәге таҡ һанлыһының береһенән эҙләргә ҡушҡан. Ҡәҙер кисе быйыл **27 апрелдең 28-енә** ҡараған төнөндә тип фаразлана. Мосолмандар был тәҡдир кисен йоҡламай, ғибәҙәт ҡылып үткәрә.

Хәрәм эштәр, хәрәм аштар, әҙәмдәрҙең бер-береһенә ҡул күтәреп тороуҙары, тел тейҙереүе кеүек гонаһ шомлоҡтары күбәйеп киткән был заманда дин һәм Ислам тәрбиәһенә ихтыяж ҙур. Ураҙа тотҡан көндәр бәндәләрҙе хәрәм ғәмәлдәр, хәрәм мал һәм башҡа төр боҙоҡлоҡтарҙан ҡурсыр, ғүмеребеҙ ағышы, йәшәйеш рәүешебеҙ хаҡында уйланырға мәжбүр итер. Сауаплы эштәр, изгелектәр эшләйбеҙме, ғүмер юлыбыҙҙа аҙашмайбыҙмы? Был айҙа һәр кем битарафлыҡтан, ғәмһеҙлектән айныһ, ғәфләт йоҡоһонан уяныһ, үҙ-үҙенә ошо һорауҙарҙы төбәһен, шуларға яуап эҙләһен ине. Күҙе тоноп ҡайҙалыр ашыҡҡан, донъя ҡыуған, үҙен генә өҫтөн ҡуйып, башҡаларҙы һанламаған, кеше менән яманлашҡан-яғалашҡан әҙәмдәр төүбәгә килеп, Аллаһтан ярлыҡау һорап ялбарһын. Һорағыҙ - һорағанығыҙҙы бирермен, һорағыҙ - гонаһ эшләгәндәрҙе лә хатта ярлыҡап ҡына торормон, тигән Хаҡ Тәғәлә. Ураҙа айы бының өсөн иң яҡшы ай. Ул әҙәм балаларын тыныслыҡҡа, татыулыҡҡа, үҙ-ара игелеклеклеккә булырға өйрәтә. "Аллаһ тарафынан өс кешенең доғаһы яуапһыҙ ҡалмаҫ, - тигән Бәйғәмбәр, - улар - ураҙа тотҡан кешенең ауыҙ асҡанға тиклем ҡылған доғаһы, ғәҙел әмирҙең һәм ҡыйырһытылғандарҙың доғалары".

Тәүге көнөнән алып ахырынаса ураҙаға тап килеүсе апрель айында ике таҡыр яңы ай тыуыу (новолуние) көнө лә билдәләнә **(1 һәм 30)**. Ураҙа булыуы өҫтөнә, тағы ла ошоноң өсөн дә был осор яңырыу, һәр яңы башланғыстар өсөн уңышлы, юлдар эҙләү йәһәтенән астрологтар тарафынан да юғары баһалана. Яңы ай тыуған көндәр шәхси тормошта, эштә, бизнеста, яңы мөнәсәбәттәр ҡороуҙа, ижади башланғыстарҙың юл ярыуында уңыш килтерә, ти улар.

Ижад, тигәндән, был айҙа, ысынлап та, байтаҡ ҡына талант эйәләре донъяға килгән: шағирҙар, йырсылар, композиторҙар, ғалимдар... Шулар араһынан республикабыҙ йәмәғәтселеге **11 апрелдә** тағы бер күренекле талант эйәһе - БАССР-зың атҡаҙанған рәссамы, "Почет билдәһе" ордены кавалеры, тыуған төйәге булған Башҡортостаныбыҙҙың ысын патриоты Алексей Александрович Кузнецовтың (1927-1990) тыуыуына 95 йыл тулыуҙы билдәләйәсәк. Кем ул Кузнецов? Күптәр уны дәреслек китабына ингән легендар живопись өлгөһө - "Салауаттан һорау алыу" (1955) картинаһының авторы булараҡ ҡына беләләр, ә бит шул уҡ ваҡытта был шәхестең башҡорт донъяһын данлаусы, Өфөлә тыуып-үҫһә лә, икенсе яраткан төйәгенә әүерелгән Бөрйән төбәгенән яҙылған картиналары бик күп. Башҡорт халҡының тарихын ул "Салауаттан һорау алыу" полотноһына тотонор алдынан бик яҡшы өйрәнә, күп уҡый. Был картина 1955 йылда Мәскәүҙә Башҡорт сәнғәте декадаһында ҡатнашып, юғары баһаға лайыҡ була һәм рәссамға киң билдәлелек килтерә. Ә инде 1959 йылда үҙенең бер рәссам дуҫы менән резина кәмәлә Нөгөш буйлап баштанған ике аҙнаға яҡын сәфәре уларҙы Бөрйән районының Ғәлиәкбәр ауылына килтереп сығарғас, ул саҡтарҙа сит әҙәм әллә ни аяҡ баҫмаған әкиәт донъяһылай серле ошо төбәккә башкөллөй ғашиҡ була рәссам. "Боронғолоҡ аңҡып торған" тәбиғәтенә, ҡунаҡсыл һәм саф күңелле халҡына - хәтерендә мең йыллыҡ тарих йөрөткән аҡһаҡалдарына, талантлы ҡурайсыларына, батыр рухлы иргеттәренә, баҫалҡылыҡы менән матур ҡатын-ҡыҙҙарына... Ысын мәғәнәһендә интеллигент булараҡ, ул башҡорт телен өйрәнә һәм урындағы халыҡ менән иркен аралаша. Һөҙөмтәлә тап улар яңы картиналарының геройҙарына әйләнә лә инде. Шулай итеп, Бөрйән темаһына портреттар һәм пейзаждарҙан тотош галерея барлыҡҡа килә: "Ҡурай тураһында легенда", "Бөрйән айыусыһы", "Динислам бабай", "Бөрйән ҡатындары", "Бабай", "Умартасы" һәм башҡалар. Билдәле рәссамдың бүтән төбәктәрҙән башҡа эштәре лә күп, әлбиттә, ләкин уның Бөрйәнөнә булған һөйөүе, йылылыҡ һәм туғанлыҡ хистәре, илһөйәрлеге тап ошонан яҙылған картиналарында көслөрәк сағыла кеүек. Ижад кешеһенең күңел дарьяһы ҡатмарлы: йәшәү, кеше ғүмере хаҡында уйланыуҙар, артылыштар алдында икеләнеүҙәр... Алексей Кузнецов бындай мәлдәрҙә Бөрйән тәбиғәтенә, унда йәшәүсе сая рухлы, саф тойғоло геройҙары, аҡыл эйәһе аҡһаҡалдары янына ашыҡҡан. Бөтөн тормош һәм ижад юлы уның ысын мәғәнәһендә интеллигент асылын раҫлап тора. Бөгөнгө ҡайһы берәүҙәр кеүек, нимәгә миңә төп халыҡ теле, тип, үҙен өҫтөн ҡуймай, рус милләтенән булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт телен үҙләштереп, шул телдә аралашып, туған тәбиғәтен данлап, тормош аҡылы туплаған, күпте күргән башҡорт халҡының тарихын, эпостарын өйрәнеп ижадына илһам алған. Рәссамдың тыуыуына 95 йыл тулыуға арнап, картиналарынан күргәҙмә ойошторолһа, уның ижады менән күберәк кешегә яҡындараҡ танышыу мөмкин булыр ине.

Апрель - тәбиғәттең ныҡлап уяныу, ҡарҙан әрселеү ваҡыты. Ай баштарына йылғакүлдәргә шөре сыҡһа, ай урталары-аҙаҡтарына боҙ ҡуҙғала. "Ирекле пресса" сайты ай урталарына, йәнәһе, күп төбәктәрҙе һыу баҫа, ҡар һәм ҡойма ямғырҙар, ел-дауыл көтөлә, тип ил буйынса ғәҙәти булмаған һауа торошо "вәғәҙәләй", ләкин рәсми күҙаллауҙар буйынса, синоптиктар әлегә бер ниндәй ҙә аномалия фаразламай. Ай баштарында Уралда һалҡынса һауа торошо - 3-6 градус йылы, икенсе ун көнлөк ахырына Көньяҡ Уралда көндәр 18-23 градусҡаса йылыта, ти улар. Йылы яҡтан ҡоштар ҡайта башлай. Әйткәндәй, был ай башында уҡ улар хөрмәтенә Халыҡ-ара ҡоштар көнө **(1)** билдәләнә. Иң беренселәр булып ҡыр өйрәктәре, ҡыҙылтүш, аҡсәпсек, барҡылдаҡ, улар артынса торналар ҡайта. Яҙ килгәнен һиҙеп, ҡоштоң ҡошо алыҫ илдәрҙән тыуған яғына ашыға, елпенеп-елкенеп ҡайта. Уларҙың был тәбиғәте ил өсөн ҡатмарлы мәлдә тыуған-үҫкән, ашап-эскән ерен ташлап, тырым-тырағай ситкә ҡасҡан беҙнең һәм шоу вәкилдәре ҡылығына ни тиклем дә ҡапма-ҡаршы булыуы менән шаҡ ҡатыра. Ҡоштарҙы беҙ һағынып, һөйөнөп ҡаршылаһаҡ, был зимагурҙар ни йөҙҙәре менән иленә ҡайтып күренерҙәр икән?..

**Алағарайҙа билдәләнәсәк иҫтәлекле ваҡиғалар:** Көлкө көнө, Математик **(1)**, Беларусь менән Рәсәй халыҡтарының берләшеү көндәре, Халыҡ-ара балалар китаптары **(2)**, Геолог **(3)**, Тәфтишсе **(6)**, Бөтөн донъя һаулыҡ **(7)**, Хәрби комиссариат хеҙмәткәрҙәре **(8)** көндәре, Һауа һөжүменә ҡаршы оборона ғәскәре **(10)**, Фашист концлагерҙары тотҡондарын азат итеү **(11)**, Авиация һәм космонавтика **(12)** көндәре, Башҡортостан халыҡтарының милли кейемдәре, Бөтөн донъя мәҙәниәт, Экологик белем **(15)** көндәре, Халыҡ-ара ҡомартҡылар һәм тарихи урындарҙы һаҡлау **(18)**, РФ Мәшғүллек хеҙмәте, Рәсәй полиграфияһы **(19)** көндәре, Рәсәйҙә донорҙар **(20)**, Урындағы үҙидаралыҡ **(21)** көндәре, Халыҡ-ара Ер **(22)** көнө, Өфө сәнғәт училищеһы асылыуға - 100 йыл **(23, 1922)** тулыу көнө, Православныйҙар Пасхаһы, Йәштәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек **(24)** көндәре, Ҡыҙ бала **(25)** көнө, Ҡәҙер кисе **(27)**, Бөтөн донъя хеҙмәтте һаҡлау **(28)**, Халыҡ-ара бейеү **(29)**, Янғын һағы, Халыҡ-ара ветеринар табип **(30)** көндәре.

**Алағарайҙа тыуғандар:**

**1 -** шағир, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ғ.Сәләм премияһы лауреаты **Хисмәт Юлдашевҡа - 65 йәш** (1957).

- йырсы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Римма Амангилдинаға - 50 йәш** (1972).

**3 -** композитор, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Юлай Үҙәнбаевҡа - 55 йәш** (1967).

**11 -** рәссам, Башҡортостанда һынлы сәнғәткә нигеҙ һалыусыларҙың береһе **Ҡасим Дәүләткилдиевтың тыуыуына - 135 йыл** (1887-1947).

**- 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһын фронтҡа оҙатыуға - 80 йыл** (1942).

- педагог, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, М.Ғафуриҙың Өфөләге мемориаль йорт-музейы директоры **Ғәзилә Бүләковаға - 65 йәш** (1957).

**12 -** йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Сибай концерт-театр берекмәһенең вокаль ансамбле етәксеһе **Рәмил Туйсинға - 50 йәш** (1972).

**13 -** табип-хирург, ғалим, медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, йәмәғәт эшмәкәре **Марс Юлдашевҡа - 85 йәш** (1937).

**18 -** тарихсы, этнограф, архив белгесе, тарих фәндәре кандидаты **Юлай Юлдашбаевҡа - 60 йәш** (1962).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Коронавирус инфекцияһы менән сирләгәндәргә ярҙам иткән медицина хеҙмәткәрҙәренә страховка түләүҙәренә Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең резерв фондынан 4 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә. Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ошо тураһағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Резерв фондтан яңы транш 2022 йылдың II кварталы аҙағына тиклем ошо ярҙам сараһын финанслауҙы тулы күләмдә тәьмин итергә мөмкинлек бирергә тейеш.

✓15 апрелдә республика аграрийҙары баҫыуға сығырға һәм яҙғы баҫыу эштәрен башларға тейеш, тип хәбәр итте Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Уның һүҙҙәренсә, быйыл аграрийҙар етен, кукуруз, ҡарабойҙай һәм шәкәр сөгөлдөрөн сәсеү майҙандарын арттырырға ниәтләй. Быйыл иген баҫыуы 1,7 миллион гектар була. Йәмғеһе 18 муниципаль районда 47 мең гектар майҙанда шәкәр сөгөлдөрөн сәсеү планлаштырыла.

✓Һуңғы ваҡытта металдан һәм башҡа төҙөлөш материалдарынан етештерелгән продукцияның уртаса алғанда 9 процентҡа хаҡы төшөүе күҙәтелә, тип белдерҙе Рәсәйҙең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирек Фәйзуллин. Рәсәй Федерацияһы вице-премьеры Марат Хөснуллин һүҙҙәренсә, илдә металл продукцияға хаҡтың артыуын туҡтатып булды. Рәсәйҙә эске баҙарында йылына 42 миллион тонна ҡара металл ҡулланыла, шуның 29 миллион тоннаһы, йәғни 70 проценты тиерлек - төҙөлөш тармағында.

✓Әлегә йәйҙең ғәҙәти килеүе фаразлана. Рәсәй Гидрометүҙәге белдереүенсә, Башҡортостанда апрелдән сентябргә тиклем температураның уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә ярашлы булыуы көтөлә. Апрель - норманан йылыраҡ, яуым-төшөм норманан аҙыраҡ була. Май, июнь, июль һәм август температура, яуым-төшөм буйынса нормаға ярашлы көтөлә. Синоптиктар әйтеүенсә, оҙайлы осорға фараздар анык була алмай - 70 проценттан ашмай. Ҡыҫҡа ваҡытҡа фараздар аныҡыраҡ.

✓Башҡортостанда 55 меңдән ашыу ишле ғаиләгә һәм инвалид бала тәрбиәләгән 8,5 меңгә яҡын ғаиләгә бушлай ер участкалары бирелә. "Икенсе йыл рәттән республикала күп балалы һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә ярҙам сараһы - ер участкаһы йәки 250 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү алырға тәҡдим итәбеҙ", - тине Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская.

✓ *Мәғариф тураһындағы ғәмәлдәге законға төҙәтмәләр, уҡыусыларға этномәҙәни йүнәлештәге белем биреү программаларын һайлап алыуҙан тыш, мәктәптә 11 йыл дауамында туған телдә һәм әҙәбиәтте өйрәнеү мөмкинлеген бирер ине.*



ҠЫҪҠАСА

# БИТЛЕК КЕЙӘБЕҘ

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе.** Документтың яңы редакцияһына ярашлы, республикала 200 кеше ҡатнашлығындағы эшлекле, мәҙәни, күңел асыу, спорт һәм башҡа сараларҙы уҙғарыу өсөн оперштаб ҡарары талап ителмәй. Шул уҡ ваҡытта 500-ҙән күберәк кеше ҡатнашҡан саралар (мәҙәниәт һәм мәғариф учреждениеларында үткәрелгәндәренән тыш) Рәсәй Федерацияһының Баш дәүләт санитар табибы ҡарары талаптарын иҫәпкә алып ойошторолорға тейеш. Башҡортостанда йәшәүселәргә коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакцинация йәки ревакцинация үтергә кәңәш ителә.1,5 метрлыҡ социаль аралыҡты мотлаҡ һаҡлау, бирсәткә кейеү, шулай уҡ хеҙмәткәрҙәрҙең 50 процентын өйҙән эшләүгә күсереү тураһында тәҡдим ғәмәлдән сығарыла. Дәүләт органдары һәм муниципалитеттар етәкселәре граждандарҙы шәхси ҡабул итергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта битлек режимын үтәү мотлаҡ.

✓ **Рәсәйҙә үҙебеҙҙә етештерелгән медицина изделиелары етерлек, ассортименты киңәйтеү тураһында уйларға кәрәк, тип белдерҙе Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко.** Уның әйтеүенсә, Рәсәйҙә титандан һәм башҡа материалдарҙан медицина изделиелары әҙерләгән производстволар етерлек. "Улар етештерелә, мәсьәлә ассортимент сәйәсәтен киңәйтеүгә ҡайтып ҡала", - тине ул. Тағы ла министр билдәләүенсә, Рәсәйҙә хәҙер ҡайһы бер дарыуҙарға һорауҙың норманан 10 тапҡырға күберәк булыуы күҙәтелгән. "Иң ғәжәбе шул: препараттарҙың ярәҡлылыҡ ваҡыты бар. Ҡайһы берҙәренең ике йыл ғына. Был дарыуҙарҙы билдәле бер ваҡыт эсендә ҡулланып бөтөп булмай бит", - тине ул. Шулай уҡ Мурашко ил төбәктәрендә льготалылар өсөн дарыу запасы ярты йылға тиерлек етерлек икәнен әйтте.

✓ **Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡайһы бер табиптар өсөн бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата компенсация тураһында бойороҡҡа үҙгәрештәр индерҙе.** 2020 йылдан дәүләт медицина учреждениеларына билдәле бер вазифаларға эшкә урынлашҡан табиптарға төбәк бюджетынан 1 миллион һум бирелә. Бынан алда исемлектә 16 белгес ине, 2022 йылдың мартынан ул киңәйтелде, хәҙер иһә - 30. Улар - акушер-гинеколог, ғаилә табибы, паллиатив медицина ярҙамы табибы, ашығыс медицина ярҙамы табибы, УЗИ табибы, функциональ диагностика табибы, анестезиолог-реаниматолог, балалар кардиологы, балалар хирургы, инфекционист, кардиолог, невролог, неонатолог, онколог, ЛОР, офтальмолог, патологоанатом, педиатр, участка педиатры, психиатр, участка психиатры, психиатр-нарколог, рентгенолог, терапевт, участка терапевы, травматолог-ортопед, уролог, хирург, эндокринолог, эндоскопист. Аҡсаны махсус комиссия тәғәйенләй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠАЛАР ҘА ХУПЛАЙ

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Дәүләт Думаһына "Рәсәй Федерацияһының мәғариф тураһында"ғы Федераль законына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проектын тәҡдим итергә уйлай.**

"Закон проекты дөйөм белем биреү ойошмаларында туған телдә һәм туған әҙәбиәтте өйрәнеүгә ҡағыла, - ти Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Ул туған телен һәм әҙәбиәтен тәрәнерәк үҙләштерергә теләгән балаларға ошо фәндәрҙе өйрәнеү өсөн шарттарҙы киңәйтә". Мәғариф тураһындағы ғәмәлдәге законға төҙәтмәләр, уҡыусыларға этномәҙәни йүнәлештәге белем биреү программаларын һайлап алыуҙан тыш, мәктәптә 11 йыл дауамында туған телдә һәм туған әҙәбиәтте өйрәнеү мөмкинлеген бирер ине, тип иҫәпләй республика парламентарийҙары. "Закон проектында Рәсәй Федерацияһы субъекттарының башҡарма власть органдарына этномәҙәни йүнәлештәге программаларҙы тормошҡа ашырған белем биреү ойошмаларына балаларҙы ҡабул итеү ҡағиҙәләрен үҙҙәренә билдәләү мөмкинлеген бирергә, шулай уҡ туған тел һәм туған әҙәбиәт буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы форматын үҙгәртергә тәҡдим ителә, - ти Константин Толкачев. - Атап әйткәндә, башҡа фәндәрҙән БДИ кеүек, төбәк дәүләт имтиханын үткәрергә, ә уның һөҙөмтәләрен юғары уҡыу йортона туған тел уҡытыусылары йәки башҡа белгестәрҙе әҙерләү буйынса профилле белем биреү программаларына ҡабул иткәндә иҫәпкә алырға".

Дөйөм алғанда, закон проекты Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен һәм милли мәҙәниәтен һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән. "Закон проектын Дәүләт Думаһына тәҡдим итер алдынан беҙ "түңәрәк өҫтәл" үткәрҙек, унда Рәсәй Федерацияһының ун милли республикаһынан депутаттар, мәғариф хеҙмәткәрҙәре һәм ғалимдар менән ошо хаҡта фекер алыштыҡ, - тип хәбәр итә республика парламенты спикеры. - Хеҙмәттәштәребеҙ закон проекты концепцияһын хупланы".

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘМӘЙ...

**Рәсәй Хөкүмәте туристик объекттар булдырыуға инвестиция һалыусы компанияларҙы һалымдан азат итте - был ташлама объекттар ҡулланыуға тапшырылғандан йәки реконструкцияланғандан һуң биш йыл дауамында ғәмәлдә.**

Шулай уҡ әле эшләгән ҡунаҡханалар йәки башҡа урынлаштырыу урындары хужалары өсөн дә льгота бар һәм ул 2027 йылдың 30 июненә тиклем ғәмәлдә. Был сара барлыҡ Рәсәй территорияһына тарала. Ростуризм мәғлүмәттәре буйынса, әле Рәсәйҙә туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ индустрияһы өсөн донъяла иң юғары һалым ставкалары ҡулланыла - 20 процент. Шул уҡ ваҡытта ҡунаҡхана ойошмаларында өҫтәлгән хаҡ түләлыһынса ойошмала булдырыла, шуға күрә НДС түләү буйынса көсөргәнеш әйләнеш һалымына тап килә һәм туристик тармаҡта норма 10,5 процент булғанда, 30 процент тәшкил итә. Бындай көсөргәнеш тармаҡты иҡтисадтың башҡа өлкәләре менән сағыштырғанда дәғүәселеккә һәләтһеҙ һәм инвесторҙар өсөн ылыҡтырғыһыҙ итә. Яңы сара ҡунаҡхана-туризм тармағына ярҙам итәсәк һәм уға тиҙ үсешеү мөмкинлеген бирәсәк.

# ҺЫУ БУЙЫНДА...

**Башҡортостанда эшҡыуарҙар һыу сығанаҡтарының икенсе һыҙатындағы ерҙәрҙе һатып алырға мөмкин. Был ил Президентының ғәмәлгә ингән указына ярашлы атҡарыла.**

- Ҡанун ҡабул ителгәнгә тиклем бындай территориялар әйләнеше сикләнгән ерҙәргә инә һәм уларҙы бары тик ҡуртымға алырға мөмкин ине. Был бигерәк тә Өфө агломерацияһы өсөн көнүҙәк булды, сөнки һыу буйҙарындағы күп ер сикләүҙәр арҡаһында әйләнешкә индерелмәне. Хәҙер ерҙе ҡуртымға алыусылар, шулай уҡ бәләкәй һәм урта бизнес субъекттары уларҙы үҙ милкенә күсерә ала, - ти ер һәм милек мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Дмитрий Суслин.

Закон икенсе һыҙатта урынлашҡан ер участкаларын бүлеү мөмкинлеген дә бирә. Икенсе зона сиктәрендәге ерҙәрҙе уларҙа урынлашҡан биналар йәки ҡоролмалар хужалары, әгәр объекттар законда ҡаралған тәртиптәрҙә ярашлы теркәлһә, һатып алырға хоҡуҡлы. Әсәр һыу һәм хужалыҡ-көнкүрештә һыуменән тәьмин итеү сығанағын санитар һаҡлауҙың икенсе зонаһы - сигендә төҙәләш эштәре алып барыу һәм ер биреү мөмкин булған, әммә сығанаҡтарҙы һаҡлау маҡсатында ер участкаларын файҙаланыуға сикләүҙәр ҡуйылған территория.

# ЯРАМАЙ!

**РФ Хөкүмәте 2022 йыл һуңына тиклем илдән алып сығырға ярамаған тауарҙар исемлеген билдәләне. Тыйыу быға тиклем индерелгән ҡорамалдарға ҡағыла.**

Исемлектә технологик, телекоммуникацион, медицина ҡорамалдары, транспорт саралары, ауыл хужалығы техникаһы, электр аппаратуралары - барлығы 200 төр тауар, шул иҫәптән - тимер юл вагондары һәм локомотивтар, контейнерҙар, турбиналар, металл һәм таш эшкәртеү өсөн станоктар, мониторҙар, проекторҙар, пульттар һәм панелдәр һ.б. инә. Был Рәсәй баҙарында тотороҡлолоҡ булдырыу өсөн кәрәк. ЕАЭС ағзалары, Абхазия һәм Төньяҡ Осетиянан тыш, барлыҡ илдәргә лә тауар сығарыу тыйыла. Рөхсәтте Ауыл хужалығы, Транспорт, Сауҙа, Цифрлаштырыу, Тәбиғәтте файҙаланыу министрлыҡтары бирә.

Бынан тыш, Хөкүмәт дуҫ булмаған илдәргә йыл һуңына тиклем ҡайһы бер төр ағас һатыуҙы тыйҙы. Дуҫ булмаған илдәргә Украинаны ҡоралһыҙландырыу буйынса махсус операция башланғас, Рәсәйгә ҡаршы санкцияләр индергән 48 дәүләт һәм территория инә. Исемлектәге сит ил кредиторҙары алдында валюта бурыстары булған Рәсәй дәүләте, граждандар һәм компаниялар улар менән һумдарҙа иҫәпләшә ала. Бынан тыш, был илдәргә кешеләр һәм предприятиелар менән булдырылған алыш-биреште инвестицияларҙы контролләүсе Хөкүмәт комиссияһы хупларға тейеш.

# ЯРҘАМ КҮРҺӘТЕЛӘ

**Рәсәй Хөкүмәте ауыл хужалығы продукцияһын, шулай уҡ ошо тармаҡты ойоштороу тауарҙарын ташыуҙы субсидиялауға өҫтәмә рәүештә 2 миллиард һум бүлә. Был хаҡта вице-премьер Виктория Абрамченко хәбәр итте.**

Уның аңлатыуынса, был аҡса ауыл хужалығы продукцияһы, сеймал һәм аҙыҡ-түлек баҙарында хаҡтарҙы көйләргә, йыраҡ төбәктәрҙе аҙыҡ-түлек менән тотороҡло тәьмин итергә булышлыҡ итәсәк. 2022 йылда түләп бөтәрөү срогы менән алған льготалы кредиттарҙы бер йылға тиклем оҙайтыу ауыл хужалығы етештереүселәре өсөн мөһим ярҙам сараһы булды. Бынан тыш, быйыл түләнергә тейешле льготалы инвестиция кредитының 1 марттан 31 май осорона тура килгән төп бурысын түләүҙе алты айға кисектереү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Абрамченко Рәсәй Агросәнәғәт комплексының илде тулыһынса аҙыҡ-түлек, шул иҫәптән шәкәр һәм ҡарабойҙай менән тәьмин итеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Санкция баҫымы шарттарында дефицит өсөн бер ниндәй ҙә сәбәп юҡ. Баҙарҙы тултырыу һәм ассортиментты арттырыу өсөн өҫтәмә рәүештә беҙгә дуҫ булған илдәрҙән килтереүҙе дауам итәбеҙ. Россельхознадзор Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Белоруссия, Төркиә, Һиндостан, Ҡытай һәм башҡа дәүләттәрҙең 140-тан ашыу предприятиеһынан тауар килтереүгә рөхсәт бирҙе. Бында һүҙ йәшелсә, емеш-еләк, һөт, ит ризыҡтары, мал аҙығы һәм аҙыҡ өҫтәмәләре, тоҡомсолоҡ материалдары тураһында бара", - тип йомғаҡлаңы ул.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө властары баш ҡалала ҙур йөк машиналарының хәрәкәтен сикләүгә бәйле ҡарарын үҙгәртте. Хакимиәт быны ғәмәлдән сығарҙы. "Әлеге сара республика иҡтисадының тотороҡлоғон тәьмин итеү буйынса Көрсөккә ҡаршы штаб тәҡдименә һәм Рәсәй Транспорт министрлығының тәү сиратта кәрәк булған аҙыҡ-түлек, әйберҙәр ташыуҙы тәьмин итеү тураһындағы күрһәтмәләренә ярашлы ҡабул ителде", - тип белдерҙеләр баш ҡала мэрияһында.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров күренекле совет дәүләт һәм партия эшмәкәре, 1967-1990 йылдарҙа Башҡорт АССР-ның Юғары советы президиумы рәйесе Фәйзулла Вәли улы Солтановтың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Өфө хакимиәтенә Мосолмандар зыяратында ерләнгән Фәйзулла Солтановтың ҡәберен кәртәләп алыу һәм ҡәбер ташы ҡуйыу эштәрен ойоштороу бурысы йөкмәтелде. Өфө ҡала Советына "Өфө ҡалаһы урамдарының береһенә Ф. В. Солтановтың исемен бирергә" тәҡдим ителде.

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев: "Ҡала Советы ултырышында муниципаль хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын күтәреү мәсьәләһе ҡаралды. Әлеге ҡатмарлы шарттарҙа урынбаҫарҙарым һәм район башлыҡтары менән үҙебеҙгә хеҙмәт хаҡын арттырыуҙы дөрөҫ түгел тип иҫәпләйбеҙ. Шуға тәүге проектҡа үҙгәрештәр индерелде, депутаттар быны хупланы. Баш ҡала хакимиәтенең, шулай уҡ район хакимиәттәренең башҡа хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы индексацияланасаҡ", - тип яҙҙы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Өфөлә "Алтын кешенең донъя музейҙары буйлап йөрөүе" тигән үҙенсәлекле күргәҙмә эшләй. Күргәҙмәлә Ҡаҙағстан Республикаһының Милли музейы фондынан йөмғеһе 125 предмет бар. Унда ҡуйылған боронғо һәм урта быуат сәнғәт ҡомарткылары - Евразия дала мәҙәниәте мираҫының үҙенсәлеген сағылдырған билдәһеҙ оҫталар ижадының бәләкәй бер өлөшө генә. Күргәҙмә 2022 йылдың 25 мартынан 29 майына тиклем эшләй.

✓Тауарҙар һәм хеҙмәттәргә хаҡтар күтәреү нигеҙлеме? Был мәсьәләнә Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы контролдә тота. Тауарҙар һәм хеҙмәттәргә хаҡтар үҙгәреүе һәм уларҙың сауҙа кәштәләрендә булмауы хаҡында ҡыҙыу телефон буйынса хәбәр итегеҙ: +7(347) 216-53-78.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Рәсәй халҡына ярҙам итеү саралары ла бар. Бында һүҙ кредит каникулдары тураһында бара, льготалы ипотека ла оҙайтылыуы ихтимал. Көрсөк шарттарында киң күләмле мәшғүллек программаһы эшләй башлай.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ҺЫУ ТАША ЛА, ЭТТӘР ШАША



**Иҫегеҙҙә булһа, быйыл 1 июндән баш ҡаланың үҙәк өлөшөндә түләүле парковкалар булдырыу буйынса проект тормошҡа ашырыла башларға тейеш ине. Ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә ҡала мэры Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, быйылға был ниәтте кисектереп торорға ҡарар ителгән һәм быны еңел булмаған иҡтисади хәлгә бәйләйҙәр.**

Һәр хәлдә, кисектерелеү бөтөнләй туктатылыу тигәнде аңлатмай. Тормошобоҙға һәм телебеҙгә бер килеп ингән нәмә онотолмай инде ул, ана, ҡасан ғына әле тажзәхмәттән уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа инек, хәҙер был вирус менән дә һыйышып йәшәргә өйрәнә башланыҡ, шикелле. Әлеә вакцинация ярҙам итте, әллә башҡа сәбәптәр, әммә сирләүселәр һәм вафат булыусылар һаны кәмей, тип отчет бирә Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы белгестәре. Әммә тынысланырға иртәрәк, уяулыҡты юғалтырға, сәләмәтлекте хәстәрләүҙән туктарға ярамай. Бигерәк тә миҙгел алышынған мәлдә, сөнки көндәре лә улай былаймы: ни ҡыш, ни яҙ түгел...

Ҡыш китергә ашыҡмаһа ла, махсус хеҙмәттәр яҙғы ташҡынға ныҡлы әҙерлек башлаған да инде. Быйыл, Башгидромет фаразы буйынса, Ағиҙел йылғаһының һыуы - 560-660, Ҡариҙелдеке - 310-710, Димдең 600-700 сантиметрға күтәрелеүе көтөлә. Был осраҡта Кооператив яланлағы өс йорт һәм 92 йорт алды участкаһы, Затон, Дим, Калинин һәм Киров райондарында 506 баҡсаны һыу баҫасаҡ. Был йәһәттән райондарҙа ла эш алып барыла, һыу баҫыу хәүефе янаған райондарҙың хакимиәт башлыҡтары даими отчет тота. Был юлы Киров районы ташҡынға әҙерлек барышы менән таныштырҙы. Районда халыҡты ваҡытлыса эвакуациялау кәрәк булғанда 3,5 мең урынлыҡ 30 пункт булдырылған. Медицина ярҙамы талап ителә ҡалғанда, Тиҙ ярҙам клиник дауаханаһында - 200, Республика клиник балалар дауаханаһында 35 урын бүленгән. Күсмә туҡланыу пункттары һәм аҙыҡ-түлек, эсәр һыу менән тәьмин итеү һәм башҡа мәсьәләләр хәл ителгән.

Мәғлүм булыуынса, баш ҡалала санитар айлыҡ иғлан ителде һәм оперативкала 25 мартта үткән түүгеөмәгә йомғаҡ яһалды. Был санитар йомала барлығы 25 мең самаһы кеше, 745 берәмек техника ҡатнашҡан. Һөҙөмтәлә 12 мең квадрат метр тирәһе майҙан таҙартылған, 7800 кубометр ҡар сығарылған. Иң мөһиме - хакимиәт башлығы Ратмир Мәүлиев санитар йоманы санитар шәмбегә әйләндермәскә, йәғни халыҡтың ял ваҡытын урламаҫҡа ҡушты.

Оперативкала тағы бер - 10 апрелдән 10 майға тиклем "Шиндарҙы утилләштереү" экологик акцияһын үткәреү мәсьәләһе ҡаралды. Бункерҙар Өфөнөң һәр районында ҡуйыласаҡ: Дим районында - Магистраль урамы, 2, Калинин районында - Интернациональ урамы, 133А, Киров районында - Коммунистик һәм Посадская урамдары сатында. Ленин районында - Силикат урамы, 18. Октябрь районында - СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 45 һәм Гагарин урамы, 33. Орджоникидзе районында - Вологодская урамы, 76/2. Совет районында - Менделеев урамы, 171. Шулай уҡ "Триумф", "СтройГолд", "Вертикаль" йүаплылығы сиклəнгəн ширҡəттəрҙə лə шиндар ҡабул ителə.

Тағы: баш ҡала хакимиәте сайтында яңы сервис - "Берәҙәк эттәр тураһында хәбәр ит" тип аталған (https://ufacity.info/dog) интерактив карта эшләй башлай. Граждандар берәҙәк эттәрҙе күргәндә, уларҙың ҡайҙа йөрөүен һәм фотоһын, ҡыҫҡаса характеристикаһын яҙып ебәрә ала. Был миҙгелдә тап ошолар иң мөһим инде: һыу таша ла, эттәр шаша.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИҠТИСАДСЫ ҺҮҘЕ*

# БАРЫП СЫҠМАНЫ...

**Төбәктәргә ярҙам итеү саралары буйынса кәңәшмәлә ил Президенты Владимир Путин Көнбайыштың Рәсәйгә баҫымын көсәйтеүен күҙаллағайны. "Рәсәйгә ҡаршы иҡтисади блицкриг ойошторыу, йәмғиәттең рухын һындырыу, оятһыҙ рәүештә буйһондороу мөмкин булмағас, илебеҙгә баҫым тағы ла көсәйәсәк. Әммә ул ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сығасаҡбыҙ. Рәсәй иҡтисады яңы ысынбарлыҡҡа мотлаҡ яраҡлашасаҡ", - тине В. Путин.**

БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты, иҡтисад фәндәре докторы Рөстәм Ахунов ил Президентының һүҙҙәренә түбәндәге аңлатма бирә:

- Көнбайыш, ысынлап та, тиңе булмаған саралар күрҙе, әммә иҡтисади блицкриг барып сыҡманы. Быға ил иҡтисадының һәм финанс системаһының алдан әҙерлеге сәбәп булды. Тәү сиратта, финанстар тупланған: милли именлек фонды, алтын-валюта резервы булдырылған һәм илдең бюджеты тотороҡландырылған. Беҙ Хөкүмәттең ошо ресурстарға таянып, бизнесҡа етди ярҙам күрһәтеү тураһында иғлан итеүен күрәбеҙ: ул ауыл хужалығына, IT-секторға, бәләкәй, урта бизнесҡа, Башҡортостандың 19 предприятиеһы индерелгән система булдырыусы предприятиеларға ярҙам күрһәтеү. Шулай уҡ Рәсәй халҡына ярҙам итеү саралары ла бар. Бында һүҙ кредит каникулдары тураһында бара, льготалы ипотека ла оҙайтылыуы ихтимал. Көрсөк шарттарында киң күләмле мәшғүллек программаһы эшләй башлай. Тәүәләш сектоорына ярҙам итеү, аҙыҡ-түлеккә генә түгел, тәүәләш материалдарына ла хаҡтарҙы күҙәтеү һәм контролдә тотоу күҙаллана. Бөгөн инфляцияны мөмкин булған сиктәрҙә тоторға кәрәк. Санкцияларға ҡаршы ҡулланылған саралар ил иҡтисады өсөн ыңғай һөҙөмтә бирер, иҡтисадтың түбән тәгәрәүе һәм халыҡтың аныҡ килеме бик һиҙелерлек булмаҫ, тип уйлайым. Бөгөн Рәсәй етди иҡтисади һынау алдында тора, уға ул сит ил тауарҙарын ватан етештереүсеһенекенә алмаштырып, тороҡло көслө иҡтисад булдырып яуап биререн таныырға кәрәк.

**Юлия ПАХОМОВА.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ПЕНСИЯ АРТА

✓ **2022 йылдың 1 апреленән дәүләт пенсия тәьминәте буйынса пенсия (шул иҫәптән социаль) 8,6 процентҡа арта.** "Республиканың 99 947 пенсионерына арттырылған пенсия түләнергә тейеш", - тине Рәсәй Пенсия фондының республика бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров. Бынан тыш, хәрбиҙәрҙең инвалидлыҡ буйынса дәүләт пенсиялары, ҡараусыһын юғалтыу осрағы буйынса пенсиялар (һәләк булған хәрбиҙәрҙең ата-әсәләренә, тол ҡатындарына), Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарының һәм яугирҙарының инвалидлыҡ буйынса пенсиялары, радиация йәки техноген һәләкәттәр һөҙөмтәһендә зыян күргән граждандарҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының ҡартлыҡ буйынса пенсиялары арттырыла. Шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы Геройҙарына, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына, Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт Геройҙарына, Дан ордены, I дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены менән бүләкләнгән граждандарға өҫтәмә айлыҡ матди тәьминәт күләме индексациялана.

✓ **Башҡорт балы "Татлы Бал" төбәк конкурсында алты номинацияның дүртәүһендә иң яҡшыһы тип танылды.** Өфөлә "АгроКомплекс" форумында ошо конкурсҡа йомғаҡ яһалды. "Йүкә балы" номинацияһында Ғафури районынан Ольга Чернова һәм Илеш районынан Илшат Ибраһимов еңеүсе булды. Баймаҡ районы умартасыһы Юлай Ғәйсин "Ҡарабойҙай балы" йүнәлешендә беренсе урын алһа, Көйөргәҙе районы умартасыһы Ренат Багданов "Көнбағыш балы" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды. Бынан тыш, Күмертауҙан Әхмәт Исмәғилевтың төрлө сәскәләрҙән йыйылған балы жюриҙың йөрәген яулады. Конкурста тотош Рәсәйҙән, шул иҫәптән Мәскәү өлкәһенән, Красноярскиҙан, Дағстандан, Краснодар крайынан, Тула өлкәһенән һәм башҡа төбәктәрҙән 118 бал өлгөһө ҡатнашты. Еңеүселәргә дипломдар һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

✓ **Рәсәй газ өсөн иҫәп-хисапты һумға күсерә, тип белдерҙе Владимир Путин. Был сара дуҫ булмаған илдәргә ҡағыла.** "Илебеҙ тауарҙарын Европа союзына, Ҡушма Штаттарға ебәреп, долларҙа, еврола, башҡа валюталарҙа иҫәпләшеүҙең хәҙер беҙҙең өсөн бер нindәй ҙә мәғәнәһе юҡ. Шуға күрә тиҙ арала иҫәп-хисапты Рәсәй һумына күсереү буйынса саралар комплексын ғәмәлгә ашырырға ҡарар ителде. Тәүҙә тәбиғи газдан башлайбыҙ, дуҫ булмаған илдәр уның өсөн беҙҙең аҡса менән түләргә тейеш. Йәғни ошондай иҫәп-хисаптарҙа башҡа валюталарҙы ҡулланыуҙан баш тартырға", - тип билдәләне ул. РИА Новости агентлығы хәбәр итеүенсә, дәүләт башлығы поставкалар килешеүҙәрҙә билдәләнгән күләмгә һәм хаҡҡа ярашлы дауам итәсәген әйтте.

✓ **Башҡортостандың ете шифахanaһы туристик кешбэк программаһына инде, тине республиканың Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Ринат Фәтҡуллин.** Агентлыҡ хәбәр иткәнсә, 15 марттан Ростуризм туристик кешбэк программаһын тергеҙҙе. Республика халҡы ял итеүгә тотонған аҡсаның бер өлөшөн кире ҡайтарырға мөмкин. Ул 2022 йылдың 1 майына тиклем ғәмәлдә. Юллама хаҡының бер өлөшөн кире ҡайтарыу өсөн уны 2022 йылдың 1 майына тиклем һатып алырға кәрәк. Быйыл 15 марттан башлап 1 июлгә тиклем сәйәхәт итергә мөмкин. Башҡортостанда туристик кешбэк программаһының яңы миҙгелендә ете туроператор, 25 ҡунаҡхана һәм ял базаһы, "Яҡтыкүл", "Ҡарағай", "Йоматау", "Ҡайындар", "Красноусол", "Йәшел сауҡалыҡ", "Асы" шифаханалары ҡатнаша. 15 марттан 1 майға тиклем һатып алырға мөмкин булған сәйәхәттәр һаны сикләнмәгән. Тур өсөн "Мир" картаһы менән түләү - кешбэк алыу өсөн төп шарт. Кешбэк биш көн эсендә картаға күсерелә. Турҙы мирпутешествий.рф сайтында һатып алырға кәрәк.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән кәйнәшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һаулыҡты нығытыу һәм йәшәреү

❖ Аҡ шыршының (пихта) ылыҫлы ботаҡтарынан (лапник) яһалған төнәтмә иммунитетты нығыта, йәшәртә һәм матдәләр алмашыныуын яйға һалып, организмды таҙартып ғүмерҙе оҙайта. Аҡ шыршы ҡайырыһынан эшләнгән ҡайнатмалар бауыр һәм бөйөр ауырыуҙарын, аналыҡ фибромаһын, простатит, простата биҙе аденомаһын дауалай.

❖ Сәләмәтлекте нығытыу маҡсатында ваҡланған 3-5 ҡалаҡ аҡ шыршы ботағын термосҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Иртәнсәккә тиклем төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм төнәтмәне һыу урынына йәки ашағандан һуң эсергә. Был рәүешле 1 айҙан 6 айға тиклем дауаланырға, ай һайын 2 аҙнаға туктап торорға. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләп эсергә. Был төнәтмә менән ауыҙҙы сайҡатырға ла, һыуыҡ тейгәндә аяҡты кисеп ултырырға ла мөмкин.

❖ 1 ҡалаҡ онталған аҡ шыршы ҡайырыһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡайнар хәлгә еткерергә һәм талғын утта 10 минут торорға. Уттан алып эмалле ҡапҡас ябырға һәм 2 сәғәттән артыҡ төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм стакан тулғансы бер аҙ ҡайнатылған һыу өҫтәп, көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 40 минут алда йәки ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс 1/4 - 1/3 стакан эсергә. Был рәүешле 15 көн төнәтмә эскәндән һуң 7 көнгә туктаып тороп, 1 айҙан 3 айға тиклем дауаланырға. Төнәтмәне ҡараңғы урында 1 көндән дә артыҡ һаҡламаҫҡа.

### Невралгик һыҙланыуҙар

❖ Ҡылыс үлән (аир) тамырын яҡшы таҙартып йыуып, быяла һауытҡа һалырға һәм 1:3 нисбәтендә өҫтөнә араҡы ҡойорға. Ҡараңғы урында 3 аҙна төнәтергә. Невралгик һыҙланыуҙарҙы (невралгические боли) дауалағанда көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан һыуға 2 балғалаҡ төнәтмәне болғап эсергә. Был рәүешле 2-3 аҙна дауаланырға, төнәтмә эсеүҙе һыҙланыуҙар үтһә лә тағы бер аҙна дауам итергә мөмкин.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Чайлдфри идеологияһы яҡлылар аңлы рәүештә үҙ иректәре менән балаларҙан баш тартыусылар була. Улар "тик үҙең өсөн генә йәшә" принцибына таяна. Битарафлыҡтың, мәғәнәһеҙлектең һуңғы сиге бит был!***



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Яндауырҙары һәм тар һырлы йөҙлөктәре менән бер-береһенә тоташтырылған кәштәләрҙән торған шкафтар булған. Уларҙың арты ҡапланмаған. Тәрилкә һәм мискәләр нык торһон өсөн өҫтәлмә йоҡа тар таҡталар ҡатылған.

Ҡашығаяҡ таҡтаһы эргәһендәге стенаға ике сөй менән ҡалаҡ элгес таҡта ҡағып ҡуйғандар, был ҡулайламалар башҡорт халҡында "ҡалаҡ ҡыҫтырғыс", "ҡалаҡ ҡуйғыс", "ҡашылдырыҡ" тип аталған. Улар һүрәт төшөрөлгән йәки бысаҡ ярҙамында ҡабарынҡы кәкерсәк һырланған тар ғына таҡта формаһында булған. Әммә йыш ҡына ҡашылдырыҡты берәй матур форма һалып бысып, өҫтөнә ҡабарынҡы йәки түңәрәк биҙәк һырлағандар. Шулай уҡ ҡумта рәүешендәге, талдан үрелгән, ҡырыу станогында һырлап яһалған ҡалаҡ һалғыстар ҙа осраған.



*Ҡашылдырыҡтар. С.И. Руденко һәм В.С. Сыромятников һүрәтләмәләре буйынса*

*Стенаға ҡағылған боронғо ҡашылдырыҡ. БХМ фондынан. Т.К. Сурина фотоһы*



Урал аръяғының көньяҡ-көнсығышында казак станицаларына күрше башҡорт ауылдарында сағыу ҡыҙыл һәм күк төҫтәргә буялған йорт йыһаздары барлыҡҡа килгән. Кәштә һәм һикеләрҙең ҡапҡастарын биҙәгәндәр. Күк ерлеккә ҡаралатылған тар йәшел япраҡлы ҡыҙыл сәскә үремдәрен төшөргәндәр. Бындай сағыу күк ерлеккә һүрәт төшөрөү күрше Ырымбур казактары араһында киң таралған. Ағас ботаҡтары һәм сәскә биҙәктәрҙе мебелгә генә түгел, түбә таҡтаһы, ишек ҡапҡастары, мейес нигеҙенә (опечье) лә төшөргәндәр. Был рәүешле зауыҡлау ғәҙәте славян йолалары йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән, тигән фараз йәшәй; атап әйткәндә, украин декоры мөһим роль уйнаған. Башҡорт оҫталары сағыу рәсемдәрҙе ихлас отоп алып, уны традицион семәрләү менән бер рәттә йорт йыһаздарын биҙәүҙә ҡулланғандар. Тар япраҡтарҙы бөгөлдөрөп төшөргәндәр, был уларҙы орнаменттағы ҡусҡарҙарға оҡшатҡан.

Бер стенаға элеп ҡуйылмалы биҙәкле ҡашығаяҡ таҡтаһының (Баймаҡ районы, 1958 й.) филенканан яһалған ҡапҡастары алмағас йәки гөлйемеш сәскәләренә оҡшаш биш тажлы ҡыҙыл сәскәләр менән биҙәлгән ине. Йәшел япраҡтар сорнауында. Тура маңлай йөҙлөгө арҡан биҙәк ярҙамында етегә бүленгән, һәр береһенең эсендә ҡояш - өлөштәргә бүленгән ярым түңәрәк, күренеп торған.



*Элеп ҡуйылмалы буялған ҡашығаяҡ таҡтаһы. Баймаҡ районы, 1958 й. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...*

**Бер кеше төшөндә Фәрештәне күргән. "Таң атыуға Ерҙәге һыу ағыулана, кем дә кем яңы һыуҙы эсә, аҡылдан тайпыласаҡ",- тип иҫкәрткән уны Фәрештә. Һыу таҙа саҡта күберәк итеп йыйып ҡалырға һәм ағыуланған һыу таҙарғансы шуны эсергә кәрәклеген иҫкәрткән төштәге тауыш... Йоҡоһонан уянғас, кеше тиҙерәк башҡаларҙы етеп килгән бәләнән ҡотҡарырға ташланған. Әммә таныштары уға ышанмаған. Улар ҡыуана-ҡыуана яңы һыуҙы эскәндәр һәм... аҡылдан яҙа башлағандар. Исмаһам, яҡындарын булһа ла ҡотҡарырға маташҡан әлеге кеше, ләкин улар ҙа унан баш борған, тыңларға ла теләмәгән. Донъяның күҙ алдында үҙгәреүенә был кешенең ҡото осҡан, әммә ағыулы һыуҙы эсеп өлгөргәндәр тирә-яҡтағы мәхшәрҙе күрмәгән, сөнки улар бөтәһе лә бер иштән алйотҡа әйләнгән. Ағыулы һыу тураһында урам буйлап ҡысҡырып йөрөгән кешегә иғтибар ҙа итмәгәндәр, элек тормоштоң бөтөнләй икенсе төрлө булыуы тураһында һөйләгәндәренә лә төкөрөп ҡарағандар. Ни эшләһен кеше, Фәрештә әйткәнсә, һаҡлап алып ҡалған һыуын эсеп көн күргән. Хәҙер алйотҡа әйләнгән башҡалар уның үҙен алйотҡа һанай башлаған. Әммә ул бар сыҙамлығын туплап, һыуҙың таҙарыуын көткән. Ваҡыт үтә торған, яңғыҙлыҡтан, мыҫҡыллауҙарҙан арыған кеше берҙән-бер көн башҡалар эскән ҡоҙоҡтан һыу алып эскән. Шул көндән алйотто аҡыллыға әйләндергән мөғжизәле ҡоҙоҡ тураһында хәбәр таралған...**

# ЮҒАРЫ ТҮБӘНСЕЛЕК БИТ БЫЛ!




Тәүге тапҡыр был кинәйәне "Великая тайна воды" (2006 й.) тигән документаль фильмды ҡарағанда ишеткәйнем. Нык уйландырғайны. Уйланмаҫ ерендән уйланырһың: Ер планетаһы һыу солғанышында йәшәй ҙә баһа! Кеше үҙе 90 процентҡа тиклем һыуҙан тора! Тәбиғәттә һыу күләменең кәмеүен аңлау, күреү, һиҙеү өсөн йөҙ йыл йәшәү кәрәкмәй - донъяны аңлау йәше лә етә. Кем нисә йәшендә аңлай - быныһы айырым мәсьәлә. Тирә-яғыбыҙҙағы һыуҙың бысраныуы, ағыуланыуы ҡурҡыныс түгелме ни? Ҡурҡыныс! Әммә тәбиғәттә бөтөн нәмә камил яратылғанға күрә, һыуҙың таҙара белә торған ғәжәйеп сифаты бар - баяғы кинәйәләге кеүек урам буйлап ҡысҡырып йөрөү кәрәкмәй, ысынлап та алйотҡа һанауҙары бар. Һыу үҙен-үҙе таҙарта, бысранған һыу быуға әйләнеп, шифалы таҙа ямғыр йә ҡар булып, таҙа килеш ергә әйләнеп ҡайта, фильтр ҙа кәрәкмәй...

...Хәҙер һүҙҙе икенсегә бороп, интернет системаһы тураһында һөйләшеп алайыҡ. Ул да, һыу кеүек, организмыбыҙға үтеп инмәһә лә, бәлки, ингәндер ҙә, бөтөн Ер шарын солғап алған. Мәғлүмәт океаны Ер шары буйлап әйләнештә йөрөй. Таҙа, саф мәғлүмәт кенә тупланмаған унда, фильтрҙар ярҙамында ғына бысраҡ, ағыулы мәғлүмәттән арынып булмай. Социаль селтәрҙәр, һыу кеүек, үҙен-үҙе таҙартыу һәләтенә эйә түгел. Әлегә изге мәғлүмәттәр, изге ғилем күләме был балансты тигеҙләй, яуызлыҡтың өҫтөнлөк алыуына мөмкинлек бирмәй.

...Чайлдфри идеологияһы тураһындағы мәғлүмәтте уҡығас, баштағы кинәйә иҫкә төштө. Нимәне аңлата һуң был тел һындырғыс һүҙҙең мәғәнәһе? Әйтелеше ташҡа үлсәйем булһа ла, мәғәнәһе яп-ябай уның: төрлө сәбәптәр арҡаһында бала табыуҙан баш тартҡан кешеләрҙе шулай атайҙар. Һаулығына бәйле бала таба алмағандар был исемлеккә инмәй. Чайлдфри идеологияһы яҡлылар аңлы рәүештә үҙ иректәре менән балаларҙан баш тартыусылар була. Улар "тик үҙең өсөн генә йәшә" принцибына таяна. Беҙҙеңсә әйткәндә, үгеҙ үлһә - ит, арба онталһа - утын була инде. Битарафлыҡтың, мәғәнәһеҙлектең һуңғы сиге бит был! Әммә иң ҡурҡыныһы нимәлә: тыумаған балаларҙан баш тартҡан кеше үҙе туранан-тура чайлдфри идеологияһы барлығын белмәҫкә лә мөмкин, белмәйенсә онталған арбаһын яғып, тамаҡ бешерергә мөмкин - ауыҙ яҡыныраҡ бит: иң тәүҙә үҙеңде ҡайғырт!

Ыстағәфирулла! Ағыулы һыу эсеп, алйый башланыҡмы әллә? Балалар һаны кәмеү йылдан-йыл көсәйә барған глобаль баш ауырыуына әйләнә бара: элекке менән бөгөнгө араһында айырма ҡот осҡос! Баҡтиһәң, был идеология тирмәненә һыу ҡойоусыларҙың күпселеген ирҙәр тәшкил итә икән. Нимәһе ҡыҙыҡ: чайлдфри тирмәненә ирҙәрҙең белем кимәле түбәнерәк, кеҫә яғы таҡырыраҡтары һыуҙы күберәк ҡойһа, ҡатын-ҡыҙҙар араһында юғары белемле, ҡырҡ кеҫәлеләр үҙҙәре өсөн генә йәшәүҙе хуп күрә икән. Америкала "үҙең өсөн генә йәшә" принцибын яҡлаусы ҡырҡтан ашыу йәмәғәт ойошмаһы барлыҡҡа килгән икән хатта. Рәсәйҙә иһә 18 йәштән 45 йәшкә тиклемгеләрҙең яртыһы тиерлек балаһыҙ йәшәргә риза икән. Мәҫәлән, мин үҙем йәшәгән Хәлил ауылында 2018 йылда ике бала ғына тыуған, 2019 йылда бер бала ла тыумаған. Ярай, ауыл ерендә йәштәр юҡ, ҡалаға күсеп бөткән, тип япһарырға була. Ҡалала йәшәүсе йәш ғаиләләр ҙә чайлдфрисылар иҫәбен арттыра түгелме?

Әле бер мәғлүмәт уҡып, изгелек менән яуызлыҡ араһындағы мыҫҡал изгелек яғына ауышмаҫмы икән, тигән өмөт саткыһы уянғандай булды. Башҡортостан балалар араһында чайлдфри идеологияһы таратыуҙы тыйырға йыйына. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Балаларҙы һаулығына һәм үҫешенә зыян килтергән мәғлүмәттән яҡлау тураһында" федераль законға үҙгәрештәр индерәсәк икән. Халыҡ һайланыусылары балалар һәм үҫмерҙәр араһында чайлдфри идеологияһын таратыуҙы тыйырға теләй. Яҡын арала тейешле закон проектын Дәүләт Думаһына индереү планлаштырыла. "Көнбайыштан килгән чайлдфри идеологияһы Рәсәй йәштәре араһында киң таралды, - ти Башҡортостан парламенты рәйесе Константин Толкачев. - Уның нигеҙендә - ғүмерҙең мәғәнәһен ғәмһеҙ, үҙ ихтыяжынды ғына ҡәнәғәтләндереп йәшәүгә ҡайтып ҡалған гедонизм философияһы. Чайлдфри идеологияһының таралыуы илебеҙҙәге дәүләт сәйәсәтенә ҡаршы килә, йәмәғәт институттарының деградацияһына һәм депопуляцияға килтерә". Республиканың Дәүләт Йыйылышы рәйесе һүҙҙәренсә, төп маҡсат - йәмғиәттә ғаилә ҡиммәттәрен булдырыу һәм нығытыу. Федераль закон проекты Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы ҡарамағындағы Закон сығарыусылар советына ҡарауға тәҡдим ителде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙҙе ағыулы һыу тураһындағы кинәйәнән башлағайным. Ағыулы мәғлүмәт тә шул бысранған һыу кеүек бит ул: бына мине уҡы, күр, ишет, тип, артынан эйәреп йөрөмәй, тауыш-тынһыҙ ҙа, үтә күренмәле булып та аңыңа үтеп инә ала. Әҙәм балаларының бер-береһенә оҡшарға тырышыу һәләте бар. Йәшәйештең еңел ысулы: артыҡ көс түкмәй генә берәү башҡарған ғәмәлде уға эйәреп башҡарыу етә. Бигерәк тә еңел ғәмәлде башҡаларға эйәреп (конформизм) теүәл үтәүе еңелерәк. Башҡалар өсөн йәшәүгә (альтруизм) ҡарағанда, үҙең өсөн генә йәшәү (эгоизм) еңелерәк тә баһа! Быны ни өсөн чайлдфри - эгоизмдың иң юғары түбәнселеге яйлап-яйлап аңдарыбыҙҙы ағыулай.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

✓ *Һуғыш логикаһын һәр бер осраҡта аңлап бөтөп тә булмайҙыр, әммә дошман тылынан сығып килеүсе һуғышсыларҙың һуңғы ынтылышында ҡорбан булыусыларҙың һанын кәметеү өсөн бер ни ҙә эшләнмәй.*



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ҺАЛЙОТ, ТЕРҺӘК, ҺЕҢРӘН, БӘКӘТИН, ҺЫРҘЫ, ШУРАН-

## оло башҡорт иленең кесе ырыуҙары улар



XII быуат аҙағында монголдарҙың борджигин ҡәбиләһенең йәш һәм пассионар юлбашсыһы Темуджин (Сыңғыҙ хан) кирәйәт ҡәбиләһе башлығы Тогрул хан һәм джаджират ҡәбиләһе юлбашсыһы Джамуха менән союзға инеп, үҙҙәренең ҡан дошманы булған меркеттәрҙе тар-мар итә. 1196 йылда ҡытайҙарҙың Цзинь империяһы хакимы монголдарҙың татар ҡәбиләһенә ҡаршы яу менән килгәс, Сыңғыҙ хан уға ярҙамға килә, сөнки элегерәк татарҙар уның атаһын - Есугей баһадирҙы ағыулап үлтергән була. 1200 йылда Сыңғыҙ хан һәм Ван хан (Тогрул хан) берләштерелгән меркет-тайджиут ғәскәрен тар-мар итҡәс, Үҙәк Азия территорияһында йәшәгән монгол һәм төрки ҡәбиләләре, үтә көсәйеп китеп, барыһын да буйһондороорға ынтылған Сыңғыҙ ханға ҡаршы берләшә. Монгол-нирундарҙан хадагин һәм салжиуттар ҙа ошо берләшмәгә инә. "Йәшерен хикәйәт"тә ошо хаҡта бына ниҙәр теркәлгән: "...в год курицы (1201), в урочище Алгуй-булах, собрались (на сейм) следующие племена: Хадагинцы и Сальчжиуты совместно; Баху-Чороги Хадагинский со своими; Хадагин-Сальчжиутский Чиргидай-Баатур со своими; договорившись с Дорбен-Татарами, Дорбенский Хачжиул-беки со своими; татарин Алчи и татарин Чжалик-Буха со своими; Икиресский Туге-Маха со своими; Унгиратский Дергек-Эмель-Алгуй со своими; Горлосский Чоёх Чахаан со своими; из Наймана - Гучуут; Найманский Буирух-хан; Хуту, сын Меркитского Тохтоа-беки; Худуха-беки Ойратский; Таргутай-Кирилтух Тайчиудский, Ходун-Орчан, Аучу-Баатур, и прочие Тайчиудцы. Уговорившись возвести Чжачжирадайского Чжамуху в ханы, они приняли присягу, рассекая при этом с разбега жеребца и кобылу".

Әүәл Сыңғыҙ хан яғында булған Джамухасәсән уның дошмандары - хадагиндар һәм салжиуттар менән берләшә. Фарсы тарихсыһы Рәшид ад-Дин быны уларҙың "сикһеҙ көнсөл һәм тәбиғәттәре менән ҡәбәхәт булыуҙары" менән аңлата. Алгуй-Булак ыҙанында Сыңғыҙ ханға ҡаршы берләшеүселәр хаҡында Рәшид ад-Дин ошолай яҙған: "В то время как, когда большинство племен тайджиут по вышеупомянутой причине были перебиты, а часть бежала, эти племена катакин и салджиут собрались[вместе]. С ними заключили союз племена дурбан, татар и кунгират. Они поклялись друг другу клятвой, крепче которой нет среди монгол. Клятва эта заключалась в следующем: они вместе зарубают мечем жеребца, быка и кобеля и [при этом] говорят: "О, господь неба и земли, слушай, какую клятву мы приносим! Эти [самцы] - корень и мужское начало этих животных. Если мы не сдержим своего слова и нарушим договор, пусть мы станем такими же, как эти животные".

1201 йылда Койтен үҙәнендәге алышта Сыңғыҙ хан менән Ван ханға ҡаршы сыҡҡан монгол-төрки ырыуҙары берләшмәһе ғәскәре һәләкәткә осрай. 1202 йылда татар атамалы монгол ҡәбиләһе ахырынаса тар-мар ителеп, уның ирҙәре тулыһынса һәләк ителгән хәлдә лә, тап ошо атама барыбер монгол этнонимы менән ҡуша йөрөтөлөп, рус кенәзлектәре ерҙәрендә лә, Европа илдәрендә лә киң ҡулланылыу таба. 1206 йылда Онон йылғаһы буйында уҙғарылған бөйөк ҡоролтай Темуджинды - барса монгол ҡәбиләләрен берләштереүгә өлгәшкән яу башлығын, аҡ кейеҙ балаҫта күтәреп алып, бөйөк хан - Сыңғыҙ хан, тип иғлан итә. Сыңғыҙ хандың 110 меңлек ғәскәре составына унан еңелгән ҡәүем яугирҙары, шул иҫәптән хадакиндар (катагандар), тайджиуттар, ойраттар, салжиуттар һәм башҡалар ҡушыла.

Сыңғыҙ ханға ҡаршы барған алыштарҙа салжиуттарҙың байтаҡ ҡына әмирҙәре һәләк була, әммә аҙаҡтан, бөйөк хан ғәскәренә ҡушылғас, улар араһынан һәләтле сардарҙар сыға. Шуларҙың береһе - Самукэ әмир. Сыңғыҙ хан йыш ҡына үҙ яугирҙарын уның ҡарамағына тапшыра. Самукэ әмир етәкселегендә монгол ғәскәре 1215 йылда ҡытайҙарҙың Цзинь империяһының баш ҡалаһы Джунданы (хәҙерге Пекин) баҫып ала. Рәшид ад-Дин ошо хаҡта бына ниндәй мәғлүмәт ҡалдырған: "Чингиз-хан послал с войском, состоящим из монголов, Самукэ-бахадура из племени салджиут и Минана из народа Джурджэ, подчинившегося [Чингиз-хану] и приобретшего значение, пройти через районы Джунду и провести [с собою] то карахитайское войско, которое, бежав от Алтан-хана, прислало посла... Самукэ с войсками... осадил город Джунду..., взял [его], забрал добро, казну и эмиров Алтан-хана, которые там были".

Салжиуттар, күрәһең, Сыңғыҙ хан һәм уның вариҫтарының яулап алыу походтарында - Урта Азияны, Кавказды, Бөйөк Булғарҙы, рус кенәзлектәрен, Киевты буйһондороуҙа, Венгрия һәм Польша территорияһындағы һуғыштарҙа әүҙем ҡатнашҡан. Алтын Урҙа дәүләте барлыҡҡа килгәс, салжиуттарҙың бер өлөшө, башҡорт халҡы составына ҡушылып китеп, һалйот (салйоғот) ырыуын хасил итә. XV - XVIII быуаттарҙа монголдарҙың, нуғайҙарҙың, үзбәктәрҙең ырыу номенклатураһында салжиут нәҫелдәре теркәлә. Әммә әлеге заманға ошо ҡеүәтле ҡәүемгә ҡараған этноним тик башҡорттарҙа ғына һаҡланып ҡалған.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләнә. (Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Тарихи хроникабыҙҙың ошо урынында 1948 йылдың йәйендә һуғыш осоронда дивизиябыҙҙың сәйәси бүлегендә хеҙмәт иткән майор Кәлимулла Ғәбитов етәкселегендә Донбасҡа махсус экспедиция ойошторолоуын иҫкә алырға кәрәк. Экспедиция составында аталары һуғышта һәләк булып ҡалып, Өфө ҡалаһындағы балалар йортонда, башҡорт мәктәп-интернатында тәрбиәләнгән үҫмерҙәр, шул иҫәптән Рәми Ғарипов та була. Улар урындағы халыҡ менән аралаша, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ошо территорияла барған алыштар хаҡында һорашып белешә. Штеровка ауылы кешеләре уларға Роман йырынында 1943 йылдың 23 февралендә һәләк булып ҡалған Ҡыҙыл Армия офицерҙары һәм һалдаттарының элекке ҡәбер урындарын күрһәтә. Йәш эҙәрмәндәр башҡорт генералы Миңлеғәли Шайморатовтың тап ошо урында һәләк булыуына инана.

Романов йырыны ситендәге ҡаяла "Здесь 23. II. 43 г героически погиб генерал Шаймуратов" тигән һүҙҙәр 1948 йылдың йәйендә Рәми Ғарипов һәм уның класташы Рифғәт Алғушаев тарафынан ташҡа соҡоп яҙылған. Ошо хаҡта шағир үҙенең көндәлектәрендә бына нисек яҙып ҡалдыра: "Здесь" һәм "23. II. 1943 г" тигәнде - мин , "героически"ҙе Рифғәт яҙҙы. Мин тағы "погиб генерал"ды өҫтәнем. Ләкин күп тә үтмәне, беҙҙең тешәүестәр үтмәҫләнде. Беҙ бер генә тешәүес менән алмашлап яҙырға тотондоҡ. Мин сүкегәндә Рифғәт ҡая башына ултырып, ошо шиғырҙы яҙҙы:

Юйылмаҫ эҙ.
Ташҡа уйып, ҡая күкрәгенә
Шайморатов исеме яҙылған.
Йылдар үтер
Бәлки, ошо ҡая
Емерелер яҙғы һыуҙарҙан.
Уның данын мәңге юя алмаҫ
Көслө ямғыр, ыжғыр елдәр ҙә...
Уны һөйөп һәр саҡ иҫкә алыр
Башҡорт халҡы килер көндәрҙә".

Иң аяныслыһы бына ниҙә: ике аҙнанан ашыу дошман тылында алып барылған алыштарҙа аяуһыҙ юғалтыуҙарға дусар булыуына ҡарамаҫтан, 7-се гвардия атлы корпусының иҫән ҡалған яугирҙарына фронттың икенсе яғында оборонала торған 3-сө гвардия армияһы (командующийы генерал-лейтенант Лелюшенко) яғынан һис бер булышлыҡ итеү булмай. Һуғыш логикаһын һәр бер осраҡта аңлап бөтөп тә булмайҙыр, әммә дошман тылынан сығып килеүсе һуғышсыларҙың һуңғы ынтылышында ҡорбан булыусыларҙың һанын кәметеү өсөн бер ни ҙә эшләнмәй. Фронт һыҙығын ярып үтеп сығырға ни барыһы 4-5 саҡрым ғына ара ҡалған була шул мәлдә. Әммә командованиеның иҫ китмәле илтифатһыҙлығы арҡаһында меңәрләгән яугирҙар дошмандың утлы ҡойононда һәләк булып ҡала. 112-се Башҡорт атлы дивизияһының тарихи ваҡиғаларын һуғыштан иҫән ҡайтҡан яугирҙарҙан яҙып алып ҡалған яҙыусы Йыһат Солтанов яҙыуынса, 1943 йылдың 23 февралендә генә дивизиябыҙҙың 749 яугиры Донбасс ерендә мәңгелеккә ятып ҡала...

Рейдтың һуңғы көнөндәге героик алыштар дивизия политбүлеге начальнигы вазифаһын башҡарған Сабир Ҡадировтың "Уттар, һыуҙар аша" тигән хәтирәләрендә (Өфө, 1977 йыл) бына нисек һүрәтләнә:

"Һуғыш көсәйгәндән-көсәйә. Лейтенант Мөнир Шәмғүтдинов батареяһын алға ҡаратып урынлаштырған да, танкыларға тоҫҡап ата. Ахырҙа үҙен фашист һалдаттары уратып алғас, һуңғы гранатаһын ташлап, байтағын шул урында дөмөктөрә, үҙе лә шунда һәләк була.

Беренсе Юлино яҡлап килгән танкылар күренгәс тә, һуғышсы Әхкәм Зәйнетдин улы Сирбаев (лейтенант Зиннур Кәримов батареяһынан) үҙенең ҡырҡ биш миллиметрлы пушкаһынан уларға тоҫҡап ут аса. Бер-бер артлы алты танкыны юҡ итә. Снарядтары ҡалмағас, граната бәйләме күтәреп, танк аҫтына ташлана.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә. (Дауамы бар).**

*✓ Башҡорт үҙе йәшәгән ландшафттың үҙенсәлектәрен яҡшы белеп, уның һәр объектына үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, төрлөсә атамалар биргән. Йәғни, ул ерҙәрҙе ул үҙенә яраҡлаштырған, унда үҙе өсөн уңайлыҡтар тыуҙырған.*

# РУХЫҢ КӨСЛӨ, матди донъяң да

**Кешелек үҙенең йәшәү дәүерендә ниндәй генә һынауҙарға дусар ителмәгән. Шуның һөҙөмтәһендә тарихта ҡайһы бер халыҡ-ҡәүемдәрҙең исеме генә тороп ҡалған, бәғзеләре үҙ тарихын яҙыуын дауам итә. Был күренеш халыҡ һанына ла бәйләнмәгән. Ә нимә уларҙы көслө һәм маҡсатлы итә һуң? Ошо һорауға яуап рәүешендә рух, мәҙәниәт тигән төшөнсәләр алға килеп баҫа ла инде. Ошо төшөнсәләр юҫығында һөйләшеү өсөн редакцияға танылған ғалимдарыбыҙ - филология фәндәре докторы, яҙыусы Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы ШӘРИПОВА менән философия фәндәре кандидаты, этнолог Зәкирйән Ғәлимйән улы ӘМИНЕВты саҡырҙыҡ.**



*Мәҫәлән, Көнбайышта хэллоуин, беҙҙеңсә "шайтан туйы" тигән байрамды киң билдәләйҙәр. Бала-сағаға оҡшай тип, уны беҙҙең ерлеккә күсерергә теләүселәр ҙә юҡ түгел. Хәҙер бөтөн халыҡтарҙың мәҙәни үҙенсәлектәре, бер-береһенә тәьҫир итеп, уҡмашып бара. Был процестарҙы глобалләшеү тип атайбыҙ. Халыҡтарҙың йәшәү рәүештәре, ҡараштары берләшеп, ҡатнашып китә, нимәләр онотола, нимәләр алға сыға. Шундай ваҡытта халыҡ аңын бутамаҫ өсөн фән тарафынан тикшерелгән, боронғо заманда ысынлап та беҙҙең халыҡта булған ғөрөф-ғәҙәтте, йолаларҙы аңлап тергеҙеү фарыҙ.*

**Кешелекте, халыҡты, бәхәсһеҙ, мәҙәниәттән айырып ҡарап булмай. Ә нимә һуң ул мәҙәниәт? Бөгөнгө йәмғиәттә мәҙәниәт төшөнсәһен тарыраҡ мәғәнәлә ҡабул итәләр, әҙәм балаһы үҙенең рухын, йәшәү рәүешен асыҡлаған оло һүҙҙең мәғәнәһен төбөнә төшөп аңламаған һымаҡ тойолмаймы һеҙгә?**

**З. Әминев:** Эйе, "мәҙәниәт" тигән һүҙҙе беҙ, ғәҙәттә, йыр-бейеү, шиғыр уҡыу тигән һымағыраҡ бер яҡлы ғына аңлайбыҙ һымаҡ, ә ул бик оло төшөнсә. Башҡортса "эйәләштереү" тигән һүҙҙе мәҙәниәт тигәнгә эквивалент итеп тә алып булалыр, моғайын. Йәғни, мәҙәниәт - ул беҙҙең йәшәү рәүешебеҙ. Беҙҙең башҡорт Уралда формалашҡан, ошо ерҙе эйәләштергән, урыҫса әйткәндә, "окультуривать" иткән. Башҡорт үҙе йәшәгән ландшафттың үҙенсәлектәрен яҡшы белеп, уның һәр объектына үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, төрлөсә атамалар биргән. Йәғни, ул ерҙәрҙе ул үҙенә яраҡлаштырған, үҙе лә шуларға яраҡлашып, унда үҙе өсөн уңайлыҡтар тыуҙырған. Өй һалыу ҙа, мал көтөү ҙә - мәҙәниәтебеҙҙең бер төрө. Халыҡ ниндәй мал аҫраған, нимәгә һунарсылыҡ иткән, былар барыһы ла йола, традицияларҙы хасил итә, һәм был да мәҙәниәт.

Рухи мираҫҡа килгәндә, мәҙәниәтебеҙҙең тамырында, нигеҙендә мифология ята. Рухи мираҫты бер нисек тә бер халыҡтан икенсе халыҡҡа күсереп булмай, ул халыҡтың үҙе менән бергә үҫешә һәм халыҡтың йөҙөн билдәләй. Мифтарҙы өйрәнгән, тикшергән ғалимдар, мифология тик ҡан менән бергә генә бирелә, тиҙәр. Мәҙәниәт, тимәк, ошо ерҙе эйәләштереү төшөнсәһен бирә. Мәҫәлән, беҙҙең мәҙәниәт өсөн Урал - донъя үҙәге, ер кендеге, һәм бөтә нәмә уның тирәһендә генә ҡайнай. Ә урыҫ мәҙәниәте өсөн Урал тәүҙәрәк ят төшөнсә була. Мәскәү, Питер ғалимдары билдәләүенсә, боронғо заманда урыҫтар уны "ер сите" тип ҡабул иткәндәр. Татарҙар өсөн Урал тигән төшөнсә юҡ, комиҙар менән удмурттар, Уралдан тик зыян килә, тип һанаған. Сөнки скиф-сарматтар, артабан башҡорттар уларҙың ата-бабаларына һөжүм итеп торған. Шуға ла Урал улар өсөн ен-пәрейҙәр (лешийҙар), ҡара көстәр йәшәгән урын иҫәпләнә. Ҡаҙаҡтарҙа ла Урал ыңғай образ түгел. Уларҙың фольклорында Уралтай тигән персонаж бар, бөтөн аламалыҡ шул Уралтайҙан килә, ти ҡаҙаҡтар. Ҡалмыҡ мифтарында башҡортҡа ихтирам бар. Иштәк, мәҫәлән, улар өсөн батырлыҡ, кешелеклек эталоны. Ҡалмыҡ батыры Бузан Иштәкте еңә алмағас, уны йоҡлап ятҡанында үлтерә. Халыҡ: "Һин ғәҙел еңмәнең, уны йоҡлап ятҡанда үлтерҙең, һинең тоҡомоң ҡороясаҡ", - тип уны ҡәһәрләй. Ҡалмыҡ ханы Дайчиндың Петр I-гә яҙған хаты архивта һаҡлана. Урыҫтар союзға берләшеү тураһында мөрәжәғәт иткәс, ул: "Мин әле башҡорттар менән һөйләшеү алып барам, ә мин улар менән килешәсәгебеҙгә ышанам, ул саҡта мин Алланан башҡа берәүҙән дә ҡурҡмаясаҡмын", - тип яуап яҙа. Ҡалмыҡтар - яугир халыҡ. Шуға беҙҙең яугирлыҡты аңлағандар, баһалағандар. Ҡалмыҡтар бит алтайҙарҙы, ҡырғыҙҙарҙы, ҡаҙаҡтарҙы, төркмәндәрҙе, үзбәктәрҙе, нуғайҙарҙы еңеп, үтеп китәләр. Беҙгә килеп етеп, еңә алмай кире боролалар, хатта ҡалмыҡтарҙың ҡайһылыр бер өлөшө беҙҙең халыҡ эсенә инеп китә. Архивта ҡалмыҡ-башҡорт мөнәсәбәте тураһында документтар күп һаҡлана. Мәҙәниәттә халыҡтарҙың бер-береһенә мөнәсәбәте бына шулай сағылыш таба. Рухи-мәҙәни тормош тигәндә, бына ошондай тарихҡа бәйле ваҡиғалар, мөнәсәбәттәрҙе лә урап үтеп булмай.

**З. Шәрипова:** Теге йәки был күренеште аңлау өсөн шуның атамаһын асыҡлау кәрәк. "Мәҙәниәт" һүҙе "мәҙинә" (ҡала, шәһәр) тигән ғәрәп тамырынан яһалған һәм шунда йәшәгән кешеләр тормошона бәйле атама булараҡ нығынған. Башҡорт телендә "мәҙәниәт" терминын рус теле аша латин теленән үҙләштерелгән "культура" тигәнгә эквивалент итеп алғанбыҙ. Олораҡ быуын хәтерләйҙер: оҙайлы ваҡыт һуҙымында "культура" тигән һүҙҙең үҙе генә ҡулланылышта йөрөнө һәм, ғәмәлдә, ҡала шарттарында үҫешкән профессиональ сәнғәт төрҙәрен берләштереүсе төшөнсә рәүешендә ҡаралды. Рәссам, музыкант, артист, яҙыусы һәм башҡалар - юғары культураға эйә сәнғәт әһелдәре, ә ауыл клубында бейеүсе, йырлаусылар - үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә ҡатнашыусылар, тип иҫәпләнде. Ә хәҙер йәмғиәттә мәҙәниәттең асылын тәрәнерәк аңларға ынтылыш бар, һәм уның бөтөн халыҡтарҙың тормошон үҙ эсенә алған ҙур күренеш икәне, уның ифрат күп төрлөлөгө асыла бара.

Барыбыҙға ла мәғлүм: әлеге этапта тормошобоҙҙа көтөлмәгән ауырлыҡтар, әллә ниндәй зәхмәттәр килеп сыға, өҫтәүенә, халыҡ-ара хәлдәр ҡатмарлаша. Нисек итеп шул ҡаршылыҡтарға бирешмәҫкә, бар ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға? Бөйөк Ватан һуғышында ҡорал түгел, ә халыҡтың рух ныҡлығы еңгән, тип әйткәндәрен күп тапҡырҙар ишеткәнебеҙ бар. Был шулай матди өлгөләре һәр берәүгә яҡшы таныш. Ә бына күҙгә күренеп тормаған, матди кәүҙәләнеше булмаған рухи мәҙәниәт нимә һуң ул? Тап шуны халыҡҡа асыҡлап еткерергә кәрәк хәҙер. Халыҡтың йәшәү рәүеше уның үҙаңының һәм рухының үҙенсәлектәрен барлыҡҡа килтергән, быуаттар һуҙымында формалаштырған. Көндәлек тормошона, донъяны танып белеүенә, төрлө ышаныуҙарына бәйле ғөрөф-ғәҙәттәр системаһы нығынған. Төрлө юҫыҡтағы ижад традициялары менән бергә, һәр халыҡтың үҙенә генә хас төрлө кәсеп-һөнәри эшмәкәрлек алымдары ла ҡалыплашҡан. Хатта мал салыуҙы алып ҡарағанда, уны ла бит һәр халыҡ үҙ рәте-тәртибе менән башҡара. Ошондай традицияларҙы һаҡлау электр, техник мөмкинлектәр булмаған заманға кире ҡайтыу түгел, ә боронғолоҡтоң файҙалы өлөштәрен алып, шуларҙы боҙмайынса тергеҙеү тигәнде аңлата.

Уҡ атыу ярыштарын шуның бер миҫалы итеп килтерергә була. Заманында уҡ атып, хатта Парижды ла яулағандар. Хәҙер ул, спорттың бер төрө булараҡ, халыҡҡа ныҡ яҡынайҙы һәм әллә ниндәй матди сығымдар ҙа талап ителмәй. Иң мөһиме, халыҡты, йәштәрҙе файҙалы спортҡа өйрәтеү, бала-сағаны сәмләндереп, рухын үҫтереү, дөрөҫ эмоциялар тыуҙырыу. Төҙ атһа, бала ҡыуанып китә бит, был ярыш үҙенең маҡсатына еткерелмәйенсә ҡағыҙға теркәлгән бер генә мәғлүмәт тә, шулай итеп, әллә ниндәй яңылышлыҡтар тыуҙырыуы мөмкин.

**Ниндәйҙер яңылыҡ индерергә маташыусылар, тигәндә икенсе милләттең йолаларын үҙләштереп, шуны тәҡдим иткән кешене күҙ уңында тотаһығыҙмы?**

**З. Шәрипова:** Улай ҙа булыуы мөмкин. Мәҫәлән, Көнбайышта хэллоуин, беҙҙеңсә "шайтан туйы" тигән байрамды киң билдәләйҙәр. Бала-сағаға оҡшай тип, уны беҙҙең ерлеккә күсерергә теләүселәр ҙә юҡ түгел. Хәҙер бөтөн халыҡтарҙың мәҙәни үҙенсәлектәре, бер-береһенә тәьҫир итеп, уҡмашып бара. Был процестарҙы глобалләшеү тип атайбыҙ. Халыҡтарҙың йәшәү рәүештәре, ҡараштары берләшеп, ҡатнашып китә, нимәләр онотола, нимәләр алға сыға. Шундай ваҡытта халыҡ аңын бутамаҫ өсөн фән тарафынан тикшерелгән, боронғо заманда ысынлап та беҙҙең халыҡта булған ғөрөф-ғәҙәтте, йолаларҙы аңлап тергеҙеү фарыҙ. Мәҫәлән, берәүҙең яҙмаһында "Үлгән кешене оҙатҡанда, артынан көл һибеп ҡалғандар", тигән юлдар бар икән, ти. Быны уҡып, элек шулай иткәндәр икән, тип, мәйет артынан көл һибә башлауҙары ла ихимал. Көл һибеү - ул беҙҙә иң ҡаты яза, ҡәһәрләү, мәңгелеккә айырылышыу теләгән белдереү һымаҡ. Ҡыҫҡаһы, был әҙәм менән ҡабат осрашырға яҙмаһын, тигәнде аңлата. Беҙ, ололар, уның ысын мәғәнәһен әлегә иҫләйбеҙ, ә бына йәштәрҙең белмәүе бар. Уйлап булған да. Әммә 90-сы йылдарҙан һуңғы үҙгәртеп ҡороуҙар барышында матди байлыҡ туплау төп маҡсат итеп ҡуйылды. Мәҙәниәт мәсьәләләренә иғтибар булды булыуын, әммә йәшәйештә Көнбайыш культураһы баҫып алды, милли мәҙәни ҡиммәттәр төҫһеҙләнеп ҡалды. Үҙ халҡының тарихын, моңон, рухи ҡаҙаныштарын яҡшылап белмәгән, шуға ла уны һанға һуҡмаған, илдәге хәлдәргә күпмелер битараф йәш быуын үҫеп сыҡты. Дәүләтебеҙ именлеге һәм алға китеше граждандарға тейешле рухи тәрбиә биреүгә, илдә берҙәмлек һәм татыулыҡ булдырыуға туранан-тура бәйле икәне - бәхәсһеҙ хәҡиҡәт. Шуларҙы иҫәпкә алып, Рәсәй халыҡтарының рух торошон көйләү һәм үҫтереү өсөн ил етәкселеге быйылғы йылды Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫы йылы тип иғлан итте лә инде.

Фәндә мәҙәниәтте икегә - матди һәм күҙгә күренеп тормаған, матди булмаған мәҙәниәткә - бүлеп йөрөтәләр. Әйткәнебеҙсә, совет осоронда хөкүмәт барлыҡ халыҡтар өсөн дөйөмләштерелгән уртаҡ совет мәҙәниәтен булдырыуға, уның ике яҡ тармағын да үҫтереүгә етди иғтибар бүлде. Йорт-ҡаралты, йыһаз, кейем-һалым кеүек күҙгә ташланып торған культураның өлгәшә тип уйлайым. Бына шундайыраҡ боронғо, яҡшы традицияларҙы тергеҙеү, кире халыҡҡа ҡайтарыу бурысы тора алдыбыҙҙа. Тик шуныһы: борондан килгән халыҡ йолаларын тергеҙәм тип, тейешле белем булмау сәбәпле, ҡайҙандыр үҙҙәре уйлап тапҡанды көсләп тағыусылар ҙа табылып, халыҡты яҙыҡ, ҡыйыш юлдан алып китеүселәр ҙә булмаҫ, тимә.

**З. Әминев:** Тормош алға табан бара, ә япон, корея, ҡытай халыҡтары йолаларын һаҡлап алып ҡалып, яңы дәүергә яраҡлаштырҙылар, шуның менән улар алға киттеләр. Традицияһыҙ халыҡтың халыҡ булмауын аңланылар. Ә беҙҙә уны большевизм заманында емерә башланылар. Халыҡты бәхетле, тигеҙ итеү идеяһы һәйбәт, әммә тормошҡа ашырыу ысулдары дөрөҫ булманы. "Мы свой, мы новый мир построим", тип, бөтөн нәмәне ҡырып-емереп кенә халыҡты бәхетле яһап, тарих этаптарын ырғып-һикереп үтеп китеп булмайҙыр.

Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы дөрөҫ әйтә, мин дә күҙәткәнем бар: кемдәрҙер беҙҙә булмағанды ҡай саҡ "беҙҙеке" тип тәҡдим итә. Башҡорттарҙың тарихын, ғәҙәттә, төрки сығанаҡтарынан ғына эҙләйбеҙ. Эйе, беҙ төрки телле халыҡ, әммә археологик ҡаҙыныуҙарға иғтибар итһәк, беҙҙең, Урал яғында йәшәүселәрҙең, төрки донъяһының үҙәге һаналған Алтай-Саян яҡтары менән туранан-тура бәйләнеше юҡ икәнен күрәсәкбеҙ. Беҙҙең бәйләнеш күберәк Урта Азия, Алғы Азия - Яҡын Көнсығыш мосолмандары яғында. Был бәйләнеш Ислам дине менән генә килмәгән. Биш мең йыл элек тә шул яҡ менән беҙҙең бәйләнеш булған. Мәҫәлән, химиктар хәҙерге Ираҡта - Шумер-Вавилон дәүләттәрендә табылған әйберҙәрҙең химик составын өйрәнгән, уларҙың Урал аръяғынан, беҙҙең башҡорт ерҙәренән килтерелгән баҡырҙ-

✓ *Икәүләп зыяратҡа барып, ҡәбер эргәһен ҡаҙып, туҙға тәрөлгән 28 ҡулъяҙманы күтәреп алдыҡ. Араһында тап минең эҙләнеүҙәр темаһына бәйле Һибәтулла Сәлихов ижады буйынса материал килеп сыҡты.*



ан яһалғанын асыҡлаған. Силәбе археологы С.А.Григорьев Арҡайым, Һынташ ҡаласыҡтарын өйрәнеп, унда йәшәгәндәр биш мең йыл элек Яҡын Көнсығыштан килгәндәр, тип әйтә. Уларҙы металлургия ҡыҙыҡһындырған, йәғни, беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ менән алыш-биреш булған. Беҙҙең йәштәр ул турала бик белеп бөтмәй, шуға Тываға, Ҡаҙағстанға баралар ҙа, шуларҙан ниндәйҙер мәҙәниәт элементтарын отоп алып ҡайталар. Улар беҙҙең тәбиғәткә тура килмәй. Мин үҙем дә тыва, хакас, алтай яҡтарында күп йөрөнөм, үҙебеҙҙең йырҙарҙы алып барып, унда тынлап ҡарағаным булды. Ундағы тәбиғәткә беҙҙең моң тап килмәй. Беҙҙең моң сит унда. Уларҙың тәбиғәтенә үҙҙәренең йырҙары аһәңдәш. Күрәһең, беҙҙең йыр-моң Уралда тыуған, Уралға яраҡлаштырылған. Беҙҙең Уралдың тәбиғәте йомшаҡ бит. Мәҙәниәттә алыш-биреш гел булған, бер халыҡ икенсеһенән һәр ваҡыт нимәнелер алған, тик үҙенекенә яраҡлаштырып алған. Рухи донъяны өйрәнгән ғатаклизмдарға ҡарамайынса, ошо ергә теше-тырнағы менән йәбешеп йәшәүеңдә, тип аңлата. Зәки Вәлиди үҙенең бер хатында: "Беҙҙең халыҡҡа ҡаршы этлектәр рухи донъяла, телдә, диндә көтөлә", тип бушҡа ғына әйтмәгән бит. Шуға беҙгә үҙебеҙҙең боронғологобоҙҙо, Уралдағы аҫабалығыбыҙҙы белеп йәшәргә кәрәк.

1917 йылғы революцияға тиклем беҙ үҙебеҙҙе "Урал балалары" тип йөрөткәнбеҙ. Ә хәҙер, нисектер, Уралды башҡорттан айырып ҡарарға күнектек, башҡорт бер яҡта, Урал икенсе яҡта тороп ҡалған кеүек. Улар элек икеһе бер бөтөн төшөнсә булған. Беҙ иҡтисади яҡтан күптән инде Волга буйы төбәгенә ҡарайбыҙ. Свердловск ғалимдары менән даими аралашам, улар беҙҙе Урал халҡына һанай. Екатеринбургтың башҡорт ерендә төҙөлгәнен бик яҡшы беләләр. Етмешенсе йылдарҙа Татищев һәйкәлендә баҡырҙан яһалған таҡмала "Город Екатеринбург заложен на земле приобретенной у башкир" тип яҙылған ине. Өпәй башҡорттары ерендә һамәҙәниәтһеҙлекте аңлатмай. Большевиктар осоронда рухи мираҫҡа дөрөҫ булмаған мөнәсәбәт арҡаһында барлыҡҡа килгән төшөнсә был. Әммә шуға ла иғтибар итәйек әле: совет власы урынлашҡас та Ленин бабай хөкүмәткә иң элек культураны үҫтереү буйынса бурыстар йөкмәтә. Унан: "Пролетар культура нисек булырға тейеш, культураны нисек үҫтерергә була?" - тип һорайҙар. "Боронғо иң яҡшы үрнәктәрҙе белмәйенсә тороп, яңы культура формалаштырып булмай", - була яуабы. Был бик дөрөҫ мөнәсәбәт була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был положение, мәҫәлән, башҡорт яҙма мәҙәниәтенә ҡағылышлы уйҙырманы юҡҡа сығарыуға булышлыҡ итә алмай. Сөнки башҡорт яҙмаһы Октябрь революцияһынан һуң барлыҡҡа килгән, совет власы ғына башҡортҡа яҙышырға мөмкинлек биргән, тигән тезис нығынып киткән була. Ана шул беҙҙең бәкәлгә ныҡ һуҡты, фәнни фекер үҫешенә, яҙмаға бәйле мәҙәниәт торошона ныҡ ҡамасауланы.

һәм проблемалары миңә бик таныш. Тейешенсә һаҡлауҙы ойоштороуҙың ни тиклем әһәмиәтле икәнен бер генә миҫалда күрһәткем килә.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә килгәс, Ғайса Батыргәрәй улы "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"ның тәүге томына "Боронғо төрки ҡомартҡылары" бүлеген яҙыуҙы миңә йөкмәтте. Төрки әҙәбиәттәренең шишмә башы тип иҫәпләнгән орхон-йәнәсәй ҡомартҡыларының башҡорт ерлегендәге тамырҙарын юллап, том-том китаптар аҡтарам. Бөтә Рәсәй төркологик конференцияһы материалдары баҫылған йыйынтыҡта (Алма-Ата, 1980) көтмәгәндә Э.И. Фазылов тигән бер үзбәк ғалимының мәҡәләһенә тап булдым. Ул үҙебеҙҙең Ғилми үҙәк китапханаһында һаҡланған "Тәржемән әс-сихах" ҡулъяҙмаһы хаҡында яҙған. 1555/56 йылда Мостафа бин Хәмзә бин Һөйөндөк төҙөгән 616 битлек был һүҙлектә 20 мең ғәрәп һүҙенә төркисә аңлатма бирелгән. Төп нөсхә менән танышырға булып, китапханабыҙға мөрәманында ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡытып йөрөгән. Олатай гел генә биттәре күндән эшләнгән, өҫтәл ҙурлыҡ боронғо китап уҡып ултыра торғайны. Алтмышынсы йылдарҙа олатай вафат булды. Бер саҡ атайым менән һөйләшеп ултырғанда иҫкә төшөп: "Бәхтиәр олатай әллә ниндәй боронғо китап уҡыны, шул хәтеремдә тороп ҡалған", - тинем. "Улым, ул иң боронғо Ҡөрьәндәрҙең береһе ине, биттәре быҙау тиреһенән яһалғайны", - тигәнде ишетеп, оҙаҡ ваҡыт аптырап йөрөнөм. Олатай вафат булғас, әбейе китаптарҙы ҡайҙалыр алып барып күмгән. Бына шулайтып бик боронғо ҡомартҡыларҙың береһе юғалды.

**▶ Мәҙәниәтебеҙҙең ниндәйҙер бер өлөшөн һәм этабын тәшкил иткән быҙау тиреһенән яһалған иң боронғо Ҡөрьәнде күрер өсөн бөтөн донъянан килерҙәр ине. Бындай оло хазинаға эйә булыуыбыҙ тураһында күптәр хәбәрҙар түгел...**

**З. Шәрипова:** Етмешенсе йылдарҙа Бөрйәнгә бер ҡайтҡа-

# ТРАДИЦИЯҢ БАЙ ИКӘН...

## етеш буласаҡ!

лимдар - күршәк, һәнәк-көрәк, башҡа шундай матди ҡорамалдарҙы үҙләштереп була, тик рухи мәҙәниәтте күсереп булмай, тип әйтәләр.

**З. Шәрипова.** Үҙ-ара аралашыуҙар, килешеүҙәр аша мәҙәниәттең матди элементтары тиҙ үҙләштерелә.Теләһәк-теләмәһәк тә әкренләп рухыбыҙ ҙа үҙгәрә, ситтәр тарафынан махсус та үҙгәртелеүе, үҙ асылыңды онотторолуҙары бар. Халыҡта әйтәләр бит: исеме бар, есеме юҡ, тип. Шул хәлдәргә төшөүҙән Хоҙай аралаһын!

**▶ Һеҙ, Зәкирйән Ғәлимйән улы, үҙегеҙҙең хеҙмәттәрегеҙҙә лә, сығыштарығыҙҙа ла башҡорттоң Уралға бәйлелеге тураһында бик нигеҙле итеп әйтәһегеҙ...**

**З. Әминев:** Башҡорттоң донъя мәҙәниәтенә индергән өлөшө бик ҙур. Беҙ уны, нисектер, кәметеп, ошо үҙебеҙ йәшәгән ер менән генә бәйләп һүҙ йөрөтәбеҙ. Башҡорттар, яугир халыҡ булараҡ, Евразияла булған бөтә ваҡиғаларға тәьҫир итеп торған. Уны һәр саҡ һуғышҡа яллағандар, йәғни бер тарихи ваҡиға ла башҡортһоҙ үтмәгән. Башҡорттоң элекке донъяһы тураһында хәҙерге хәлдән сығып ҡына хөкөм итергә ярамай. Башҡорт донъяһы үҙ заманында бик тә гәйрәтле һәм күп яҡлы, һәм бик тә теүәл булған - беҙҙең мәҙәниәтебеҙ бик боронғо, ә тамыр тәрәнгә киткән һайын халыҡтың көсө лә ныҡ була. Билдәле Рәсәй археологы С.А.Плетнева башҡорт мәҙәниәтенең бер туҡтауһыҙ, тотороҡло үҫеүен башҡорттоң Урал киңлектәрендә бик боронғо дәүерҙәрҙә үк формалашып, аҙаҡ төрлө тарихи ҡалынған ул. Был турала миңә мәрхүм философ Дамир ағай Валеев, әсәһе яғынан үҙе өпәй башҡорто, һөйләгәйне. Шуға, тарихи хәтерҙе өҙмәскә һәм үҙебеҙҙең Урал менән бәйләнгәнлебеҙҙе белеп үҙебеҙҙең мәҙәниәтте һаҡлап, үҫтереп йәштәргә тейешбеҙ, тип уйлайым. Урал төшөнсәһе беҙҙең мәҙәниәттең нигеҙе булып тора, беҙ Урал балалары, беҙгә был төшөнсәне тергеҙергә кәрәк.

**▶ Совет осоронда "мәҙәниәтле халыҡ, мәҙәниәтһеҙ халыҡ" тигән һүҙбәйләнештәр йыш яңғырай торғайны. Йәғни, яҙма китаптары, документтары булған халыҡ ҡына мәҙәниәтле лә, ә башҡалар мәҙәниәтһеҙ, сөнки уларға яҙманы совет власы биргән...**

**З. Шәрипова:** Эйе, бына шул "мәҙәниәтле халыҡ, мәҙәниәтһеҙ халыҡ" тигән төшөнсәнең бер яҡлы ғына аңлатылыуы халҡыбыҙ мәҙәниәтенә ҙур зарар килтерҙе. Боронғо замандарҙан бөгөнгө көнгә килеп еткән бөтөн мәҙәни байлыҡтарыбыҙ тере һүҙҙә, шулар теркәлгән текстарҙа һаҡланған. Ләкин был бер ҙа-

Ҡайһы ғына осор булмаһын, халыҡ мәҙәниәтенең көндәлек тормоштағы үҙенсәлектәре ҡулъяҙмаларҙа сағылыш тапҡан. Типография булмағас, үткән быуаттың утыҙынсы йылдарына тиклем башҡорттоң төп яҙмаһы ғәрәп графикаһындағы ҡулъяҙма булып ҡала. Быуаттар буйы тупланған ошо яҙма байлығыбыҙҙы арбалап-арбалап макулатураға тапшырған, йылғаларға илтеп ырғытҡан осраҡтар ҙа билдәле. Университетты тамамлағас, мин Тарих, тел һәм әҙәбиәт



*Башҡорттоң донъя мәҙәниәтенә индергән өлөшө бик ҙур. Беҙ уны, нисектер, кәметеп, ошо үҙебеҙ йәшәгән ер менән генә бәйләп һүҙ йөрөтәбеҙ. Башҡорттар, яугир халыҡ булараҡ, Евразияла булған бөтә ваҡиғаларға тәьҫир итеп торған. Уны һәр саҡ һуғышҡа яллағандар, йәғни бер тарихи ваҡиға ла башҡортһоҙ үтмәгән. Башҡорттоң элекке донъяһы тураһында хәҙерге хәлдән сығып ҡына хөкөм итергә ярамай. Башҡорт донъяһы үҙ заманында бик тә гәйрәтле һәм күп яҡлы, һәм бик тә теүәл булған - беҙҙең мәҙәниәтебеҙ бик боронғо, ә тамыр тәрәнгә киткән һайын халыҡтың көсө лә ныҡ була.*

институтында эшләнем, ҡулъяҙмалар бүлеген ойоштороуҙа ҡатнаштым. СССР Фәндәр академияһы совет иле халыҡтарының революцияға тиклемге әҙәбиәт тарихтарын яҙыуҙы планлаштырғас, башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙыу өсөн Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов етәкселегендә йыл һайын экспедициялар ойошторолоп, бик күп ҡулъяҙмалар тупланды. Шулар нигеҙендә биш томлыҡ башҡорт әҙәбиәте тарихы яҙылды. Башҡорттар йәшәгән ауылдарҙан йыйып тупланған ҡулъяҙмалар нигеҙендә генә беҙ башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тарихының тамырҙары бик боронғо икәнен иҫбатлай алдыҡ. Ғөмүмән, яҙма әҙәбиәт, ҡулъяҙмаларҙың беҙҙәге торошо

жәғәт итһәм, ҡулъяҙма юғалған булып сыҡты. Уникаль ҡулъяҙманы юллап табыу мәсьәләһен үҙем эшләгән осорҙағы етәкселек алдында ҡат-ҡат күтәрһәм дә, иғтибарға алынманы. XI быуаттың атаҡлы ғалимы Мәхмүт Ҡашғариҙың "Диуану лөғәт әт-төрк"өнән күләме буйынса ике ярым тапҡырға ҙурыраҡ был һүҙлек Башҡортостанды, Өфөнө, башҡорт фәнен барлыҡ ғәләмгә танытып, донъяның күренекле ғалимдарын ылыҡтырыр, республикабыҙҙы төрки донъяһының таныулы үҙәгенә әйләндерер ине... Әгәр юғалмаһа...

**З. Әминев:** Мин бала саҡта беҙҙең күршелә Бәхтиәр олатай Хәмитов йәшәне. Ул элекке уҡытыусы, Бабич менән бергә заманымда "Аралбай ауылында быҙау тиреһенә яҙылған шәжәрә булған" тигән хәбәр ҡолаҡҡа төшкәс, шуны бик оҙаҡ юллап йөрөнөм, ул эҙһеҙ юғалған булып сыҡты. Райондашым Мохтар ағай Сәғитов һөйләүенсә, утыҙынсы йылдарҙа мәсет манараларын ауҙарыу башланып киткәс, Иҫке Собханғол эсендәге Алағуян ярында тире менән көпләнгән ҡалын-ҡалын китаптар өйөлөп ятҡан, кешеләр төндә йәшеренеп кенә шуларҙы алып ҡалырға тырышҡан. Йыртҡылау, ташлау китапҡа ҡарата вәхшилек күрһәтеү һымаҡ ҡабул ителгәнгә күрә, ер ҡуйынына тапшырған күбеһе. Мәҫәлән, 1978 йылда Иҫке Монасиптан Әхмәтшәриф олатай Сәғитов боронғоса уҡый белеүемә, ҡулъяҙмаларға ҡиммәтле әйбер итеп ҡарауыма инанғас, атаһы Ильяс мәзиндең баш осона боронғо китаптарын күмгәнлеген әйтте. Икәүләп зыяратҡа барып, ҡәбер эргәһен ҡаҙып, туҙға тәрөлгән 28 ҡулъяҙманы күтәреп алдыҡ. Араһында тап минең эҙләнеүҙәр темаһына бәйле Һибәтулла Сәлихов ижады буйынса материал килеп сыҡты. Был китаптың исеме фәндә билдәле, тик тексы юҡ ине, шул табылды. Нисә йыл ер аҫтында ятҡан бит инде. Хәҙер улар Институттың ҡулъяҙмалар бүлегендә мәңгелек һаҡлауҙа. Әхмәтшәриф олатай үҙе йәшәгән өйҙөң ҡаршыһындағы бейек тау башындағы таш ҡыуышлығына күпмелер китаптарҙы йәшереүен дә һөйләгәс, ул саҡтағы район гәзите редакторы Инсур Йәһүҙин ярҙамында ат-арба табып, олатайҙы тау башына мендерә алдыҡ. Олатай китаптар йәшергән урынын яҡшы хәтерләй ине, тик ул ҡағыҙҙар сереп, ҡулда уҡ ыуалып торалар ине...

(Дауамы 10-сы биттә).

*✓ Өфөлә республикаға исем биргән халыҡтың йөҙөн күрһәтерлек бер урын табырмын, тимә. 2024 йылда ҙур юбилей көтөлә. Өфөнө Башҡортостандың баш ҡалаһы, башҡорттарҙың боронғо йәшәгән ере тип күрһәтер урындар кәрәк.*

# РУХЫҢ КӨСЛӨ, ТРАДИЦИЯҢ БАЙ ИКӘН...

## матди донъяң да етеш буласаҡ!

(Башы 8-9-сы биттә).

**Эйе, мәҙәни һәм рухи мираҫты һаҡлау буйынса йәнде өшөткән оло проблемалар бар беҙҙең йәмғиәттә. Йылды Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫына арнау юҡтан ғына түгелдер. Әлбиттә, рухи һәм мәҙәни ҡомартҡыларыбыҙҙы тергеҙеүҙе бер йыл эсендә генә атҡарып сығып булмаясаҡ, ә шулай ҙа йәмғиәттең иғтибарын ошо проблемаға йүнәлтеү бик урынлы булды. Ошо уңайҙан быйыл иң тәүге сиратта нимәләргә иғтибар итеү кәрәк тип уйлайһығыҙ?**

**З. Әминев:** Боронғо әҙәбиәт, урта быуат, XVIII-XIX быуат әҙәбиәтендә танылған шәхестәрҙең күбеһе тарихи Башҡортостан ерендә хеҙмәт иткәндәр. Был башҡорт мәҙәниәтенең, рухиәттең ниндәй юғары кимәлдә булыуын күрһәтә. Тарихи Башҡортостан ерендә, мәҫәлән, археологтар көмөштән, баҡырҙан яһалған әйберҙәр табалар, уларҙың ҡайһы берҙәрендә арамей графикаһында соҡоп, нимәләрҙер яҙылған, тик әлегә уларҙы уҡый алмайҙар. Мин уларҙы табылған урындары буйлап картаға һалып сығып, барыһының да сығышы тарихи Башҡортостан еренән икәнен асыҡланым. Бөтөн СССР-ға билдәле археолог, бронза дәүере - боронғо скиф-сарматтар буйынса белгес, мәрхүм Рәмил Бакир улы Исмәғилевҡа ошо турала әйтһәм, башта ышанманы. Унан үҙе лә тикшерҙе һәм бындағы мәҙәниәт беҙҙең эраға тиклем формалашҡан, тине. Фәндә "туйындырған-һыйындырған, яҡлаған ер" тигән төшөнсә бар. Урыҫса уны "Вмещающий ландшафт", тиҙәр. Уның, йылғамы-таумы, тәбиғи сиктәре лә була. Мәҫәлән, беҙҙең өсөн башҡорттарҙың ватаны - көнсығышта Иртыш менән Тобол, көнбайышта Иҙел (хәҙерге Волга), төньяҡта Сулман (Кама), Чусовая (Шуша) йылғаларына тиклем. Иранда сасанидтар хөкөм һөргән дәүерҙә яһалған алтын, көмөш, баҡырҙан яһалған әйберҙәрҙең иң күп тупланған урыны - ошо сиктәр араһында, башҡорт ерендә.

**З. Шәрипова:** Мәҙәни байлыҡтарыбыҙҙы бер система итеп ҡарау, уларҙы тарихи күҙлектән яңыса баһалау, шул нигеҙҙә, яңы тарихи, мәҙәни белем биреү бурысы тора. Туристарҙы йәлеп итеү генә түгел, туристарҙы тыуған төйәгебеҙҙе яраттырырға өйрәнергә тейешбеҙ. Ә яраттырыр өсөн тәүҙә Башҡортостаныбыҙҙы, уның тарихын үҙебеҙ яратырға бурыслыбыҙ. Тыуған еребеҙҙе үҙебеҙ ҡәҙерләргә, әһәмиәтен үҙебеҙ белергә тейешбеҙ. Профессор Роберт Байымов коллегалары менән Әрмәнстанға конференцияға барып ҡайтҡас, иҫе китеп һөйләгәйне. Унда ҡулъяҙмалар һаҡланған фәнни-тикшеренеү үҙәге Матенадаран туғыҙ ҡатлы бинаны биләй икән, шунда экскурсияға алып барғандар. "Экскурсовод әрмән телендә генә һөйләй, ә тәржемәсе руссаға тәржемә итә. Бер мәл экскурсовод: "Ошо ерен яңылыш тәржемә иттең", - тип, тәржемәсене төҙәтте. Шул тиклем аптыраным, русса белә тороп, делегацияға әрмән телендә генә экскурсия үткәрә", - тигәйне. Йәғни, үҙеңдең тел байлығын күрһәтеүҙән бигерәк, үҙ милли йөҙөң өсөн ғорурлыҡ тәрбиәләү - улар өсөн бик мөһим тип ҡаралған шул осорҙа уҡ. Ә беҙҙең тормошобоҙ шулай ҡоролған инде, төрлө балаларҙы үткәреп, ҡыҫымға алынып, яраҡлашып йәшәргә тырышҡанбыҙ. Сөнки яраҡлашмайынса, ҡыҫымға түҙеп йәшәмәйсә, тере ҡалып булмаған. Шуға әле лә ярарға тырышып, килгән кешеләргә улар теләгән һүҙҙе әйтергә, күҙҙәре ҡыҙған әйберҙәрҙе бушлай бүләк итергә тырышабыҙ. Юҡ, улай түгел, уның дөрөҫө былай, тип ҡаршы әйтергә йөрьәт иткән белгестәребеҙ һирәк.

**З. Әминев:** Мостай Кәрим бер хәтирәһендә яҙып сыҡҡайны: республикабыҙға индустар килгәс, уларҙың күңелен күрәбеҙ тип, бик тырышҡандар. Шунда тегеләрҙең билдәле шәхесе: "Беҙгә ярайбыҙ, тип, һеҙ үҙегеҙҙең йөҙөгөҙҙө юғалтаһығыҙ бит", - тип әйткән.

**З. Шәрипова:** Ысын мәҙәниәт, ысын тарих, ысын ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үҙләштергән белгестәрҙе күпләп әҙерләү бурысы тора беҙҙең алда. Иҫегеҙҙә булһа, күптән түгел Салауат Юлаев хаҡында дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр менән шаңҡытыусы экскурсовод интернет селтәрен ҡуҙғытҡайны. Шул ғына миҫал да был проблеманың актуаллегенә ишара лабаһа! Был йылда республикалағы мәҙәни ҡаҙаныштарҙы күрһәтеү менән бергә, белгестәрҙең кимәлен күтәреү мәсьәләһен дә ҡарарға кәрәк. Улар өсөн китаптар-әсбаптар әҙерләүҙән тыш, ҡалыплашмаған лекциялар үткәреү ҙә зарур. Бына Зәкирйән Әминев, ниндәй күп планлы шәп белгес, ниңә уны файҙаланмаҫҡа? Төрлө өлкәләрҙә хеҙмәт иткән белгестәребеҙ байтаҡ, уларҙы ла йәлеп итергә кәрәктер. Шунса селтәр-һаҡал күрһәтелде, шунса сергетыш тегелде, шунса байрам ойошторолдо, тигән күрһәткестәр ҙә бик кәрәк, әлбиттә. Шуға ҡушып, дөйөм мәҙәни кимәлде күтәреүгә лә йүнәлеш тотолһа, үтә отошло булыр ине. Кимәл күтәрелһә, иҫ киткес ҙур мәҙәни проекттарҙы уйлау һәм тормошҡа ашырыу күпкә еңелләшер ине. Халыҡтың рухы күтәрелһә, күҙе асыла. Беҙҙең халыҡтың аҡылына аптырайым. "Күҙ асыла", ти ул. Белем булһа, донъяны нығыраҡ күрә башлайһың, ышанысың барлыҡҡа килә, рухың ныҡ икән, көсөң һәм үҙ-үҙеңә ышанысың арта. Көсөң бар икән, төрткөләгәнде-этkeләгәнде көтөп ятмайһың, ең һыҙғанып, эш башлайһың. Күҙ асылыу, бер ҡараһаң, иҡтисади әүҙемләшеүгә лә этәрә, һәр берәүгә донъяла үҙ урынын табырға, күңеленә ятҡан шөғөл йүнләргә мөмкинлектәр бирә.

**З. Әминев:** XVIII быуатта, 1784 йылда, бер француз Рәсәйҙә булып китә, Өфөгә лә һуғыла. Юлда барғанда дуҫына үҙе күргән урыҫ, татар, сыуаш, сирмеш (мари), мордва, удмурт халыҡтары тураһында яҙып бара. "Ә хәҙер мин, - ти, - бөтөн күргән халыҡтар араһында иң ҡыҙығы һәм лайыҡлыһы башҡорт халҡы янындамын. Бик ҡыҙыҡ, үҙенсәлекле халыҡ", - тип яҙа ул хатында. Башҡорттарҙың йорт-ҡураһын, нисек итеп урыҫтарға металлургия үҫтерергә ярҙам иткәндәрен һәм заводтар тураһында бәйән итә, йәғни, мәҙәниәтебеҙҙең үҫешен тасуирлай. Урыҫ металлургияһы XVIII быуатта ғына үҫешә башлай. Уға тиклем уның кимәле бронза дәүерендәге кимәл менән тиң була. Ә Европала был ваҡытта яңы технологиялар барлыҡҡа килгән була. Башҡорт металлургияһы европаларҙан ҡалышһа ла, күптән үҫешкән була.

**Мәҙәниәтең иң үҫешкән осорон сәнәғәт үҫеше менән бәйләйҙәрме? Беҙҙең сәнәғәт, металлургия, шуға бәйле традициялар тураһында ла мәғлүмәттәр биреү ҡыҙыҡ булыр ине.**

**З. Шәрипова:** БСТ өсөн әҙерләнгән "Байман" тапшырыуҙарының береһендә башҡорт алтыны тураһында һүҙ барҙы. Этнограф Мирза ағай Муллағолов башҡорттарҙың металл иретеүе тураһында һөйләгәйне. Алтын-көмөш меңдән ашыу градуста ирей икән. Шул температураны нисек тыуҙырғандар? Аш бешергән өй мейесендә түгел бит инде. Ауыл шартарында, үҙҙәре ҡулдан яһаған ҡоролмаларҙа иреткәндәр. Башҡорт металсыларының иҫ киткес оҫталығына һоҡланыуын ул ҡат-ҡат ҡабатлағайны фильм барышында.

**З. Әминев:** Пермдән тарих фәндәре докторы, археолог Черных башҡорттар нигеҙ һалған Ырымбур өлкәһендәге Ҡарғалы ауылы тураһында: "Ҡарғалы рудникгына - өс мең дә биш йөҙ йыл", - тип яҙа. Унда бер туҡтауһыҙ руда сығарылған, ә иретеү өсөн Уралға алып килгәндәр, сөнки иретергә һыуы ла, утыны ла кәрәк. XVIII быуатта урыҫтар заводтар төҙөй башлағас, башҡорттар Ҡарғалы рудниктарында күпләп эшләйҙәр, сәнәғәтселәр һәйбәт түләгәс, урыҫ крәҫтиәндәре башҡорттарға көнләшеп ҡарай. Дөйөм алғанда, башҡорттар урыҫ сәнәғәтселәренә конкурентлыҡ тыуҙыра. Ә конкурентты нисек тә алып ташларға кәрәк. Шуға беҙҙең халыҡҡа металлургия менән шөғөлләнеү тыйылыуын ҡорал әҙерләү менән генә бәйләргә ярамай. Бая үрҙә телгә алған француз: "Уралдағы бөтә заводтар башҡорттар күрһәткән ерҙәргә төҙөлгән", - тип яҙа. Петербургтан Уралға заводтар тикшерергә ебәрелгән Генин хәҙерге Магнитогорск эргәһендә күргәндәренән сығып: "Башҡорттар сифатлы тимер иретә, иң шәп булат ҡоросон шунда яһайҙар", - тип яҙа. Лепехин да шуны раҫлай. Беҙҙең рухи донъябыҙ ифрат бай булған, шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең тәбиғәткә яраҡлашҡан матди донъябыҙ ҙа булған.

**З. Шәрипова:** Рухың көслө, традицияң бай икән, һин матди донъяның иң байын барлыҡҡа килтерәһең. Рухты үҫтереү - халыҡты тергеҙеү һәм артабан үҫтереү тигән һүҙ. Совет власы төҙөлгәс, Ер тураһында декрет менән бергә культураны үҫтереү - уҡытыу, белем усаҡтарын асыу мәсьәләһе күтәрелгән. "Искусство принадлежит народу," тип яҙған икән большевиктар партияһы етәксеһе, был буштан бушҡа түгел. Бер нисә йыл эсендә генә юҡтан бар ителеп, СССР дәүләте донъяла көслө дәүләт булып үҫешә.

Әле бына мәҙәниәт тураһындағы һөйләшеү барышында күңелде өйкәп торған тағы бер күренешкә туҡталғы килә. Өфөгә ҡунаҡтар даими килеп тора. "Ҡалағыҙҙың үҙәген күрһәтегеҙ", тиҙәр. Беҙҙең өсөн ул Салауат Юлаев һәйкәле бит инде. Унда алып барһаң: "Үҙәк ошо ғынамы ни?"- тип аптырайҙар. Өфөлә Башҡортостандың баш ҡалаһы итеп күрһәтерлек урындар юҡ самаһында, тип әйткем килә. Үҙәк тип, "Өфө" универмагына, әллә мэрия эргәһенә алып барырғамы? Унда Ленин һәйкәленән башҡа бер нәмә лә юҡ. Өфөлә республикаға исем биргән халыҡтың йөҙөн күрһәтерлек бер урын табырмын, тимә. 2024 йылда ҙур юбилей көтөлә. Өфөнө Башҡортостандың баш ҡалаһы, башҡорттарҙың боронғо йәшәгән ере тип күрһәтер урындар кәрәк, сөнки кеше иң элек матди донъяға иғтибар итә. Аллаға шөкөр, "Ете ҡыҙ" ансамблен эшләп ҡуйҙылар, ләкин был ғына аҙ. Хатта Бабичтың һәйкәлен дә һәйкәл итеп күрһәтеп, уның хаҡында мәғлүмәттәр биреп, уның хаҡында илаһи фекерҙәр менән бүлешеп булмай. Эргәһендә уйланып ултырырлыҡ түгел, баҫып торорлоҡ та урын юҡ.

Өфөлә туристарҙы шаҡ ҡатырырлыҡ заманса архитектура объекттары төҙөргә өндәмәйем, ә уның тышҡы милли йөҙөн булдырыу хаҡында һүҙем. Асылда, тарихи урындарҙың барыһы ла тиерлек Киров районында урынлашҡан. Яңынан-яңы мәҙәниәт усаҡтары әлеге шул Аҡ йорт тирәһенә өйөлгәндән-өйөлә. Ә ҡаланың башҡа муниципаль берәмектәрендә нимә менән ҡыҙыҡһындыраһың кешеләрҙе?

**Мәҙәниәт тибеҙ икән, ул Урал рухын һаҡлау менән бәрәбәр. Был бәхәсһеҙ, һәм уның шулай икәнен бүтәндәргә еткерергә, еткерә белергә тейешбеҙ.**

**З. Әминев:** Башҡорт башҡорт булып Уралда ғына һаҡлана ала. Европаға ла, Азияға ла киткәндәр бар, ләкин улар юғалғандар. Сөнки тегендә - икенсе мөхит. Күсенеү туғыҙынсы быуатта башлана, Урал өлөшө тороп ҡала. Көньяҡ өлөшө - дала яғы - күсенә башлай. Сөнки далала халыҡ һәр ваҡыт йөрөп тора. Ғалимдар ҡаҙаҡ ерендә боронғо ҡомартҡыларҙы табып булмай, тип әйтәләр. Гел күсенеп йөрөгәс, уларҙың топонимияһында ла боронғолоҡ юҡ. Һөйләштәрендә әҙерәк кенә айырма бар, ләкин диалект юҡ. Сөнки күсенеп йөрөгәндә аралашыу ныҡ бара. Мәҫәлән, ненецтарҙы алайыҡ, улар Мурманск өлкәһенән алып, Ҡытайға тиклем арауыҡта йәшәйҙәр. Береһе былай китә, икенселәре - тегеләй... Шул ерҙәр буйлап гел күсенеп йөрөгәс, телдәре ныҡ шымара, диалекттары юҡ.

Ә беҙҙә боронғолоҡ һаҡланған. Беҙҙә тауҙың бер яғында бер төрлө, тауҙың икенсе яғында икенсе төрлө һөйләшәләр. Беҙҙең параллелдәрҙе Иранда, Урта Азияла табырға була. Хорезм менән беҙҙең бәйләнеш ныҡ булған. Заманында ҡарағалпаҡтарҙың ата-бабалары ла башҡорттоң бер өлөшөн тәшкил иткән. "Бер дәүерҙә беҙ ҙә Иҙел буйында йөрөнөк", тип әйтә улар, был уларҙың аңында һаҡланған. Рухиәтебеҙҙең тамырҙары беҙҙе шулай беҙҙең эраға тиклемге осорҙарға алып инеп китә. Йәғни, башҡорт мәҙәниәтенең тотороҡло үҫеше Урал тауҙары менән ныҡ бәйле һәм бик боронғо дәүерҙәргә барып тоташа...

**З.Шәрипова:** 2022 йыл - республикала ла Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мираҫ йылы тип иғлан ителде, тимәк, тейешле аҡса ла бүленәсәк, был темаға һөйләшеүҙәр ҙә, эштәр ҙә хупланасаҡ. Беҙҙекеләр матур итеп, шунса концерт ҡуйылды, шунса кисә, экскурсия, конкурс, конференция һ.б. үткәрелде тип, мәҙәниәт йылын бары арифметик күрһәткестәргә ҡайтарып ҡалдырмаһалар ярар ине, тип хафаланам. Уның халыҡҡа, халыҡ тарихына һәм рухына бәйле яғын иҫтә тотһондар ине.

Бәхеткә, әле ваҡыт үтмәгән. Мәҙәниәттең асылына ҡайтыу һәм халыҡты мәҙәниәтле итеү процесы башланған икән, быны төрлө яҡлап хупларға, һәм ошо йылдың биргән мөмкинлектәренән файҙаланып, халыҡтың үҙаңын күтәреү маҡсатында аныҡ белем биреү, тәрбиәләү, мәҙәниәтен күтәреү юлында ҙур эштәр башҡарырға кәрәк.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

✓ *Бер мәл күңелгә һеңдерерлек сығышын тыңлағандан һуң һорамайынса булдыра алманым: "Ҡайҙан һеҙҙә шундай мәғлүмәт, фекер?" Хәсән ағай уйынлы-ысынлы әйтеп ҡуйҙы: "Үҙем дә белмәйем. Ҡайҙандыр күңелдән сыға".*



*ӘҘИП ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ*

**Буласаҡ ғалим, тикшеренеүсе Михаил Ломоносовтың тәрлә ылауға эләгеп-һағып, ун туғыҙ йәшендә Мәскәүгә уҡырға килеүе тураһындағы тарихты беҙ мәктәп йылдарынан яҡшы беләбеҙ. Был иғтибарға лайыҡ ваҡиға, әлбиттә. Ә шулай ҙа башҡорт тарихында үҙҙәренең тәүәккәллеге, бала сағында яһаған ҡыйыу аҙымы менән аптыратҡан да, һоҡландырған да, уйландырған да шәхестәр барлығын беләбеҙме икән? Һүҙем шундай шәхестәрҙең береһе - Башҡортостандың халыҡ шағиры Хәсән Назар тураһында булыр.**

# УЙЫ ТӘРӘН, РУХЫ ЮҒАРЫ

Буласаҡ шағир бәләкәйҙән әҙәбиәткә мөкиббән булып үҫә. Китапхана - уның серҙәше лә, кәңәшсеһе лә, рухландырыусы дуҫы ла була. Бер заман Хәсән атлы малайҙың ҡулына Зәйнәб Биишеваның "Дуҫ булайыҡ" повесы килеп эләгә. Ундағы мажараларҙы иҫе китеп, йотлоғоп уҡыған малай, тәьҫораттары менән уртаҡлашып, Башҡортостан "Китап" нәшриәтенә хат яҙып ебәрә. Был хатты, әлбиттә, авторға тапшыралар. Бына шунан алып яҙыусы менән уҡыусы араһында хатлашыу башлана. Зәйнәб апай маҡсатлы баланы Өфөгә килергә саҡыра, уны интернатҡа уҡырға индереү тураһында ла уйлай. Бишенсе класта уҡып йөрөгән Хәсән Назаров бер ниндәй документһыҙ-ниһеҙ баш ҡалаға юллана. Ул замандарҙағы транспорт хәлен үҙегеҙ беләһегеҙ, тура бәйләнеш юҡ. Хәсән Ырымбур өлкәһендәге Ҡыуандыҡ ҡалаһына барып, поезға ултыра һәм Силәбе аша Өфөгә килеп етә. Барып таба ул Зәйнәб Биишеваны. Зәйнәб апай уны интернатҡа уҡырға юллап ҡарай, ләкин документһыҙ баланы баш ҡалала кем алырға ризалашһын? Зәйнәб апай уны Стәрлетамаҡҡа юлламаҡсы итә, ләкин Хәсән Назаров баш тарта һәм кире тыуған яғына ҡайтып китә. Ләкин әҙәбиәт уның тотош донъяһына әйләнә, артабан яҙмыш ҡайҙа йөрөтһә лә, әҙәбиәткә хыянат итмәй. Ғүмер аҙағына тиклем Зәйнәб апай ҙа уны үҙенең яҡын дуҫы итеп күрә. Маҡсат артынан бишенсе класс уҡыусыһының оло юлға тәүәккәллек итеүе - үҙе бер феноменаль күренеш, сөнки Хәсән ағай һайлаған изге юлынан тайпылмай.

Рәми Ғарипов менән ижадташ дуҫлыҡ тураһында ла әйтергә кәрәк. Ун йыл дауам иткән аралашыу береһенең



дә тормошонда эҙһеҙ үтмәгәндер. Мин Хәсән ағайҙан: "Һеҙ үҙегеҙҙе уның уҡыусыһы йәки шәкерте, тип атайһығыҙмы?" - тип һораным. Хәсән ағайҙың яуабы һәр ваҡыттағыса теүәл һәм аныҡ булды: "Яһалмалыҡтан ҡасыу, ысынбарлыҡты сағылдырыу һәм шиғри һүҙгә талапсанлыҡ йәһәтенән өлгө алдым. Ләкин уҡыусыһы тип әйтмәҫ инем, кемдеңдер уҡыусыһы булып ҡына үҫеү мөмкин түгел. Кеше үҙендә булған талантты үҫтерә".

Хәсән ағай тарихыбыҙ тураһында бик мәғлүмәтле. Халыҡ шағиры менән ижади командировкаларҙа булыу бәхете лә тейҙе. Ул бер ҡайҙа ла үҙенең сығышын ҡабатламай. Һәр урында шағир ауыҙынан яңы һүҙ һәм төплө фекер ишетәһең. Бер мәл Аҡмулла тураһындағы күңелгә һеңдерерлек сығышын тыңлағандан һуң һорамайынса булдыра алманым: "Ҡайҙан һеҙҙә шундай мәғлүмәт, фекер?" Хәсән ағай уйынлы-ысынлы әйтеп ҡуйҙы: "Үҙем дә белмәйем. Ҡайҙандыр күңелдән сыға".

Эйе, Хәсән ағайҙы юҡҡа ғына "сәсән" тип йөрөтмәйҙәрҙер шул, ошо тапҡырлығы халыҡ алдында сығыш яһағанда айырыуса асыҡ күренә. Шағирҙың илһамлы күңел донъяһы киң. Унда йыр-моң сәнғәте айырым урын биләп тора. Йәш сағында Хәсән ағай йырлаған, имеш, тигәндә ишеткәнем бар ине. Уның йырлағанын хәҙер хәтерләүселәр юҡтыр. Шулай ҙа миңә ағайҙы тыңлау насип булды, мәгәр. Халыҡ йырҙарын башҡарған йырсыларыбыҙ тураһында күпме мәҡәләләр яҙҙы ул. Хәсән ағай талантты талант тип атай һәм уны күтәрә лә белә. Халыҡ йырсыһы Фәриҙә Ҡудашева менән һәр саҡ аралашып йәшәнеләр. Фәриҙә апай тураһында альбом сығыуында Хәсән Назарҙың хеҙмәте тос.

Романтик рухлы шағирыбыҙ Рафаэль Сафинға иғтибар кәмеүенә борсолоу белдерер: "Ул ҙур ижадсы. Ҙур шәхес. Иҫкермәй торған шиғырҙар яҙҙы, уларҙы йыл да яңғыратырға кәрәк", - тип әйтә килә.

Таланттарҙы баһалай, һәм уларҙың хәленә инә белгән Хәсән Назар журналист, шағир Ғәбиҙулла Зарипов ҡаты сиргә дусар булып, тыуған яғына ҡайтып китергә мәжбүр булғас, уның хәлен яҡшыртыу буйынса хәстәрлек күрергә тырышты. Салауат районына бер осрашыуға барғанда туп-тура район башлығына инеп, бик ҡәтғи итеп ошо мәсьәләне күтәргәйне.

Теге йәки был мәсьәләгә үҙенең мөнәсәбәтен асыҡ әйтә алған тура һүҙле әҙип, әлбиттә, бөтә кеше өсөн дә унайлы түгелдер. Һәр нәмәгә үҙ ҡарашы бар, был иһә күпселектең фекере менән тура килмәүе ихтимал. Ләкин ғәҙел уның әйткәндәре. Хәсән Назар үҙ инаныуы менән көслө. Ошо ғәҙеллек һәм талапсанлыҡ, намыҫлы булыу, киң күңеллелек уның емешле ижады булып ҡуҙаллана. Йөрәктән ярып сыҡҡан һүҙ йөрәккә барып етә. Һәм әҙип йөрәгенән сыҡҡанды еткерә килә үҙенең уҡыусыһына. Яһалмалылыҡ уға ят төшөнсә.

Мәүлит ағай Ямалетдин халыҡ шағиры Хәсән Назар тураһында ҡасандыр "Уйы тәрән, рухы юғары" тигән мәҡәлә яҙғайны. Назар ижадының, ғөмүмән, тормошоноң төп асылын әйтеп биргән юлдар бит былар. Донъяға берсә сабыйҙар сафлығы, берсә ирҙәман, аҡһаҡалдар аҡылы, хикмәте менән баҡҡан талант эйәһенең ижады иҫ киткес бай, төплө, йөкмәткеле. Йәш ижадсыларҙың ошо талант эйәһенең башҡорт рухын айырым бер тәрәнлектә аңларға ярҙам иткән поэмаларына иғтибар итеүҙәрен теләр инем, унда үҙҙәре өсөн әллә күпме илһам осҡоно табасаҡ улар. Шундай бай кеше ул халыҡ шағиры Хәсән Назар! Ә уның сере "Ғүмер һәм дәүер" китабында яҙылған:

Кешем! Байлыҡ - иман түгел,
Иманың үҙе - байлыҡ.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

# ЮМОРҺЫҘ ЙӘШӘҮ ЙӘШӘҮМЕ?

**Юморһыҙ йәшәп булмай был тормошта. Йәшәп булалыр, ләкин ул йәшәүме икән? Ниндәй генә ауыр ваҡыттар булмаһын, шуҡлығын, шаянлығын юғалтмаған әҙәм балалары. Үтә етди кешеләр ауырыраҡ ҡабул итә шаярыуҙы, хатта аҡылһыҙлыҡҡа һанағандар ҙа юҡ түгел. "Юморһыҙлыҡ аҡылһыҙлыҡҡа тура пропорциональ", ти торғайны билдәле психолог мәрхүм Вадим ағай Сафин. Һүҙ тағы ла Әбйәлил районы Әсхәл Әхмәт-Хужа исемендәге "Йәйғор" әҙәби берекмәһе ағзаларына ( улар гәзитебеҙҙең былтырғы 51-се һанында ла сығыш яһағайны).**

***Илсиә Ҡасимова:*** Ҡыш көнө ауылдан ике ир Ҡаҙаҡ урыҫ ауылына, быйма алырға барғандар. Туй барған мәлгә тура килгән был икәүҙең сәфәре. Улар ҙа ҡыҙмаса булған туй ҡунаҡтарының араһына ҡыҫылған да киткән. Ҡоҙалар быларҙы ҡаршы яҡтыҡылар, тип уйлап, иғтибар итмәгән. Табанлы быймалары менән рәхәтләнеп бейей, ти был икәү. Бүләктәр биреү мәле килеп еткәс, береһе: "Агай, әйҙә, козу дадим, тип әйтәйек тә ҡуяйыҡ", - ти икән. Козу дадим, тигәндәре әле лә лаҡап булып йөрөй беҙҙең яҡтарҙа.

***Марсель Хамматов:*** Фаяз апа, сығышы буйынса Ҡаҙан татары, ғүмере буйы Тупаҡ ауылында йәшәне. Бер мәл быларға Татарстандан туғандары килеп төшкән. Кискеһен көтөүҙән ҡайтып килгән мәлдә быларҙың ҡапҡа эсенә үҙҙәренекенә ҡушылып, егермеләп һыйыр килеп ингән.

- Фаяз, һин шулай күп итеп һыйыр көтәһеңме? - тип, ҡунаҡтарҙың иҫе киткән.

- Фәриҙә, бөгөнгә икәүһен генә һауып тор, ҡалғандарын сығарып ебәрейем, ҡунаҡтарҙы ҡарарға кәрәк бит, - тигән был һыр бирмәй генә.

***Илсиә Ҡасимова:*** Ирҙәр өймәкләшеп үҙ-ара һөйләшеп торғандар. Эргәләрендә бер кәзә үлеп ята икән. Шул тирәлә яҡын йәшәгән бер ир былар эргәһенә килгән дә, кәзәгә төртөп: "Карап алырга ла эшкинмәгәстәре, правильно үлеп ята был кәзә", - тип һығымта яһаған. Шул мәл былар эргәһенә бының әбейе йүгереп килгән.

- Атаҡ- атаҡ, бабай, беҙҙең кәзә үлеп ята лабаһа, - тигән, кәзәне күреп. Әлеге бабай ҙа, инәй ҙә күптән баҡыйлыҡҡа күстеләр. "Правильно ятып үлгән был кәзә", тигәне лаҡап булып йөрөй һаман да.

***Исмәгзәм Исмәғилев:*** Бер әбейҙең кәзәһе үлгәс, акт төҙәр өсөн ветврач саҡырған. Шунһыҙ страховка аҡсаһы түләнмәй икән. Белеме самалыраҡ булғандыр инде мал врачының, рәсми ҡағыҙға "Правильно ятып үлгән был кәзә", тип яҙып, ҡултамғаһын ҡуйған.

Шул уҡ ветврачмы, икенсе берәйһеме, белмәйем, тауыҡ фермаһында бер тауыҡ ике штакетник араһына муйыны ҡыҫылып, быуылып үлгәс, актҡа "Курица сама повесилась", тип яҙып, мисәт ҡуйған.

***Әлфирә Нуритдинова:*** Әсәләре ҡапыл ауырып киткәс, тиҙ ярҙам машинаһы саҡырғандар. Ғаиләләге иң бәләкәй малайҙары урамда машина килгәнде көтөп йөрөй, ти. Машина килгәс, өйгә йүгереп ингән дә "Быстрый нос килде!" - тип яр һалған. Әле лә беҙҙә "скорыйҙы" "быстрый нос" тип тә йөрөтәләр.

***Илсиә Ҡасимова:*** Бер әбей ҡунаҡтанмылыр, ҡайҙандыр, һуңлаңҡырап, ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтҡан. Өйҙә бушты-бушҡа ауҙарып ултырған килененә асыуы килгәндер инде:

- Нимә ҡарап ултыраһың, ана, кәртәлә һыйыр быҙаулаған, - тигән.

- Һыйыр ни, янырак ҡына быҙауланы бит, ҡәйнәм, - тип яуаплаған килене.

Ҡәйнә кеше бер ҙә бирешергә теләмәгән:

- Атаҡ-атаҡ, ҡыҙып китеп тағы быҙаулағандыр! - тигән.

***Исмәгзәм Исмәғилев:*** Ирҙәр ҡайҙандыр ҡайтып килгәндә, ямғырға эләгеп, лысма һыу булғандар. Арығандар, асыҡҡандар. Бер ышыҡ табып, ял итергә туҡтағандар. Араларынан береһе ҡуйынынан сығарып, ҡәйнәһенең фотоһын ҡарап ултыра, ти. Иптәштәренең һораулы ҡараштарына был ир үҙенсә яуап биргән:

- Ҡәйнә эргәлә булмағанда шул тиклем рәхәт!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ араһында лаҡаптар күп инде ул. Тик самаһын белергә кәрәк. Күләмдәр артыҡ булһа ла йәме китә. Дөйөм ятаҡ бүлмәһендә йәшәүсе студенттар йоҡлар алдынан бер-береһенә үҙҙәре белгән анекдоттарҙы һөйләй торғас, ялҡып бөткәндәр ҙә күләмдәрҙе нумерлап сыҡҡандар. Береһе әйтә, ти: "Анекдот №5". Икенсеһе, "Ҡыҙыҡ түгел, анекдот №8", тиһә, һындарыҙ ҡатып көлә-көлә йоҡлап китәләр, ти. Цифрлаштырыу заманында йәшәйбеҙ. Бөтөн нәмәне һандарға көйләп булалыр ҙа, бәлки, әммә күләмдәр үҙ мәлен белеп, үҙҙәренсә йәшәй. Һеҙҙән мәҙәк хәлдәр, көлкөлө ваҡиғалар тураһында ҡыҫҡа ғына уймаҡ хикәйәләр көтәбеҙ.**

**Урал ЙОСОПОВ**
**әҙерләне.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҢЕЛЕҢ ТӨШӨНКӨМӨ?

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, офис хеҙмәткәрҙәренең дүрттән бер өлөшө хроник күңел төшөнкөлөгөнән яфалана икән. Бындай саҡта уларға ҡәһүә һәм шоколад ярҙамға килә. Британия тикшеренеүселәре офистарҙа эш көндәре нисек үтеүен өйрәнеп, эш урынындағы төшөнкөлөктөң хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәте сифатына ғына түгел, ә физик һәм психик сәләмәтлегенә тәьҫир итә икәнен асыҡлаған.102 хеҙмәткәрҙән һорау алғандан һуң, уларҙың ҙур ғына проценты был төшөнкөлөктө ҡәһүә эсеп йәки шоколад ашап "баҫа", уларҙың ҡайһы берҙәре эш көнөнән һуң спиртлы эсемлектәр ҡуллана икәнлеге асыҡлана. Эште күңелле итеп алып барған, хеҙмәткәрҙәр бер-береһе менән йыш аралашҡан коллективтарҙа бындай хәл һирәк осрай, ти тикшеренеүселәр. Шулай уҡ етәксе талапсан булған урындарҙа ла хеҙмәткәрҙәрҙең күңелһеҙләнеп, төшөнкөлөккә бирелеп ултырырға ваҡыты юҡ.

■ Баланы бәләкәй саҡтан һуттарға, емешеләк коктейлдәренә, смузиға, пакетлы какаоға өйрәтеү дөрөҫ түгел, ти Британия ғалимдары. Бала саҡтан татлы һуттарға өйрәнгән кеше ҙурайғас та планеталағы иң файҙалы эсемлекте - ябай һыуҙы эсмәйәсәк. Был тештәр өсөн дә ҙур зыян килтерә. Стоматолог Кэтрин Харили белдереүенсә, емеш-еләк һуттары һәм коктейлдәре, ғәҙәттә, үтә әскелтем була, уларҙа pH кимәле 2-нән 3-кә тиклем. Ә ауыҙ уртында әселек кимәле 5,5-тән түбәнерәк булған һайын, тештәр "кислота атакаһы"на дусар була. Ата-әсәләр балаларҙың тештәре боҙолмаһын өсөн уларҙы артыҡ шоколад ашауҙан тыя, ә һуттарҙың хәүефе тураһында бер нәмә лә белмәй. Бында телевидениела барған рекламалар ҙа "ғәйепле", сөнки уларҙа һуттар сәләмәтлек өсөн файҙалы эсемлек булараҡ һүрәтләнә. Һуттарҙың составында шәкәр күп, шуға ла күп күләмдә һут эсеү һөҙөмтәһендә һуңғы осорҙа балалар араһында диабет сиренә дусар булыусылар ҙа арта бара.

■ Тормоштағы хәлдәрҙе тик насар яҡтан ғына күргән һәм киләсәктә лә ыңғай ваҡиғалар булырына ышанмаған кешеләрҙе тәбиғәт үҙе шулай итеп яралтҡан, имеш. Америка ғалимдары асыҡлауынса, бындай кешеләрҙең баш мейеһендә невропептид Y (NPY) тип аталған үҙенсәлекле матдә түбән кимәлдә. Мичиган штаты университетының ғилми хеҙмәткәрҙәре тикшеренеү барышында организмға тап ошо матдә молекулаларының етешмәүе һөҙөмтәһендә кеше стресҡа ҡаршы көрәшмәй, тигәнде асыҡлай. NPY кимәле нәҫелдән килеүен иҫәпкә алғанда, "пессимист булып тыумайҙар, пессимисҡа әйләнәләр" тигән билдәле әйтемде "пессимист булып тыуалар" тип үҙгәртеү ҙә дөрөҫ буласаҡ, тип яҙа Лондондың "Дейли телеграф" гәзите.

■ Корнелл университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, балалар төҫлө һауытһабанан яҡшыраҡ ашай. Мәҫәлән, ете төрлө предмет һүрәтләнгән, ете төрлө төҫкә буялған тәрилкәнән бала хатта брокколи йәки балыҡты ла теләп ашаясаҡ. Шуға балағыҙҙың аппетитына йоғонто яһайым тиһәгеҙ, сағыу тәрилкәләр һатып алығыҙ. Әйткәндәй, былтыр Британияның Tesko компанияһы балалар яратмаған төҫлө кәбеҫтәне ысын мәғәнәһендә төҫлө яһап, шәмәхә, һары, йәшел төҫтәргә "буяған". Быныһ өсөн төҫлө кәбеҫтәне башҡа төрлө кәбеҫтәләр, шул иҫәптән брокколи менән һеркәләндергәндәр.

ЭШҠЫУАРЛЫҠ МӘКТӘБЕ

**Эшҡыуарлыҡ тигәндә беҙ, күпселек осраҡта, магазин тотоуҙы, кафе йә ресторан эшен, туризмды, ниндәйҙер хеҙмәт күрһәтеүҙе генә күҙ алдына килтерәбеҙ. Ауыл эшҡыуарын үрҙә һанап үткәндәрҙән тыш тағы ла фермерлыҡ эшендә күрәбеҙ. Ләкин ауыл уңғандары башҡа төрлө өлкәлә лә эшҡыуарлыҡты үҫтереп, ауылдаштарына эш урындары булдырып, ең һыҙғанып йәшәй. Ошондай ир-егеттәрҙең береһе Бишбүләк районы Ҡаныҡай ауылында йәшәүсе Булат НОҒОМАНОВ. Ул үҙенең ауылында баҡса еләге үҫтереүҙе яйға һалған. Бөгөнгө әңгәмәбеҙҙә был эшмәкәрлектең үҙенсәлектәре хаҡында һөйләшәбеҙ.**

# АУЫЛДАРҘА...

## эш бөтә тиме ни!



**➔ Булат, үҙең менән яҡындан танышырып, был өлкәлә нисек эш башлауың тураһында һөйләп үтһәң ине.**

- Мин ошо ауылда тыуып үҫтем. Белемем буйынса химик-технолог. Оҙаҡ йылдар алыҫ Себер тарафтарында технологик ҡоролма операторы булып эшләнем.

Еләк үҫтерергә тотоноуыма 5 йыл. Эшҡыуарлыҡҡа кеше нисек килә? Йә ул ғаиләүә эшен дауам итә, йә ниндәйҙер бығa тиклем буш булған өлкә таба, йәки дәүләт эшендә минут-сәғәтте һанап ултырырға теләмәй. Ә кемдәлер эшҡыуарлыҡҡа минең кеүек осраҡ этәрә. Ҡатыным ауырлы булғанда һабантуйға барҙыҡ. Бәпес көткән ҡатындарҙың аппетиты үҙенсәлекле, ул ҡапыл ғына үҙгәрә һәм нимәләр ашағыһы килә бит инде: көләш тә баҡса еләген тәмләп ҡарау теләген белдерҙе. Ләкин һабантуй яланында һатылған еләктең тәме уға оҡшаманы. Етмәһә, ҡатынымда аллергия барлыҡҡа килде.

Ошо мәлдә миндә: "Ни өсөн беҙ әллә ҡайһы тарафтарҙан алып киленгән, тотош химия менән үҫтерелеү сәбәпле айҙар дауамында боҙолмайынса һаҡланған еләкте ашайбыҙ?" - тигән һорау тыуҙы. Баҡса еләген үҙем үҫтерә башларға хәл итеп, вахта эшенән баш тарттым да, ауылда ҡалып, эшкә тотондом. Тәүҙә еләкте йорт янында бәләкәй генә майҙандарҙа үҫтереп ҡараныҡ. Ҡышын теплицала ла үҫтереп мәшәҡәтләндек, ләкин беҙҙең төбәктәге һауа шарттарында был мөмкин түгеллеген аңланыҡ. Теплицаны ҡыш буйына йылытыуға күп аҡса китте. Бөгөнгө көндә еләкте тик асыҡ һауала, баҫыуҙарҙа үҫтерәбеҙ, йәйгеһен генә уңыш йыябыҙ.

**➔ Ошо ваҡыт эсендә еләкле майҙаныгыҙ ни тиклем ҙурайҙы?**

- Хәҙер беҙҙең хужалыҡ 3 гектар майҙанды биләй. Унда иртә сортлы баҡса еләген үҫтерәбеҙ. Уңышты июндә йыябыҙ. Тәүҙә көҙгө һалҡындар төшкәнсе уңыш бирғән ремонтант сортлы баҡса еләген үҫтерҙек. Ләкин был сорт баҡса еләге түтәлдә ике йыл һайын алмаштырып тороуҙы талап итә, был иһә сығымлы һәм мәшәҡәтле. Ремонтат сортлы еләктәрҙең составында шәкәр әҙ, әлбиттә, ләкин ул ашауға ҡатыраҡ. Хәҙер беҙҙә үҫкән ябай еләк сортынан уңышты тик йәй генә йыябыҙ, ләкин уны бер ултыртһаң, 5-6 йыл уңыш бирә. Шулай уҡ ул беҙҙең климатҡа ла һәйбәт яраҡлашҡан сорт. Ябай сортҡа күсеүебеҙҙең тағы бер сәбәбе - уның тәмлелеге, һутлылығы. Ябай сорт баҡса еләген үҫтереү иҡтисади яҡтан күпкә өҫтөнөрәк.

**➔ Баҫыуҙа эш нисек ойошторолған?**

- Баҫыуҙағы төп эшебеҙ - утау, яҙынкөҙөн еләккә зарар килтереүсе бөжәктәрҙән, сәскә атҡанға тиклем грипп ауырыуҙарынан эшкәртеү. Бөтә был эшкәртеү кеше һаулығы өсөн зарарһыҙ.

Еләк баҫыуҙары тамсылап һыу ҡойоу ҡоролмалары менән һуғарыла. Бындай ысул еләктең тамырына һыу ебәреп, уларҙың дымлы булыуын тәьмин итә. Шуға күрә былтырғы ҡоролоҡ беҙҙең еләктәрҙең тамырына артыҡ тәьҫир итмәне, ә бына ҡоро һауа торошо, ямғырҙарҙың әҙ булыуы еләктең япраҡ һәм емештәренә зарар килтерҙе. Былтыр беҙҙә йәй һауа температураһы +40 градустан кәм булманы, бер генә тапҡыр ямғыр яуҙы, уныһы ла һибәләп кенә үтте. Шуға күрә былтыр уңышты әҙ йыйҙыҡ.

Шулай уҡ былтырғы йәйҙең эҫе булыуы бал ҡорттарының әҙ осоуына сәбәпсе булып, күпселек еләктең һеркәләнмәйенсә ҡалыуына килтерҙе.

Күпселек ваҡыт баҫыуҙы ғаиләм, атай-әсәйем, туғандарым ярҙамында эшкәртәм. Уларҙың ярҙамы ифрат ҙур, рәхмәт уларға. Шулай уҡ эш күп ваҡытта тирә-яҡ ауылдарға иғлан биреп, эшселәр яллайбыҙ. Эш хаҡы - кемдең күпме эшләүенә ҡарап билдәләнә.

**➔ Еләккә хаҡты нисек билдәләйһегеҙ?**

- Бында төрлө факторҙар үҙ ролен уйнай. Төбәктә был эш менән шөғөлләнеүселәрҙең булыу-булмауы, баҙарҙа алыҫтан алып килентән еләктең күләме, йәйҙең нисек килеүе һәм башҡаларҙан сығып хаҡ билдәләнә. Былтыр, мәҫәлән, уңыштың әҙ булыуы төбәктә еләктең хаҡын арттырыуға килтерҙе.

Йәй башында баҡса еләгенә һорау ҙур була. Шуға күрә уңышты һатыуҙа ауырлыҡтар тыумай - йыйып торабыҙ, шунда уҡ һатып алып бөтәләр, күмәртәләп заказ биреүселәргә хатта ҡалмай ҙа. Июнь башында, еләк өлгөрә генә башлағанда килограмын 400-500 һумға тәҡдим итәбеҙ, миҙгел ваҡытында аҙыраҡ төшөрәбеҙ, ай аҙағында хаҡ тағы ла күтәрелә. Шулай ҙа беҙҙең хаҡтар осһоҙ. Әгәр ҙә еләк күп булған осорҙа баҙарҙа башҡалар килограмын 300 һум менән һатһа, беҙ 20 - 30 һумға арзаныраҡ ҡуябыҙ.

Һатыуҙы төрлө ысул менән атҡарабыҙ. Мәҫәлән, яҡын-тирәләге район үҙәктәрендә эшләүсе баҙарға сығарабыҙ. Унда тәғәйен кеше менән килешәбеҙ ҙә, ул һатып бирә, ә беҙ уға аҡсаһын түләйбеҙ. Шулай уҡ алдан заказ биреүселәргә йыйып алып барып бирәбеҙ. Баҫыуға килеп һатып алыусылар ҙа етерлек. Уларға йә үҙебеҙ йыйып бирәбеҙ, йә үҙҙәре йыйып ала. Беҙ йыйып бирһәк, килограмм хаҡы юғарыраҡ, әлбиттә, кеше үҙе йыйһа, 5 литрлыҡ биҙрә 100 һум тирәһе була.

**➔ Баҡса еләген үҫтереү эшенә тотонорға теләгәндәргә ниндәй кәңәш бирер инең?**

- Үҙемдең тәжрибәнән сығып һүҙ йөрөткәндә, шуны әйтер инем. Уңыш алыу өсөн еләк үҫентеләре сифатлы булырға тейеш. Һәм баҫыуҙы һуғарыу системаһының эше лә ҙур әһәмиәткә эйә.

Мәҫәлән, беҙҙең баҫыуға сығарылған сорттарҙың һәр береһе ишек алдындағы баҡсала һынау үткән - төрлө сорттарҙы бәләкәй күләмдәрҙә алып, уларҙы баҡсала үҫтереп ҡарап, шунан ғына баҫыуға сығарҙыҡ, йәғни төбәк климатына яраҡлаштырҙыҡ. Һынау осоронда теге йәки был сорттың беҙҙең климатта нисек яраҡлашыуын, ниндәй эшкәртеүҙе күтәреүен, еләктең ҙурлығы күпме булыуын, уның тәмен, һутлылығын тикшерҙек. Тикшереүҙәр ысулы менән беҙҙең төбәк климатына яраҡлаша алған, һыуыҡҡа бирешмәйенсә яҡшы ҡышлаған сорттарҙы алып ҡалдыҡ. Һәм әлеге мәлдә баҫыуҙа үҫкән баҡса еләге сорттарын ҡышын ҡапламайбыҙ, улар асыҡ һауала ҡыш сыға.

Ҡышҡы миҙгелгә ниндәйҙер ҙур әҙерлек үткәрмәйбеҙ. Башлыса, көҙгөһөн баҫыуҙы яҡшы итеп һыуға туйындырабыҙ, ер дымлы булырға тейеш.

Шулай уҡ еләктән тыш, үҫентеләр һатырға була. Беҙ уларҙы һатып алыусыларға ябай һәм кассеталы үҫентеләр рәүешендә тәҡдим итәбеҙ. Ябай ысуллы итеп һатыу ерҙән ҡаҙып алынған үҫентене һатыу. Кассеталы рәүештә һатыуҙың эше күберәк. Был ысул һәр үҫентенең мыйыҡсаһын торф һалынған айырым һауытҡа ултыртып һатыуға ҡайтып ҡала. Үҫентеләр фоггер ҡулайламаһы аҫтында тамырлана. Фоггер - һыуҙы парға әйләндереүсе ҡоролма. Кассеталы ысул менән тамырланған үҫентеләр яңы ерҙә тиҙерәк береғә, үҫә һәм уңышты ла иртәрәк бирә. Үҫентеләрҙе почта менән республика буйлап ҡына түгел, ә бөтә Рәсәй буйлап ебәрәбеҙ.

Ҙур теләк - эштең ярты уңышы. Шулай булғас, кемдеңдер был эшмәкәрлекте башларға теләге бар икән, тик уңыштар ғына теләйем. Үҙенә ышанғанда, ғаиләң яғынан аңлау булғанда, бөтә эште лә атҡарып сығырға мөмкин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауылдар бөтә, имеш, тип ауыҙ тултырып һөйләргә яратабыҙ. Ләкин Булат Ноғоманов кеүек тырыш, рухлы, үҙ маҡсатына ынтылыусан, эштән ҡурҡмаған, ауыл тормошон үҙ итеп йәшәгән ир-егеттәр барында, ауыл йәшәйәсәк һәм үҫәсәк. Бөтә республика буйлап төрлө өлкәлә үҙ урынын табып, эшҡыуарлыҡ алып барғандар күп. Яҡын киләсәктә уларҙың һаны тағы ла артыр, тип өмөт итәйек. Ауылдың киләсәге уңғандар ҡулында.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

*ИЗГЕ РАМАҘАН АЙЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!*

# НӘФСЕҢДЕ ЙҮГӘНЛӘРГӘ ӨЙРӘН!



## Рамаҙан айы - ураҙа айылыр

Ураҙа - Ислам диненең биш бағанаһының береһе. Ураҙа тәнебеҙгә һаулыҡ, күңелебеҙгә тыныслыҡ, рухыбыҙға иҫәнлек килтерә. Динебеҙҙә ураҙа ҙур урынды алып тора. Аллаһы Тәғәлә уны тоторға бойорған үә: "Ураҙа минең өсөн, сауабын да Үҙем бирермен", - тип әйткән. Ни өсөн башҡа ғәмәлдәр улай уҡ сауаплы түгел? Шикһеҙ сәбәптәрҙең береһе - нәфсене тыйыу. Ураҙалы кеше үҙенең нәфсеһен, шәһүәтен тыйырға өйрәнә. Ә был - ҙур ҡаҙаныш. Был ҡаҙаныштың баһаһын кеше аңлап та бөтөрмәй. Әгәр кеше нәфсеһен йүгәнләй алмаһа, тормошта бер нәмәгә лә өлгәшә алмай. Миҫал өсөн: күп ашаһа, артыҡ һимерәсәк үә ауырыясаҡ, һәр теләгән кешеһе менән яҡынлыҡ ҡылып йөрөһә - зинасы буласаҡ һ.б. Нәфсеңде йүгәнләнәң - уңышта, тота алмаһаң - хәсрәттә булаһың. Был Аллаһының ҡануны, уны береһе лә ҡурап үтә алмаҫ. Шулай булғас, ураҙа уңышҡа илтә.

> *Сәхәр ашағандан һуң, ураҙаға ниәтләү доғаһы:*
> *Бисмилләһир-рахмәәнир-рахим. Нәүәйтү ән әсуумә саумә шәһри рамәдаанә минәл-фәджри иләл-мәғриби хаалисан лилләәһи тәғәәлә.*
> ***Мәғәнәһе:*** *"Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн, таң ваҡытынан башлап ҡояш батҡансы, ихласлыҡ менән Рамаҙан ураҙаһын торорға ниәт ҡылдым".*

Ураҙа - Аллаһыға табыныу маҡсаты менән ашауэсеүҙән һәм башҡа төрлө эштәрҙән билдәле бер ваҡытҡа тыйылып тороу. Ул Ислам диненең биш шартының дүртенсеһе булып тора. Рамаҙан айында һәр көн ураҙа тотоу фарыҙ, был таң атҡандан алып ҡояш батҡансыға ҡәҙәр ашау-эсеүҙән тыйылып тороу тигәнде аңлата. Шулай итеп, кеше аслыҡ, һыуһауҙың нимә икәнен аңлай башлай. Туҡ кеше ас кешенең хәлен бер ҡасан да аңлай, уға ҡарата мәрхәмәтле була алмаҫ. Ураҙа туҡ кешеләргә аслыҡтан интеккәндәрҙең ниҙәр кисергәндәрен төшөнөргә ярҙам итә, шуның менән бер рәттән, кеше үҙ нәфсеһенә хужа булырға өйрәнә.

## Рамаҙан айы - бер-береңә ярҙамлашыу айылыр

Был айҙа эшләнгән изгелектәребеҙ өсөн башҡа айҙарға ҡарағанда күберәк сауап бирелер. Был айҙа зәкәттәр түләү хәйерле, ай аҙағында айырым фитыр саҙаҡаһы бирелә. Меҫкендәргә һәм фәҡирҙәргә ошо айҙа саҙаҡа өләшеү - бик сауаплы эш, ярҙамлашыу арҡаһында кешеләр араһында бер-береһенә ҡарата ихтирам хистәре лә артып китер.

Әҙәм балаһы үҙ тормошон алып бара алһын өсөн уға, әлбиттә, кейем-һалым, ризыҡ кәрәк, уларҙы алыр өсөн аҡса кәрәк. Эшһеҙ, аҡсаға мохтаж кешеләр социологик һәм психологик яҡтан ауырлыҡтар кисерә. Ундай кешеләр үҙенең эске донъяһы менән килешә алмаған кеүек, әйләнә-тирәһендәге кешеләр менән дә килешә алмай. Икенсе яҡтан, бындай кешене йәмғиәт хөрмәт итмәһә, уның күңелендә төрлө ҡапма-ҡаршылыҡтар тыуырға мөмкин. Ураҙа тотҡан кешеләр, ураҙа еткәс, үҙҙәренә күп төрлө ризыҡтар һатып ала, был айҙа Аллаһы Тәғәлә ураҙа тотҡандарҙың табындарына күп бәрәкәттәр бирә. Өҫтәлдәребеҙ ризыҡтан һығылып торған саҡта ашарға ризыҡы булмаған ҡәрҙәштәребеҙҙе лә онотмаһаҡ ине. Ислам динебеҙҙең төп принцибы Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙисендә сағыла: "Көрҙәше ас булып, үҙе туҡ килеш ятҡан бәндә беҙҙән түгел". Рамаҙан айында күрһәтелгән матди ярҙамдар барса күңелдәрҙең тыныслыҡ һәм бәхет хисе менән тулыуына сәбәптер.

## Рамаҙан - гонаһтан йыраҡлашыу айы

Был айҙа сауап ике өләшкә күберәк яҙыла. Йыл буйы изге ғәмәл ҡылыу күркәм, был айҙа изгелек эшләү тағы ла күркәмерәк. Гонаһ эшләү ни ҡәҙәр әшәке булһа, был айҙа гонаһ ҡылыу тағы ла әшәкерәк ғәмәл булып һанала. Шуға ла харамдарҙан, айырыуса бөйөк гонаһтан йыраҡ булайыҡ. Аҡылыбыҙҙы юйҙырыусы, беҙҙе һәләкәткә илтеүсе хәмерҙән, тормошобоҙҙо ҡайғы менән тултырыусы, ғаилә ояһын емереүсе зинанан, үлемгә сәбәп булыусы талашыуҙарҙан йыраҡ булайыҡ. Тормошобоҙҙо тәртипкә һалайыҡ. Сәхәргә ҡәҙәр булған ваҡытты телевизор йәки интернетҡа бағышлап, ғүмеребеҙҙе бушҡа үткәрмәйек. Бөйөк Аллаһы Тәғәлә Китабында әйтелә: "Хәмер эсеүегеҙ һәм отош уйындары уйнауығыҙ менән, әлбиттә, шайтан арағыҙҙа дошманлыҡты һәм бер-берегеҙгә һөжүм иттерә торған асыуҙы булдырырға теләй үә Ҡөрьән вәғәзенән, намаҙ уҡыуҙан һеҙҙе тыйырға теләй, шулай булғас, ул шайтан эше булған нәжестәрҙән тыйылаһығыҙмы? Әллә тыйылмайһығыҙмы? Әлбиттә, тыйылығыҙ!" (Мәидә 91).

> *Ураҙа тотоп, ауыҙ асҡас уҡыла торған доға:*
> *Бисмилләһир-рахмәәнир-рахим. Аллааһүммә ләкә сумту үә бикә әәмәнту үә ғәләйкә тәүәккәлту үә ғәләә ризҡыкә әфтарту фәғфирлии йәә ғаффәәру мә ҡаддәмту үә мәә әххарту.*
> ***Мәғәнәһе:*** *"Йә, Аллаһ, ошо ураҙамды мин Һинең өсөн генә тоттом үә мин һиңә генә иман килтерҙем, үә һиңә тәүәккәл ҡылдым, үә Һинең ризығың менән ауыҙымды асам. Әй, гонаһтарҙы ғәфү итеүсе Аллаһ, инде минең элекке гонаһтарымды ла, хәҙерге гонаһтарымды ла ярлыҡа".*

Рамаҙан айы тәмәке һымаҡ зыянлы нәмәне ташлауға ла бер форсат булып тора. Был айҙа ураҙа тотҡан кеше иртәнән алып кискә хәтле тәмәке тартмайынса түҙә ала икән, кис еткәс тә тәмәкене ауыҙына ҡапмайынса түҙеп, ай буйына уны ҡулланыуҙан баш тартһа, Рамаҙан айының аҙағына иһә, ин шәә Аллаһ, был хәтәр ҡылыҡтан бөтөнләй ҡотола алыр.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ислам динендә ауырлыҡ юҡ, ул еңеллек дине. Сәләмәтлекте бөтөрөп, сирләп ғибәҙәт ҡылыу зарури түгел, ул беҙҙән һоралмай. Аллаһы Тәғәлә бик йомарт, рәхимле һәм мәрхәмәтле. Тәүбә ҡылыусыларҙы ғәфү итеүсе һәм рәхимле. Шуның өсөн, халыҡҡа, йәмғиәткә, динебеҙгә файҙалы булырға кәрәк. Эгоист булыу, үҙем генә тип йәшәү - динебеҙҙән түгел. Рамаҙанда ла динебеҙ өсөн файҙалы ғәмәлдәр ҡылырға онотмайыҡ. Рамаҙанда ғына түгел, һәр ваҡыт йәмғиәткә файҙалы булыу лазым - был динебеҙҙең төп принциптарының береһе.**

**Илшат ХАФИЗОВ,**
**Ишембай районы имам-мөхтәсибе.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Өндәге төш - сикһеҙ байлыҡҡа юл

Монгол шаманы Хуктуту тарафынан әйтелгән.

Төньяҡ Азия монголдары, бигерәк тә уларҙың ҡанбаба-шамандары, серле көстәре менән билдәле. Шамандар әруахтарҙы саҡырып, уларҙы үҙҙәренең ихтыярына буйһондора ала, тип уйлағандар. Бынан тыш, улар медиумдар һәләтенә эйә булған һәм визуаллəштереү аша ижад иткән.

Сыңғыҙхан ҡулы аҫтында 12-се быуатта берләшкән, һуңынан Батый етәкселеге аҫтындағы төрки ҡүсмә халҡы менән ҡатнашҡан монголдарҙың сикһеҙ киңлектәрҙе буйһондора алыуы, көньяҡҡа Ҡытайҙың үҙенә тиклем үк, көньяҡ-көнбайышҡа Төркостанға, Иран һәм Ираҡҡа, шулай уҡ төньяҡ-көнбайышҡа, Русь территорияһына үтеп инеүҙәре аптырата.

Уларҙы Алтын Урҙа тип атағандар. Яулап алыуҙар сикһеҙ байлыҡ килтерһә лә, Урҙа ҡалалары Азияға үткән төп сауҙа юлдарының сәскә атыусы, космосәйәси үҙәктәре булып торған. Улар төҙөгән мәҙәниәт һиҙелерлек кимәлдә тормош кимәле стандарттарын яҡшыртҡан. Улар император һарайының йөгөнтөлөгөнә хайран ҡалған Марк Поло заманында Ҡытайҙа власта булған. Әммә байлыҡҡа бәйлелек уяулыҡтарын, үҙ-үҙҙәрен яҡлау кәрәклеген онотороға мәжбүр иткән. Урҙа ҡыйратылған.

Был главалағы сығанаҡ башҡаларына ҡарағанда заманса рәк. Ул - монгол шаманы Дилава Хуктуту, Эске һәм Тышҡы Монголияның уҙған быуат уртаһында коммунистар ҡулға алған һуңғы тере Будданы.

Монах булараҡ, ул тормош рәхәтлегенә ынтылыуҙан баш тартҡан, шуға ҡарамаҫтан, байлыҡ уны эҙәрлекләгән. Ул бер ваҡытта ла бер нәмә лә теләмәгән, әммә уның ихтыяжы һәр саҡ ҡәнәғәтләндерелгән. Уның эргәһендә уҡыусыларын мөхәббәт һәм шәфҡәтлелек тойғоһо биләп алған. Илде коммунистар баҫып алғас, ул АҠШ-та һыйыныу тапҡан һәм һуңғы һулышын алған уҙған быуаттың 60-сы йылдарына тиклем шунда ҡалған.

Һеҙ Алтын Урҙа кимәлендә уңыш ҡаҙанырға теләйһегеҙме? Был глава һеҙгә юл күрһәтер. Әммә бының өсөн үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙ һәм Илаһ менән бәйләнешегеҙҙе быға тиклем яҙылған күнекмәләр аша нығытырға кәрәк. Бынан һуң да, ҡулаҡсағыҙ күп булһын өсөн, көс түгергә тура киләсәк.

Илаһтың үткәреүсеһе булырға ҡамасаулаған ҡаршылыҡтар кеүек үк, һеҙгә аҡса ағымын ебәрмәй тотоп тороусы кәртәләр ҙә бар. Уларҙы тәҡдим ителгән күрһәтмәләр ярҙамында юлығыҙҙан алып ташлағыҙ һәм ысын аҡса буранын күтәрегеҙ!

### Ҡиммәт баһаланған кире программаланыу

Ярлылыҡ - аҡыл торошо. Тап шуның арҡаһында байҙар тағы ла байый, ярлылар ярлылана. Ярлылыҡтан баш тартыуҙың күп ысулдары бар. Тәү сиратта, һеҙҙе бала саҡта уҡ программалаған инаныуҙарҙан арыныу кәрәк.

Мәҫәлән, ата-әсәйегеҙ ярлы булған һәм улар һеҙгә даими рәүештә шундай яҙмышты урап үтеп булмауға ышандырған. Бер психолог тикшеренеүгә ярашлы, баланың аңына һеңгән бер кире раҫлауҙы тәҙәтеү өсөн туғыҙ ыңғай раҫлау кәрәк.

Әгәр үҙбаһағыҙ түбән икән, ата-әсәгеҙҙең байлыға ҡарамаҫтан, һеҙ үҙегеҙҙең мейе компьютерығыҙҙы күп аҡса эшләй алмауығыҙға, тимәк, бай була алмауға программалаясаҡһығыҙ. Әгәр һеҙ ярлылыҡта интекмәһәгеҙ, әммә уларҙы күреп йөрөп, бер ваҡытта ла матди хәлдәрен яҡшырта алмауҙарына инанһағыҙ, үҙегеҙҙе ярлылар һәр ваҡыт ярлы булып ҡала, тип программалайһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 4 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 4.00 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**23.30 Х/ф "Сын". [16+]**
**2.30 "Между небом и землей". [12+]**

## 5 АПРЕЛЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "У дачи". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30, 22.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Я буду рядом". [16+]**
**3.00 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**

## 6 АПРЕЛЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "У дачи". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Достали". [16+]**
**3.00 Спектакль "Муж и жена - одна сатана". [12+]**
**4.45 Үткән гүмер. [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 7 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай бакса". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "В России идет снег". [16+]**
**3.00 Спектакль "Таштугай". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 8 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Нечаянная радость". [12+]
3.20 Х/ф "Любовь по расписанию". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/с "Год на орбите". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 3.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**14.00 "Хазина". [0+]**
**14.30 "Бай бакса". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 4.45 Тормош. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45, 6.15 История одного села. [12+]**
**22.00 "Дорогу осилит идущий". [12+]**
**23.30 Х/ф "Ангел". [12+]**
**1.45 Спектакль "Таганок". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 9 АПРЕЛЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Невеста комдива". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Мальчик мой". [12+]
1.10 Х/ф "Печали-радости Надежды". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Автограф". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 4.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Кош юлы". [12+]**
**19.00, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.15 Интервью. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Пленный". [16+]**
**2.15 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 10 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.10, 3.00 Х/ф "Нарочно не придумаешь". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Невеста комдива". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Прячься". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Золотое дно". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "В полете стрелы-сияние судьбы!" [12+]**
**17.30 "Вдохновение". Концерт Рафиса Сирусина. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Д/ф "Никогда больше". [12+]**
**0.00 Х/ф "Зеленый фургон". [12+]**
**2.30 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 апрель ""Февраль. Буран..."** (З. Бураҡаева). 12+
**7 апрель "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 12+
**8 апрель Премьера! "Рөстәмдең сере"** (С. Баженова, Ғ. Ҡотой әҫәре буйынса). 12.00 6+
**"Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+
**9 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**10 апрель "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов инсц.), провинциаль проза. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 апрель Премьера! "Мөхәббәт тураһында легенда"** (Н. Хикмәт). 12+
**8 апрель "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+
**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+
**10 апрель "Арба"** (Зөһрә һәм Таңсулпан Бураҡаевалар), әкиәт. 12.00 6+
**"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия. 18.00 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 апрель "A.S.P. Перезагрузка"** концерт-диспут, Пушкинға ике төрлө ҡараш. 6+
**7 апрель Рөстәм Шаһыбаловтың** концерты. 6+
**9 апрель "В ожидании чуда. Струнный квартет".** 13.00 0+
**10 апрель "Ҡурай уйнай, күңел йырлай"** концерт. 15.00 6+
**"Soundtrack и не только"** концерт. 18.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Өфө балалар филармонияһы сәхнәһендә:**
**9 апрель "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+
**10 апрель "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5 апрель Премьера! "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин), драма. 13.00, 15.00 16+
**9 апрель "Море. Остров. Клад"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар тарихы. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 апрель Премьера! "Онотолған әҙәм"** (Н. Хикмәт), драма. 12+
**8 апрель "Хушығыҙ, хыялдарым!"** (Ә. Атнабаев), драма. 12+
**9 апрель "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+
**10 апрель Премьера! "Аленушкины сказки"** (Л. Зарипов), урыҫ халыҡ инструменттары оркестры. 12.00 0+
**"Атты ектем! Айға осам..."** (В. Шукшин), ауыл комедияһы. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**5-6 апрель "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), әкиәт. 10.00, 12.00 0+
**9 апрель "Про Ерему, Данилу и нечистую силу"** (И. Петрова, Л. Лядова), әкиәт. 12.00 0+

***

**Сибай ҡалаһының "Сулпан" балалар театры 4-6 апрелдә Свердловск өлкәһе буйлап гастролдәргә сыға.** Тамашалар Красноуфимск ҡалаһында, Әртә ҡала тибындағы ҡасабала һәм Араҡай ауылында була. Рәсәй мәҙәниәт министрлығының гастроль-концерт планы буйынса уҙғарылған "Ҙур гастролдәр" театр өсөн тәүге сәфәр түгел. Быйыл улар балалар өсөн "А зори здесь тихие...", "Каштанка", "Спасите Мигай Светофорыча" спектаклдәрен күрһәтәсәк.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| (Апрель - Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (3) дүшәмбе | 4:43 | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 17:49 | 19:56 | 21:26 |
| 5 (4) шишәмбе | 4:40 | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 17:51 | 19:58 | 21:28 |
| 6 (5) шаршамбы | 4:38 | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 17:52 | 20:00 | 21:30 |
| 7 (6) кесе йома | 4:35 | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 17:53 | 20:02 | 21:32 |
| 8 (7) йома | 4:33 | 5:03 | 6:33 | 13:30 | 17:55 | 20:03 | 21:33 |
| 9 (8) шәмбе | 4:30 | 5:00 | 6:30 | 13:30 | 17:56 | 20:05 | 21:35 |
| 10 (9) йәкшәмбе | 4:28 | 4:58 | 6:28 | 13:30 | 17:57 | 20:07 | 21:37 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ "Һин властарҙың теге йәки был ҡарары менән риза булмаҫҡа мөмкинһең, уны тәнҡитләү ҙә нормаль күренеш. Ул - демократияның бер өлөшө. Әммә ошондай ауыр ваҡытта дәүләткә ҡаршы барыу ярамай, сөнки был - һатлыҡлыҡ".



ИҪКӘРТӘБЕҘ!

**Бынан бер ай элек Украинала башланған махсус операцияны Рәсәй халҡының күпселеге хуплаһа ла, ҡайһы берәүҙәр ошо уңай менән хатта ысынбарлыҡты кире ҡағып булһа ла күренеп ҡалырға тырыша. Берәүҙәр пикетҡа сыға, икенселәр социаль селтәрҙәрҙәге күп һанлы фейктар буйынса фекер алышында "алыша". Күрәһең, барыһы ла бындай әүҙемлектең закон менән етди проблемалар тыуҙырыу ихтималлығын белмәй. Эш дәүләттең "ҡанһыҙлығында" түгел: ошо еңел булмаған заманда уның туранан-тура бурысы - Ватан мәнфәғәтен яҡлаған һалдат һәм офицерҙарға ышанаслы тыл булдырыу. Экспертар "Башинформ"ға ниндәй ғәмәлдәрҙең ҡануниәтте боҙоу тип ҡаралыуы, провокацияларға бирелмәҫ һәм закон менән низағҡа инмәҫ өсөн үҙеңде нисек тоторға кәрәклеге хаҡында аңлата.**

# ЯЛҒАНДАН ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!




## Дәүләткә ҡаршы барыу - һатлыҡлыҡ

Рәсәй парламенты ҡануниәткә Рәсәй армияһының хәрәкәте тураһында фейктар таратыусылар һәм Рәсәйгә ҡаршы санкциялар индерергә асыҡтан-асыҡ саҡырыуҙар өсөн хоҡуҡи яуаплылыҡты көсәйтеүсе үҙгәрештәр индерҙе. Барлыҡ фракциялар ҙа, идеология буйынса фекер айырмалыҡтарына ҡарамаҫтан, закон проектын бер тауыштан хупланы. Хәҙер РФ Ҡораллы Көстәре тураһында ялған хәбәр таратыусыларға 700 мең һумдан 1,5 миллион һумға тиклем штраф һалыу йәки 3 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү ҡарала. Вазифа менән файҙаланып, күрә алмаусылыҡ йәки дошманлыҡ тыуҙырыусылар 10 йылға азатлығын юғалтырға мөмкин. Был ғәмәлдәр ауыр эҙемтәләргә килтергәндә, 10-15 йылға тимер рәшәткә артындағы тормош көтә.

Дәүләт Думаһы шулай уҡ Ҡораллы Көстәрҙе дискредитациялаған өсөн дә административ яуаплылыҡ индерҙе. Шулай уҡ уларҙы файҙаланыуға ҡаршы тороу саҡырыуҙары (әгәр улар енәйәт эшмәкәрлеге булмаһа) өсөн граждандарға 30-50 мең һум, вазифалы кешеләргә - 100-200 мең һум, ойошма-предприятиеларға 300-500 мең һум штраф менән янай. Был ғәмәлдәргә граждандарҙың ғүмеренә һәм сәләмәтлегенә, йәмәғәт именлегенә зыян килтереү хәүефе менән янаған рөхсәтһеҙ акциялар үткәреүгә саҡырыу өҫтәлһә, штраф күләме 50-100 мең (граждандар өсөн), 200-300 мең (вазифалы кешеләр өсөн), 500-1 миллион һум (ойошма-предприятиелар өсөн).

Рәсәй юристарының Башҡортостан бүлексәһе рәйесе, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Ирина Панькина фекеренсә, закон Рәсәйгә ҡаршы ойошторолған киң күләмле мәғлүмәт һөжүмсына яуап булды. Ул килтергән мәғлүмәттәргә ярашлы, был кампанияны ойоштороуға көнбайыш "заказсылары" бер нисә йөҙ миллион доллар тотонған, фейктар таратыуҙа 5 меңдән ашыу IT-белгес эшләй, яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса интернетта 3 миллиондан ашыу фейк иҫәпләнә. "Илебеҙ Ҡораллы Көстәр тураһында ғына түгел, башҡа органдар: илселектәр, Росгвардия, МЧС, прокуратура тураһында ла ялған мәғлүмәт таралыу менән осрашты. Һуңғы аҙна ваҡиғалары был хәл-торошто тағы ла ҡиҫкенләштерҙе һәм беҙ ялған мәғлүмәттең йәмғиәттә ығы-зығы тыуҙырыу һәм илебеҙҙе дискредитациялауға йүнәлтелгәнен аңлайбыҙ. Бындай ғәмәлдәргә юл ҡуйырға ярамай", - тине Ирина Панькина.

БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев, Украинаны ҡоралһыҙландырыу һәм милләтселәрҙән азат итеү буйынса хәрби операция башланыу менән Рәсәйгә яңы көс менән фейктар тулҡыны ябырылыуын, көнбайыш киң мәғлүмәт саралырының ысынбарлыҡты баштүбән әйләндереүен билдәләне. "Нацистарҙың хәрби енәйәте аңлы рәүештә йәшерелә йәки беҙҙең ҡоралы көстәргә япһарыла, илебеҙгә һәм граждандарыбыҙға ҡарата нәфрәт тыуҙырыла. Рәсәй улар алдында бар бәләләр өсөн яуаплы һәм һәр саҡ ғәйепле булып ҡала. Шул уҡ материалдарҙы улар дәлил булараҡ Рәсәй территорияһында ла таратырға тырыша. Фейктар тураһындағы закон беҙҙең мәғлүмәт ҡырын ялғандан һәм көнбайыш идеологияһы пропагандаһынан һаҡлай. Шул уҡ ваҡытта ул үҙ эшен намыҫлы башҡарған, ышанаслы һәм дөрөҫ сығанаҡтарға таянып дөрөҫ мәғлүмәт таратҡан профессиональ журналистар эшендә проблема тыуҙырмай. Берәү ҙә власты тәнҡитләүҙе, рәсми фекерҙән айырылған фекер белдереүҙе тыймай", - тип иҫәпләй Толкачев.

Ғәҙел тәнҡитте оятһыҙ ялғандан айырыу зарурлығын РФ Именлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев та белдерҙе: "Һин властарҙың теге йәки был ҡарары менән риза булмаҫҡа мөмкинһең, уны тәнҡитләү ҙә нормаль күренеш. Ул - демократияның бер өлөшө. Әммә ошондай ауыр ваҡытта дәүләткә ҡаршы барыу ярамай, сөнки был - һатлыҡлыҡ".

## Кемгә яуаплылыҡ янай?

Күп һанлы киҫәтеүҙәр Мәскәү ГУВД-һының экс-техниғы Сергей Клоковты туҡтатмай, ул РФ Ҡоралы Көстәрен ҡулланыу тураһында ялған мәғлүмәт таратҡан өсөн енәйәт эше ҡуҙғатылған беренсе кеше була. 22 мартта суд уны 2 айға ҡулға ала.

Башҡортостанда закон боҙоусыларға бары тик административ саралар ғына күрелгән. Мәҫәлән, 24 февралдән 14 мартҡа тиклем төрлө саралар үткәргәндәге тәртипһеҙлектәре өсөн 56 кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған, 119 граждан иҫкәртелгән.

Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының Йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙы ойоштороу идаралығының административ ҡануниәтте ҡулланыу бүлексәһе хеҙмәткәре Айҙар Хаматов аңлатыуынса, административ яуаплылыҡҡа халыҡ алдындағы ғәмәлдәр (митингылар, конференциялар, фильмдар күрһәтеү, урамда листовкалар таратыу, интернетта мәғлүмәт урынлаштырыу); РФ Ҡоралы Көстәрен ҡулланыу буйынса дәүләт власы органдарының ҡарарына ышанысты дискредитациялау; законға ҡаршы килгән ғәмәлдәр эшләргә саҡырыу (телдән, яҙма, интернет аша, киң мәғлүмәт саралары аша) инә.

## Нисек һаҡланырға?

Адвокат Роман Петров фекеренсә, законға ҡаршы килгән йәки ялған мәғлүмәтте баҫтырыу ғына түгел, уны мессенджерҙар аша таратыу ҙа хоҡуҡ боҙоу була ала һәм административ яуаплылыҡ тип һанала. Әгәр был ғәмәл зыянлы эҙемтәгә килтерһә, ул саҡта инде енәйәти яуаплылыҡ көтә. Мәҫәлән, халыҡ митингыға йыйылып, транспорт хәрәкәтен туҡтатһа, был зыян килтереү тип баһалана.

Роман Петров закон яңы ғына ҡабул ителгәнлектән, уны ҡулланыу тәжрибәһе саҡ булдырылыуын, шуға күрә бик һаҡ булырға кәрәклеген иҫкәртә. Сөнки хоҡуҡ һаҡлау органдары вәкилдәренең һеҙгә һорауҙары барлыҡҡа килһен өсөн рөхсәт ителмәгән митингыға эләгеүегеҙ ҙә етә, ә инде митинг киң күләмле булһа, эҙемтәләре лә етдирәк буласаҡ. Был ялған мәғлүмәт таратыуға ла ҡағыла.

**Роман ЯКИМЧУК әҙерләне.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

ART ҠОРОЛТАЙ
ПЕРВЫЙ КУЛЬТУРНЫЙ ФОРУМ

# МӘҘӘНИӘТТӘ... үҙ юлыбыҙҙы ярыу мөһим

**Республикала һуңғы йылдарҙа һәр һөнәр кешеләренең эшлекле осрашыуҙарын ҙур йыйын-форум рәүешендә үткәреү күренеше йышайҙы. Был тармаҡтың мөһим мәсьәләләрен күтәрергә, фекер алышырға, федераль кимәлдәге белгестәр менән урындағы хеҙмәткәрҙәрҙе осраштырып, тәжрибә уртаҡлашырға, киләсәккә пландар ҡорорға, үсеш юҫыҡтарын билдәләргә булышлыҡ итеү маҡсатында бик ҡулай. Ошо йәһәттән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең былтырҙан башлап ойошторолған ART-Ҡоролтай форумы ла бик эшлекле һәм һөҙөмтәле сараларҙың береһе булды.**

Быйылғы мәҙәни форум ARTылыш-fest театрҙар фестиваленән старт алды. Бер аҙна дауамында баш ҡала тамашасылары республикабыҙ театрҙарының федераль проекттар сиктәрендә сәхнәләштерелгән спектаклдәрен ҡараны. Шуны билдәләп үтер кәрәк: төрлө жанрҙағы, төрлө йәштәге тамашасылар өсөн тәғәйенләнгән спектаклдәр күрһәтелеүе һөйөндөрҙө. Мәҫәлән, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры һәм Сибай концерт-театр берекмәһенең "Сулпан" балалар театры үҙ репертуарынан кескәй тамашасылар өсөн тәғәйенләнгән сәхнә әҫәрҙәрен тәҡдим итте. Өлкәнерәк йәштәге тамашасылар М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры, Салауат дәүләт башҡорт драма театры, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берекмәһе, А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының спектакль-терапия, комедия, драма жанрҙарындағы спектаклдәрен бик йылы ҡабул итте. ARTылыш-fest сиктәрендә өфөләрҙең хатта тәүге башҡорт милли балетын - "Сыңрау торна"ны ҡарау мөмкинлеге булды һәм был иҫ киткес тамаша тулы аншлаг менән үтте.

***ART-Ҡоролтайҙың эшлекле йыйыны иһә театр, тарихи-мәҙәни үҙәктәр, клуб, китапхана, музей, кино хеҙмәткәрҙәре өсөн айырым түңәрәк ҡорҙар менән башланып китте.*** Республика театрҙары хеҙмәткәрҙәренең йыйыны "Театр һәм ваҡыт" тигән темаға арналды. "Был ҡор быйыл театрҙар етәкселәре, маркетинг бүлектәре хеҙмәткәрҙәре өсөн тәғәйенләнде. Саҡырылған ҡунаҡтар пандемия шарттарында, тормошобоҙҙа интернет ҙур роль уйнаған осорҙа театр, концерт учреждениелары ниндәй ысулдар ҡулланып, ниндәй юҫыҡта эшләргә, тамашасыларҙы нисек йәлеп итергә һәм улар менән ниндәй мөнәсәбәттәр ҡорорға тигән бөгөн бик мөһим һорауҙарға яуап эҙләне. Театр етәкселәге һәм маркетинг бүлеге өсөн пандемия осоронда һәм унан һуң нисек эшләү мәсьәләһе, әлбиттә, иң мөһиме. Хәҙер хатта театрҙың яңы бер төрө барлыҡҡа килде - ул онлайн-спектаклдәр. Йәғни, театрҙар онлайн күрһәтеү өсөн махсус әҫәр яҙып, спектакль ҡуя һәм был айырым жанрға әүерелә бара. Шундай фекерҙәр әйтелде һәм шәхсән мин дә былар менән килешәм, заман театрының тамашасылар менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейешлеге, ишеткәр һәр ваҡыт асыҡ булырға, төрлө проекттарҙы бойомға ашырырға кәрәклегендә шик юҡ. Республика театрҙары был процесҡа әйәрә, һәр кем үҙенсә эшләй", - тине "Театр һәм ваҡыт" секцияһында эшләгән БР Мәҙәниәт министрлығының һөнәри сәнғәт, мәғариф һәм ижади проекттар бүлеге етәксеһе Зиннур Сөләймәнов.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

***✓ Тирмәне хәтерләткән яңы китапхана бинаһы Ағиҙел йылғаһының ярында урынлашасаҡ, баш ҡалаға аэропорт яғынан ингән халыҡҡа күренеп торасаҡ. Был тәҡдимде барыһы ла дәррәү алҡыштар менән хупланы.***



КискеӨфө

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӘҘӘНИӘТТӘ...

## үҙ юлыбыҙҙы ярыу мөһим



**(Башы 15-се биттә).**

***Шулай ҙа беҙҙең ҡарамаҡҡа иң мөһим түңәрәк ҡор Республика халыҡ ижады үҙәге һәм тарихи-мәҙәни үҙәктәр хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында үткән Башҡортостан халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттарын реестрға теркәү буйынса Эксперттар советының асыҡ ултырышы булғандыр.*** Билдәләнеүенсә, бөгөн Башҡортостан халыҡтарының үҙенсәлекле мәҙәни мираҫынан исемлек төҙөү өлкәһендә төрлө өлкәләрҙән 27 белгес эшләй. Улар иғтибарына был юлы дүрт проект тәҡдим ителде: мари халҡының шывыр уйын ҡоралын эшләү, Баймаҡ районы һунарсыларының башҡорттарҙың бүре аулау йолаһын атҡарыуы, Балаҡатай районының "Берестиночка" халыҡ фольклор коллективының йырлау традицияһы, Балтас районының Иҫке Янбай ауылынан "майаш" мишәр ашын әҙерләү ысулдары. Ғилми хеҙмәткәрҙәр фән күҙлегенән был боронғо йола-ғәҙәттәрҙең әһәмиәтен билдәләп сығыш яһаһа, урындағы халыҡ вәкилдәре үҙ оҫталыҡтарын күрһәтте.

Баймаҡ районы һунарсылары бүрене тереләй алыу ысулдарының береһен эксперттар иғтибарына тәҡдим итте. Ишбирҙе ауылынан ике туған ағалы-ҡустылы Шакир Дәүләткилдин һәм Бөрйән-йылға ауылынан Сәлимйән Улъябаев борондан ата-бабаларынан килгән шөғөлдәрҙе һаҡлап, бүрене тереләй ала. "Бүрене һыбай оҙаҡ ҡына баҫтырып, хәлен алғас, уны һуйыл менән һуғып алабыҙ. Бөгөнгө көнгә мин 12 бүре алдым, Сәлимйән ҡустым 30-ҙан ашыу. Бүрене алғас, бер айға тиклем кәртәлә аҫрап, билдә һуғып, кире иреккә ебәрәбеҙ. Шулай эшләгәндә был бүреләр кире ауылға, кешеләргә яҡын килмәй һәм мал-тыуарҙы ла ҡазаламай. Бүрене кәртәлә оҙаҡ тотмаҫҡа тырышабыҙ, бешкән, тоҙло ризыҡ ашатмайбыҙ. Сөнки ул кешегә өйрәнергә тейеш түгел. Питомниктар, зоопарктарҙан заказ алып та эшләйбеҙ. Был шөғөл еңелдәрҙән түгел. Һунар ҡорамалдарыбыҙ ябай ғына булһа ла, бүре аулау өсөн ат өйрәтеүе лә сабырлыҡ талап итә", - тип һөйләй Шакир Дәүләткилдин. Бала саҡтан белгән ҡомарҙы дауам итһәләр ҙә, Шакир Дәүләткилдиндың төп эше - мәктәп ҡаҙанлығында, ә Сәлимйән Улъябаев - фермер. "Тиҫтерҙәребеҙ кеүек ситкә, Себер яҡтарына сығып, ҙур аҡса артынан ҡыуып йөрөмәнек, ауылда үҙ бәхетебеҙҙе табып донъя көтәбеҙ", - ти Баймаҡ һунарсылары.

Башҡорт халҡының бына шундай борон-борондан килгән йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, шөғөлдәрен махсус исемлеккә теркәү һәм уларҙы һаҡлап ҡалып, киләсәк быуындарға еткереү бик мөһим. Быны федераль кимәлдәге белгестәр ҙә яҡшы аңлай һәм ART-Ҡоролтайҙың пленар өлөшөнән һуң ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй Комиссияһы эргәһендәге матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттары реестрын төҙөү мәсьәләләре буйынса эксперттар советы ағзаһы Наталия Котельникова былай тине: "Реестрға индереү төрлө объекттар менән эш итеүҙе күҙ уңында тота. Объекттарҙың шундай төрҙәре бар, уларҙы һәр кем практикала ҡулланырға мөмкин, мәҫәлән, традицион аш-һыу. Ә бына һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ кеүек шөғөлдәргә ҡағылышлы нәмәләр яңынан популярлаштырыуҙы, ҡулланылышҡа индереүҙе күҙалламай. Бындай объекттарҙы халыҡтың донъяға ҡарашын сағылдырған милли мәҙәниәттең бер өлөшө булараҡ һаҡлап ҡалыу мөһим. Мәҫәлән, башҡорттарға был рәүешле һунар итеү өсөн хатта атты ла махсус тәрбиәләү кәрәк булған. Ә был нимә өсөн эшләнгән? Ҡыҙыҡ өсөн, һунарҙан ҡәнәғәтләнеү тойғоһо алыу маҡсатында ғына түгел. Был - халыҡтың тамырҙары. Һәм уны киң массаға таратып ебәреп була торған йырҙар менән бер рәткә ҡуйыу һис кәрәкмәй. Был шөғөлдө урындағы халыҡ атаһынан улына өйрәтеп ҡалдырасаҡ. Һинең ауылыңда, ғаиләңдә быуындан-быуынға һаҡланып килгән бер шөғөл, белем барҙыр һәм киң таралмағанлыҡтан, уның әһәмиәте һис кәмемәй. Шуға, был объект буйынса эш артабан дауам ителер, тип өмөтләнәм".

***ART-Ҡоролтай форумының пленар ултырышы "Мәҙәниәт берләштерә" тип аталды һәм унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, саҡырылған ҡунаҡтар сығыш яһаны.*** Республика етәксеһе башҡорт халҡының исемдәре онотолған арҙаҡлы шәхестәрен халыҡҡа ҡайтарыу йәһәтенән атҡарылған эштәр хаҡында һөйләне, "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһын тормошҡа ашырыу дауам ителәсәк һәм быйыл республиканың төп 3 милли театрына унар миллион һум аҡса бүленәсәк, тип вәғәҙә итте. "Оҙаҡ уйлашҡандан һуң, Өфөгә йәштәр йыйылыр, белемгә ынтылышлы кешеләр тартылыр ниндәйҙер бер мәғрифәт үҙәге кәрәк, тинек, - тип яңы китапхана бинаһының макетын күрһәтеп һөйләне Радий Фәрит улы. - Унда китаптар фонды, китаптар музейы, лекторий, ирекле ижад зонаһы буласаҡ. Хатта күнекмәләр залы эшләйәсәк, кешеләр шунда килеп, күңеленә яҡҡан барлыҡ эштәр менән шөғөлләнә алырға тейеш. Республика халҡына лайыҡлы наградаларын тапшырыу өсөн тантана залы төҙөйәсәкбеҙ. Был китапхана мультифункциональ буласаҡ". Тирмәне хәтерләткән яңы китапхана бинаһы **(һүрәттә)** Ағиҙел йылғаһының ярында урынлашасаҡ, баш ҡалаға аэропорт яғынан ингән халыҡҡа күренеп торасаҡ. Республика етәксеһенең тәҡдимен йыйындағы барыһы ла дәррәү алҡыштар менән хупланы. Ишембай районының Үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы директоры Айгөл Ҡәҙерғолова ла был яңылыҡты бик ыңғай ҡабул иткән һәм киләсәктә республиканың һәр төбәгендә китапханаларға тейешле иғтибар бүленеп, заманса эшләй баштарына ышаныс белдерҙе. "Заман талаптары шундай, көн дә ниндәйҙер яңылыҡҡа өйрәнеп, халыҡ менән тығыҙ эшләргә, китапханаларға кешеләрҙе үҙебеҙ йәлеп итергә, төрлө саралар үткәрергә тейешбеҙ. Бөгөн ҡала мөхитендә көнөнә 50-60 кеше килә беҙҙең китапханаға, был аҙ түгел. Ә бына Ишембай ҡалаһының үҙәк балалар китапханыһының ишектәре һис ябылмай", - ти ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнгән билдәле композитор Рим Хәсәнов журналистар менән аралашҡан саҡта мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен бер ҡорға йыйған сараның атамаһы тураһында үҙ фекерен белдереп: "Art" һүҙе инглиз теленән алынған һәм "сәнғәт" тигәнде аңлата, ә нишләп "Мәҙәни ҡоролтай" тимәҫкә? Башҡалар ҙа беҙҙең һүҙҙе әйтһен", - тигәйне. Ысынлап та, бигерәк тә бөгөн мәҙәниәт өлкәһендә үҙ сәнғәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, ғәҙәттәребеҙҙе үрнәк итеү, үҙебеҙҙең талантлы шәхестәребеҙҙе күрә белеү, үҙ юлыбыҙҙы ярыу мөһим. Был йәһәттән беҙҙә эштәр атҡарылмай түгел, атҡарыла. ART-Ҡоролтай нәҡ шул эшмәкәрлекте сағылдырырға ярҙам иткән бер майҙанға әүерелә барыуы ҡыуандырҙы.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ ЕГЕТ...

## ил ғәйебен асмаҫ

Алтын башлы ҡатындан баҡыр башлы ир артыҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Балаларҙы шаянлыҡтан тыйһағыҙ, һеҙгә бер ваҡытта ла аҡыл эйәләре тәрбиәләргә тура килмәҫ.

**(Жан-Жак Руссо).**

Үҙ-үҙе менән ғәҙел булмағандар бер ваҡытта ла ғәҙеллек күрмәҫ.

**(Томас Фуллер).**

Ҡатын-ҡыҙҙы үҙең менән мауығырға мәжбүр итеү оло еңеү түгел. Унда яуап хисе - мөхәббәт уты тоҡандырыу барыһынан да ауырыраҡ.

**(Инге Берристер).**

Хоҙай бөйөк кешеләрҙең мәхрүмлектәр менән көрәшеүен күҙәтергә ярата.

**(Роберт Бартон).**

Артыңа әйләнеп ҡара әле: бәхет беҙҙең күләгә генә икәнен аңларһың.

**(Фелине Виллаеспеса).**

Бәхет һәр кемгә ишек ҡаға ул, тик кемдер ул килгәндә өйҙә булмай сыға.

**(Аноним).**

Йәшлек бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаҫтай нәмәләр тураһында хыяллана, ҡартлыҡ бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаған нәмәне хәтергә ала.

**(Гектор Манро).**

Танау аҫтындағыһын күреү өсөн күп талант кәрәкмәй, ә бына танауҙы ҡайһы яҡҡа борорға икәнде белеү ябай эштәрҙән түгел.

**(Уистен Оден).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡал уҡыусыларын эйәртеп, урман буйлап китеп барғанда юлына урмансылар осрай. Улар йөҙәрләгән ағасты киҫеп, юл ситенә өйөп һалған. Әммә ағастарҙан бушаған майҙанда бер йыуан ағас ҡына һерәйеп ултырып ҡалған. Аҡһаҡал был ағастың ниңә киҫелмәй ҡалыуы тураһында һорашҡас, ағас киҫеүселәр: "Ә был ағас файҙаһыҙ, ул бер эшкә лә яраҡһыҙ, унан хатта йорт йыһазы ла яһап булмай", - тип яуап бирә. Шунда аҡһаҡал уҡыусыларына табан борола ла, былай ти: "Ошо ағастан файҙаһыҙ булырға өйрәнегеҙ. Шул саҡта һеҙгә бер кем дә теймәҫ. Был бик бөйөк ағас. Ҡарағыҙ, уның тирә-яғындағы бар ағастар йығылған, һәләк булған. Улар тәҙ һәм һомғол булғандыр. Улар, моғайын, үҙҙәренең ошо тышҡы йөҙө менән ғорурланғандыр. Шул арҡала ул кемдәргәлер кәрәк булғандыр. Шуға ла файҙаһыҙ булығыҙ, ләкин был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңларға тырышығыҙ: тауарға, әйбергә әйләнмәгеҙ, юҡһа, һеҙҙе һатасаҡтар һәм һатып аласаҡтар..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22013

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу** **246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
1 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3387
Заказ - 401

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.